ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

2-8 май (һабанай) 2020

№ 18 (904)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туған тел...** берләштерҙе 5



**Үҙендеке - үҙәктә,** ситтәрҙеке - кешнәктә 8-9



**Яраталар икән,** тимәк, һин донъялағы иң матуры 11,16



**Квантун һалдатын** йәлләгән башҡорт егете 12-13



**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм йәмәғәт! 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Алты айға яҙылыу хаҡы 694 һум 34 тин. Почтальондан яҙҙырыу мөмкинлеге булмаһа, өйҙән сыҡмай ғына яҙылыу өсөн "Почта России" podpiska.pochta.ru сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Офо" тип, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит" тигән халыҡ аҡылы ата-бабаларыбыҙҙа ниндәй хәлдәрҙә лә киләсәгенә ышаныс менән ҡарарға ярҙам иткән, күңелен бөтәйткән, аслыҡ афәтенән ҡотҡарған. Ошо аҡылды тотоп йәшәйһегеҙме, баҡсағыҙҙа нимәләр үҫтерәһегеҙ?

***Раушания КӘЛИМУЛЛИНА, уҡытыусы, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:*** Ауылда йәшәгән апайым бәйләнешкә шундай сәләмен яҙып ебәргән: "Мөгәрәпте асыҡ, былтыр көҙ орлоҡлоҡ бик күп картуф һалып ҡалдырғайныҡ. Алла бирһә, сир тымып, донъялар тынысланһа, ҡайтып алып китер инең, юҡһа, таратып бөтөүем дә бар. Шул көнө үк балаларын яңғыҙы ҡараған Гөлкәй бер биҙрә һорап алып та китте, ашарыбыҙға юҡ тип иламһырағас, йәлләнем инде. Ярай, хәйерҙән булыр, тинем..." Бына шулай хәҙер беҙҙең ауылда: берәүҙәр эшләй, сәсә, тир түгә, ә икенселәр биҙрә, туҫтаҡ тотоп, меҫкенләнеп һоранырға әҙер генә тора. Был ҡатындың өс балаһы өс атанан, картуф та сәсмәй, мал да аҫрамай. Ҙурайып килгән ике ир балаһы менән буйтым баҡса сәсеп, тауыҡ-кәзә булһа ла аҫрап көн итерлектәре бар ҙа бит, улары әсәләренә баш бирмәй, ни эшләмәй, ни йүнләп уҡымай, аҙып-туҙып йөрөй башланылар. Бөгөн ауылда баҡса үҫтермәй, мал тотмай йәшәгән кешегә аптырайым: башҡа эш юҡ, ни менән көн үткәрә икән улар? Баҡса уңышы үҙе ҙур бол бит ул ҡәҙерен белгән кешегә, муллыҡ, күңел көрлөгө, ауылдаштарының ихтирамы, ниһайәт.

Бындай ихтирамға лайыҡ етеш тормошта гөрләтеп донъя көткәндәр күп ауылда. Тик, баяғыса, ғаилә ғәрипһеҙ булмай тигәндәй, ялҡауҙар ҙа бар. Ундайҙар ҡырҡ төрлө сәбәп таба. Мал аҫрау, ысынлап та, еңелдән түгел, бигерәк тә яңғыҙ донъя көткәндәргә. Ә бына баҡса үҫтереү ҡулдан килә торған эш бит. Ҡалала баҡсам булмаһа ла мин быны яҡшы беләм: ауылда үҫеп буй еткерҙек, әле лә йәй апайыма ҡайтып ярҙам итәм. Ул өлкәнәйеп килһә лә һаман мал аҫрай, күп итеп картуф, йәшелсә сәсә. Мал тотҡас, ашлама бар, ташҡабаҡ, ҡыярҙары тәгәрәшеп ятып уңа, күҙ теймәһен. Үҙенә лә, ҡалала йәшәүсе балаларына ла етә. Ауылда түгел, хәҙер ҡалала ла баҡса тотоусылар күп. Ҡыш буйы үҙҙәрен дә тәьмин итәләр, магазиндан йәшелсә-емеш, картуф һатып алмайҙар. Артып ҡалғанын һатып, файҙа ла алалар.

Әйткәндәй, баҡса миҙгеле лә килеп етте бына, тик коронавирус арҡаһында тәүҙә унда барырға рөхсәт ителмәһә, хәҙер был сикләү бөтөрөлдө. Республика Башлығы Радий Хәбиров был мәсьәләгә айырым иғтибар биреүҙе һораны. "Баҡсаға барыуҙы тыймайбыҙ, - тине ул был турала. - Был үҙенә күрә шулай уҡ үҙизоляцияланыу булһа, икенсе яҡтан, запас аҙыҡ-түлек туплау сараһы ла, сөнки уның кәрәк булыуы бик ихтимал". Шул уҡ ваҡытта Р.Хәбиров баҡсасылыҡ эштәрендә кәрәк булған тауарҙар һәм орлоҡ менән сауҙа итеүсе ойошмалар: магазиндар, баҙарҙарға үҙ эштәрен башларға рөхсәт биреүсе указға ҡул ҡуйҙы. Тағы ла ҡала баҡсасылары шуны ла белергә тейеш: дачаһына, баҡса участкаһына үҙ машинаһында юлланыусылар "Дорога 02 " порталында теркәлеп, регистрация ҡағыҙын тултырырға һәм уны телефонына төшөрөп йә принтерҙан сығарып алырға тейеш була. Бына ошо документ уға баҡсаға барыу өсөн пропуск хеҙмәтен үтәйәсәк тә. Баҡсаға йәйәү йә йәмәғәт транспортында барыусыларға был ҡағылмай, ләкин кәрәкле документтарҙы үҙең менән алып йөрөү хәйерлерәк. Ауыл халҡы өсөн бындай сикләүҙәр булмағас, улар рәхәтләнеп йорт яны баҡсаларында эшләй алалар, тик сир генә барып етә күрмәһен ауылдарыбыҙға, иҫән-имен булайыҡ!

**(Дауамы 2-се биттә).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# АЛҒА, БАШҠОРТОСТАН, АУЫЛҒА!




**Совет осоронан килгән традиция буйынса беҙ әле лә 1 Май көнөн байрам итәбеҙ. Заманында ул, хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө булараҡ, сәйәси маҡсаттарҙа билдәләнһә, хәҙер Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы тип атала. Нисек кенә булмаһын, ярым ирекле, ярым мәжбүри рәүештә ойошторолған халыҡ демонстрациялары тыныс, инде тамам күнегеп бөтөлгән ҡәҙимге совет тормошона ниндәйҙер бер йәнлелек өҫтәп, хатта ки ошо байрамға ғына хас йәм һәм күтәренкелек биреп торор булды. Былар хәҙер ошо ваҡыттарҙан ҡалған фотоларҙа һәм беҙҙең хәтеребеҙҙә генә ҡалды.**

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

*✓ Ҡайҙа тыуғанһың - шунда тор, тигән ҡағиҙә онотолоп, ғәзиз еребеҙ ситтәр ҡулына ҡалып бара. Эш-шөғөлдө ситтән эҙләү сәбәп быға. Ер ябып үҫкән ризыҡ-ниғмәттең ҡәҙерен белмәйбеҙ, тотонмайбыҙ.*

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# АҢЫБЫҘ АСЫЛҺЫН ИНЕ



**Был коронавирус сире алып килгән ҡурҡыуҙан күптәрҙең ҡото алынды, шулай булғас, тормошобоҙҙа, бигерәк тә медицина, фән, мәғариф, иҡтисад, сәйәсәт өлкәләрендә үҙгәрештәр булыр тип уйлайым.**

Үҙгәрештәр бигерәк тә әҙәмдәр аңында барырға тейеш. Күпкә китһә, майлы булһа ла бутҡа ла ялҡыта, тигәндәй, быға тиклем заман шауҡымында аңыбыҙға "сәскәндәрҙе" ура башларға ваҡыт инде. Юҡһа, бихисап бит тыйылғандан тыйыла, сабыр, шөкөр итә белмәй, тел менән тирмән тартып, ауырыуға себен эйәләтеп, илдекен талап, төймәләй эш күрһәтеп, ялтыраһа - минеке, ҡалтыраһа - һинеке, тип йәшәгәндәр.

Үҙебеҙҙең башҡорттоң көнитмешенә генә күҙ һалғанда ла, күпме тайпылыштар кисерҙек ошо йылдарҙа. Ҡайҙа тыуғанһың - шунда тор, тигән ҡағиҙә онотолоп, ғәзиз еребеҙ ситтәр ҡулына ҡалып бара. Эш-шөғөлдө ситтән эҙләү сәбәп быға. Ер ябып үҫкән ризыҡ-ниғмәттең ҡәҙерен белмәйбеҙ, тотонмайбыҙ. Эйелеп алырға, өҙөп ҡабырға йыбанып, әҙергә-бәҙер булып киттек.

Шул уҡ дауаланыуҙы ғына алһаҡ та, һәр йүткергәнгә-сөскөргәнгә лә дауаханаға йүгерәбеҙ, аяҡ аҫтыбыҙҙа үҫкән дауа-үләндәрҙе һанға һуҡмайбыҙ. Ирҙе үлтермәҫ ирәүәнде, атты үлтермәҫ андыҙҙы һ.б. онотоп барабыҙ. Ауылдың хөрриәтлеге лә шунда бит: бала саҡта аяҡ-ҡул һыҙырылһа, ҡанаһа - йода япрағы, яраң эренләп-боҙолоп барһа - юл япрағы таба һалып урап ҡуйып, теш һыҙлаһа - сырмалсыҡ сәйнәп, эс китһә - әрем, муйыл ашап, тән температураһы күтәрелһә - тәҙрә боҫо, һыуыҡ һыулы сепрәк ябып дауалана инек тәһә. Врач та кәрәкмәй, хатта әсәй ҙә белмәй ҡалыр ине күп ваҡыт...

Ауырыу - аштан, дау - ҡәрендәштән, таҙ - таныштан, ҡутыр - ҡамыштан, ти халыҡ мәҡәле. Үҙебеҙҙең ата-бабаларҙың ваҡыт һынауын үткән көнитмеш ҡағиҙәләре менән йәшәһәк, һәр хатанан тейешле һабаҡ ала белһәк, донъя баҫҡан был афәттән дә еңел генә ҡотолоп ҡалыр инек. Ауырыу хәлен кеше белмәҫ, үҙ башына төшмәһә, ти халыҡ мәҡәле. Төштө бит башыбыҙға! Заманына күрә - ғәмәле, ти. Ҡылған ғәмәлдәребеҙ атты арытмаҫ, тунды туҙҙырмаҫ булһын инде. Тау артындағы хыял-маҡсаттарҙы ауыҙлыҡлап, ишек артындағы бәлә-ҡазаларға ҡаршы тора алырлыҡ хәлдә булып, әмәл-йүнен тапһаҡ икән.

Әйткәндәй, "Алай ҙа ғына ауылда йәшәйбеҙ", тип ҡыуанып ҡуябыҙ бабайым менән. "Беҙ өйҙә ултырабыҙ" тигәнде беҙ "Ер эйелгәнде ярата" тип аңлайбыҙ. Баҡса, ишек алды тулы эш алай ҙа.

Бөтә кешенең дә хәле бер иш түгел, әлбиттә. Хаҡлы ялдағыларға, ҙур мохтажлыҡтары булмаһа, һауһаҡ та булһалар, еңелерәктер. Ә бына эштәренә бара алмай, ҡамауҙа ҡалғандарға, ҡаланың таш диуарлы йорттарында йәшәгәндәргә сабырлыҡ, түҙемлек насип итһен Аллаһы Тәғәләбеҙ! Ил-йортобоҙ тыныс тороп, ҡороғорвирусы тиҙерәк ҡороһон инде! Бәхет-сәғәҙәттә, эш-аш бәрәкәтендә имен-һау йәшәргә яҙһын кешелеккә!

**Фәнүзә ИШБАЕВА,**
**Бөрйән районы, Байназар ауылы ағинәйе.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит" тигән халыҡ аҡылы ата-бабаларыбыҙға ниндәй хәлдәрҙә лә киләсәгенә ышаныс менән ҡарарға ярҙам иткән, күңелен бөтәйткән, аслыҡ афәтенән ҡотҡарған. Ошо аҡылды тотоп йәшәйһегеҙме, баҡсағыҙҙа нимәләр үҫтерәһегеҙ?



**(Башы 1-се биттә).**

***Фәрхизә ШӘЙМӘРҘӘНОВА, йорт хужабикәһе, Яңауыл районы:*** Пенсия алдыҡ. Апрелдән арта тигәс, бик ҡыуанғайным. Үземсә төрлө пландар ҡороп бөттөм. Тик пенсиям күләме элеккесә үҙгәрешһеҙ булып сыҡты. Эйе, хөкүмәтте лә аңларға була: ауыр замандар килде бит. Аҡса һораусылар, хатта талап итеүселәр күбәйҙе. Нефткә хаҡ осһоҙланып, һумдың хәле ауырлашыуы бер яҡтан килтереп һуҡһа, бынау коронавирус сире икенсе яҡтан ауырлыҡ тыуҙырҙы. Ошондай ваҡытта ла әле балалы ғаиләләргә, аҙ тәьмин ителгәндәргә, ауырыуҙарға матди ярҙам саралары күрһәтелеп тора. Шуларҙы уйлайһың да, аҡса нимәгә, һау ғына булайыҡ, тип тә ҡуям. Баҙым тулы байлыҡ: ул картуфы-йәшелсәһе тиһеңме, ул төрлө салаты, компоты-ҡайнатмаһы булһынмы... Туңдырғысым тулы ит. Һарайымда тауыҡтарым, күңелле йырын йырлап йомортҡа һала. Һыйырым көн дә ҡаймаҡ ҡуйылығы һөтөн биреп тора. Эй, онотоп торам: ларым тулы он. Икмәгемде күпертеп бешереп алам, Аллаға шөкөр. Барыбыҙ ҙа иҫән-һау ғына булайыҡ та, иренмәйенсә генә ер-әсәбеҙ ҡуйынына үҙебеҙ теләгән йәшелсә-емеш орлоҡтарын сәсеп, киләсәгебеҙҙе хәстәрләйек, көҙөн мул уныш алып, етеш, бәхетле йәшәйек, амин. Быйыл да, һәр йылдағыса, бәрәңге, кишер, шалҡан, ташҡабаҡ, ҡабаҡ, ҡыяр, помидор үҫтерербеҙ, тип торам. Аллаға шөкөр, мал аҫрайбыҙ. Әлегә тиклем ике һыйыр һауҙым, башмаҡ-һарыҡтар ҙа тоттоҡ, тик ваҡ мал һанын бер аҙ кәметтек, сөнки тере малды ла, итте лә һатыуы ауыр. Яҡын-тирә район-ҡалаларҙағы ит эшкәртеүсе, колбаса етештереүсе предприятиелар ниңә экологик таҙа ауыл итен һатып алыуҙы ойоштормай икән, тип гел аптырайым. Был күптәнге ҡырҡыу мәсьәләне, әлбиттә, хөкүмәт кимәлендә хәл итеү кәрәк шул.

Бер нәмәгә ҡарамай, ер йөҙөнә яҙ килде... Баҡсамдағы алмағастарым да тиҙҙән аҡ болот кеүек сәскәләргә төрөнөр. Унан ҡарағат, ҡурай еләктәре, ер еләге өлгөрөр. Ауырлыҡтар илебеҙ өсөн ҙур ҡазаларһыҙ ғына тиҙерәк үтеп китә күрһен ине, тип теләйем. Тәүге шытым биргән үҫентеләргә, терелеп килгән тәбиғәткә ҡарайым да, бөтәһе лә һәйбәт булыр тип күңелемде тынысландырам.

***Марат ФӘЙЗРАХМАНОВ, һәүәҫкәр баҡсасы, Өфө ҡалаһы:*** Халыҡ аҡылы - алтын инде ул, сәсеп кит тип бик дөрөҫ әйтелгән. Берҙән, сәсеү, ер-баҫыу-баҡса эштәре тормоштоң дауам итеү символы ул минең өсөн. Ҡыйынлыҡтар һәр заманда ла булып торған. Әле һеҙҙең һорауҙа килтерелгән әйтемде халыҡ заманында һауанан алып әйтмәгәндер бит. Тимәк, ниндәйҙер хәүеф, ҡурҡыныс, ә ул замандар осрағында ҡарымта-барымта яуҙары, илде дошман баҫып алыу, йә баш күтәргән ауылдарға батша карателдәре янауы сәбәпле әйтелгәне аңлашыла. Беҙҙең осраҡта иһә халҡыбыҙға иҡтисади көрсөк, уның менән ярышлап мәкерле, яуыз сир янай. Шуға ҡарамаҫтан, баҫыу-ҡырҙар трактор, башҡа төр техника гөрләүенә күмелде. Был тере тормош тауышы күңелде тынысландырып, киләһе көндәребеҙгә өмөт уятып, дәртләндереп ебәрә. Шуға ла үҙизоляция иғлан ителһә лә, тормошто телевизорҙан йә тәҙрәнән генә күҙәтеп ятырға түҙемлек етмәне: баҡсаға барырға ярай, тигән рөхсәт ишетелеү менән баҡсама киттем дә барҙым. Баҡһаң, күптәр шулай эшләгән: өй, мунса мөрйәләренән төтөн борлай, балта-йышҡы тауыштары сыға, эттәр өрә, ситән аша күршеләр әңгәмәләшә: ҡыҫҡаһы, тормош ҡайнай бында. Бер ниндәй сир ҙә юҡ, ул турала һүҙ ҡуйыртыуҙар ҙа ишетелмәй - йәнгә рәхәт. Тынысланып, эшкә тотондом. Иң тәүҙә баҡсаны былтырғы ҡороған үлән, сүп-сарҙан таҙартып алдым. Сәсергә әле иртәрәк, ер һыуыҡ, тиһәләр ҙә, кишер менән сөгөлдөр орлоҡтарын әҙерләп ҡуйҙым: улар һыуыҡҡа бирешеп бара торғандарҙан түгел. Көндәр йылына төшкәс, башҡа йәшелсәләргә лә сират етер. Бер аҙ картуф та сәсермен тип, мөгәрәпкә һалып ҡалдырған картуфты сығарҙым. Бик һәйбәт һаҡланған, әйтерһең дә, кисә генә ҡаҙып алынған. Әле ашарға ла етерлек, ҡалғаны, әйҙә, киләһе уңыш өсөн шыта торһон. Быйыл картуфты күберәк сәсермен, тимен: кем белә, был көрсөк эҙемтәләре күпмегә һуҙылыр ҙа, аҙыҡ-түлек хәлдәре нисек булыр... Яҡшыға өмөт итәйек, шулай ҙа запасһыҙ ҙа тороп ҡалмайыҡ. Әллә ҡайҙағы Египет, Израиль картуфын икеләнә-шикләнә ашап ултырғансы, үҙең тәрбиәләп үҫтергән ризыҡҡа ни етә!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓30 апрелгә оператив мәғлүмәттәр буйынса, хәҙер Башҡортостанда 766 сирле иҫәпләнә. Бер тәүлектә улар 75 кешегә артҡан. Республикала 766 ауырыуҙың 120-е һауыҡҡан, 14-е үлгән. Һуңғы тәүлектә Рәсәй төбәктәрендә бөтәһе 7099 яңы коронавирус осрағы раҫланған, 101 үлем осрағы теркәлгән. Тәүлек эсендә 1333 кеше һауығып сыҡҡан. Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә 106498 кеше коронавирус йоҡторған, уларҙың 11619-ы һауыҡҡан, 1073-ө вафат булған. 30 апрелгә ҡарата, ил төбәктәрендә 3,49 миллиондан ашыу кешегә яңы коронавирус инфекцияһына тикшереү үткәрелгән.

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Бәләбәй үҙәк район дауаханаһында коронавирус инфекцияһы Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы сценарийы буйынса таралыуын таныны. Брифингта Роспотребнадзор вәкиле Венер Изикаев район дауаханаһында 44 пациентта һәм табипта COVID-19 диагнозы раҫланыуын билдәләне. Был республикала сирлеләр һаны буйынса икенсе урын. Беренселә - Өфө (631-ҙән 240 ).

✓Владимир Путин коронавирусҡа бәйле хәл буйынса төбәк башлыҡтары менән кәңәшмәлә ял көндәрен һәм үҙизоляция режимын 11 майға тиклем оҙайтыу тураһында иғлан итте (6,7,8 майҙа ла ял була). Шулай уҡ Хөкүмәткә, Роспотребнадзорға 5 майға 12 майҙан башлап карантиндан этаплап сығыу планын әҙерләргә ҡушты. "Туҡтата алдыҡ, ләкин хәл ҡатмарлы булып ҡала. Ауырыуҙың юғары нөктәһенә етмәгәнбеҙ. Көрәштең иң көсөргәнешле этабы алдында торабыҙ, хәүеф һаҡлана һәм уның һәр кемгә ҡағылыуы ихтимал", - тип билдәләне ул.

✓Өфөлә 21-се дауаханала карантин бөтөрөлдө, тип хәбәр итте республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин. Медицина учреждениеһы штат режимында эшләй башланы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, дауаханала яңы коронавирус инфекцияһына шик менән пациент табылғас, 13 апрелдә клиника карантинға ябылғайны.

✓1-5 һәм 9-11 майҙа баҡсасылыҡ ширҡәттәренә маршруттар йөрөй, тип хәбәр иттеләр "Башавтотранс" компанияһынан. Пассажирҙар битлектәр һәм бирсәткәләр кейергә, социаль дистанцияны тоторға тейеш. Мәғлүмәтте түбәндәге телефондар буйынса ла алырға мөм кин: "ҡыҙыу бәйләнеш" - 262 66 62; 121-се, 128-се,132-се маршруттар өсөн - 8 937 330 81 32; 111к, 152-се, 120-се маршруттар өсөн - 8 937 492 91 99.

БЫЛ АЙҘА...

**Быйылғы яҙ айҙары өлөшөнә ғүмере күрелмәгән шундай һынауҙар төшөр тип кем уйлаған... Улай тиһәң, кемдер уйлаған да һымаҡ бит. Шулай булмаһа, был ҡырғындың ер аяғы ер башындағы Ҡытайҙа яралып, ярты ер шарын баҫып ала-ала әкренләп Рәсәйгә шыуышыуы христиандарҙың үлеп терелеү символы булған - Пасха, ә мосолмандарҙың иһә бөтә айҙарҙан да яҡшыраҡ һәм яҡтыраҡ, Аллаһтың игелектәре, мәрхәмәт-шәфҡәттәре һәм гонаһтарҙы ярлыҡауы менән тулы булған Шәғбан һәм изге Рамаҙан айҙарына тап килеп кенә тороуын башҡаса нисек аңлатырға?**



# ТАРИХҠА ТОҒРОЛОҠ - ИМАНДАН

Аллаһ яралтҡан яҡты донъябыҙҙы һөрөмгә күмеп бысратҡан, Аллаһ хозурындағы тәбиғәт хазиналарын ҡырған, һулар һауабыҙҙы, эсәр һыуыбыҙҙы ағыулап бөтөргән һәм байлыҡ, аҡса, нәфсе ҡолона әүерелә барған кешелекте аңына килтерер яза сараһылыр был, тигән фекерҙә ҡайһы берәүҙәр. Әгәр шулай булһа, гонаһтарын танып, үкенеү кисереп, тәүбәгә килер өсөн бик әҙ ваҡыт бирелә: ул да булһа, был - Рамаҙан айы - Ураҙа. Был айҙа, әйтерһең дә, хаҡ мосолмандарға илаһи миссия йөкмәтелә: үҙ мәнфәғәтендә, үҙ гонаһтары өсөн генә түгел, ә барса донъя халыҡтары именлеге хаҡына ла бер ай ураҙа тотоп, көнө-төнө доға-намаҙҙа булып, Аллаһтан ярлыҡау һорау, Уның ҡөҙрәтенә ялбарыу.

Гонаһһыҙ кеше юҡ, тиһәләр ҙә, ябай мосолман халҡы барыбер ҙә оло гонаһтар ҡылыуҙан айбынып йәшәй: уның серегән байлығы ла, сит ил банктарына йәшерерлек миллиардтары ла, һарай-һарай йорттары ла юҡ; фәҡәт намыҫы үә иманы бар, ин шаа Алла. Бәлки, тап шуға күрә лә был изге айҙарҙа асмандарға ашыр ауаздарҙың фәҡәт көйлө-моңло иман һабаҡтары, Ҡөрьән сүрәләре һәм доғалар ғына булып яңғырауын теләйҙер Илаһи ҡөҙрәт эйәһе? Аллаға тапшырып, Рамаҙан айына өмөт бағлайыҡ: тап ошо ай һынылыш булһын, яман сир баҫыла, кәмей барһын, юҡҡа сыҡһын, дөмөкһөн. Ә беҙ, Аллаға ышан, тик үҙең дә һынатма, тигән әйтемде хәтерҙә тотоп, мәлгүн сирҙе еңеүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индерәйек: иғлан ителгән дөйөм тәртипкә буйһоноп, әҙәп һәм дә сабырлыҡ менән өйҙәребеҙҙә эшләп ултырайыҡ. Кемдәр йөрәп эшләй - улар һаҡланыу сараларын күрһен. Иң мөһиме - һаулыҡ икәнен иҫтән сығармайыҡ.

Халыҡ һаулығы минең өсөн иң беренсе урында, тине бит ил Президенты В.Путин да беҙ йыл буйына көтөп алған Еңеү көнө **(9)** тантаналарын һәм хәрби парадты кисектереп тороу хаҡында ҡарар ҡабул иткәндә. Дөрөҫ ҡарар булды был һәм ул бөйөк Еңеүҙең донъяүи әһәмиәтен һис кенә лә кәметмәй, киреһенсә, мөмкин тиклем аҙ юғалтыуҙар һәм берҙәмлек менән сирҙе еңеүгә булышлыҡ ҡына итәсәк. Халыҡ рухы, уның характер ныҡлығы ил өҫтөнә оло яу, һынау килгәндә беленә. Ҡырғын - шул уҡ дошман, шул уҡ яу ул. Уға ҡаршы берҙәмлекте алға ҡуйып, үҙебеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың хәүефһеҙлеге өсөн көрәшәйек. Президент әйтмешләй, төрләнөн күрҙе беҙҙең ил, ләкин бирешмәне, һәр саҡ еңеүсе булып сыҡты.

Был сир ҙә сигенер, күрә көмер, шул ваҡытта икеләтә еңеү тойғоһо менән беҙ бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын байрам итербеҙ, Мәскәүҙәге хәрби парадты ла ҡарарбыҙ, "Үлемһеҙ полк" сафтарына ла баҫырбыҙ. Ә әлегә өйҙә булыу форсатын файҙаланып, 9 Май көнөн һәр кем үҙ йортонда, ғаиләһе янында ҡаршылар, шул һуғышта ҡатнашҡан, шәһит киткән туғандарын, яҡындарын иҫкә алыр, ә ундай кешеләр һәр ғаиләлә бар. Улар иҫтәлеген ҡәҙерләү, иҫкә алыу милли йолабыҙға әүерелгән. Календарь планда Еңеү көнө беҙҙән ни тиклем генә алыҫлаша бармаһын, хәтер кимәлендә ул беҙгә шул ҡәҙәре яҡыная бара, сөнки ул һәр бер ғаиләнең йөрәк яраһын ҡуҙғыта, хәтирәләрен яңырта.

Ҡаһарман үткәндәребеҙгә тоғролоҡ һәм тере хәтирәләребеҙ менән көслөбөҙ. Советтар илендә йәшәгәндә лә, бөгөнгө Рәсәй өсөн дә миллионлаған ҡорбандар биреп яуланған был көн изге һәм ҡәҙерле. Шөкөр, беҙҙә халыҡ хәтерен май бөрмәгән. Ә бына Икенсе донъя һуғышы башланыу менән бер ҡаршылыҡһыҙ фашистарға ҡол булып баш һалған Европа илдәренең хәтере ҡыҫҡа булып сыҡты. Фашист итеге аҫтында иҙелгән был илдәр үҙен ҡоллоҡтан ҡотҡарған Советтар иленә, унан ҡала - Рәсәйгә, азатлыҡ илткән совет һуғышсыһы иҫтәлегенә һәм бөйөк Еңеү асылына хыянат ҡылып, икейөҙләнеп күрһәтә, һәйкәлдәрҙе емерә, тарихты үҙ файҙаһына боҙоп күрһәтергә маташа. Шул уҡ ваҡытта Европа бөгөн тағы афәт ҡоллоғонда: яман сирҙән ҡырыла - Рәсәй тағы уға ярҙамға ашыға... Тарих хәтере тере, тарихтар юҡ-юҡта ҡабатланып тора: үткәндәргә хыянат иткәндәргә ул үҙе хаҡында ана шулай иҫкәртә. Тарихҡа тоғролоҡ - иленә, дуҫлыҡҡа тоғролоҡ кеүек үк, имандың бер өлөшөләр...

Ә хәҙер был айҙағы байрам һәм иҫтәлекле көндәр теҙмәһен күҙҙән үткәрәйек.

Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы. Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө **(1)**, Совет ғәскәрҙәре тарафынан фашистик Германияның баш ҡалаһы Берлинды алыуға 75 йыл **(2 май 1945)**, Бөтөн донъя ирекле матбуғат һәм Ҡояш көндәре **(3)**, Халыҡ-ара акушерка, Инвалидтар хоҡуғы өсөн халыҡ-ара көрәш көндәре **(5)**, Радио һәм элемтә хеҙмәткәрҙәре көнө **(7)**, фашистик Германияның бер һүҙһеҙ капитуляцияға бирелеүе хаҡында Актҡа ҡул ҡуйылыуға - 75 йыл **(8 май 1945)**, Еңеү көнө. 1941-1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында еңеүгә - 75 йыл **(9)**, Бөтөн донъя шәфҡәт туташы көнө **(12)**, Халыҡ-ара ғаилә, Халыҡ-ара климат көндәре **(15)**, Халыҡ-ара музейҙар көнө **(18)**, Ҡәҙер кисе **(19)**, Ураҙа байрамы **(24)**, Филолог көнө, Юғалған балалар көнө **(25)**, Рәсәй эшҡыуарлыҡ көнө **(26)**, Бөтә Рәсәй китапхана көнө **(27)**, Сик һаҡсылары көнө **(28)**, Бөтә донъя тәмәкеһеҙ көн **(31)**.

**Һабанайҙа тыуғандар:**

**3 -** журналист, яҙыусы, 1999 - 2015 йылдарҙа "Ватандаш" журналының баш мөхәррир урынбаҫары, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты **Сәлимйән Бәҙретдиновҡа - 70 йәш** (1950).

**5 -** философия фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Сәйәси фәндәр академияһы ағзаһы **Дамир Азаматовҡа - 80 йәш** (1940).

**9 -** анестезиолог-реаниматолог, 2003-2017 йылдарҙа Республика перинаталь үҙәгенең баш табибы, медицина фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Фирғәт Байрамғоловҡа - 60 йәш** (1960).

**22 -** зоотехник, хужалыҡ һәм йәмәғәт эшмәкәре, Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор, Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Әмир Ишемғоловҡа - 60 йәш** (1960).

**-** журналист, "Ашҡаҙар" радиоһы мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре **Фәнүзә Баһаутдиноваға - 55 йәш** (1965).

**23 -** йырсы, "Юлдаш "радиоһының "Яңылыҡтар" программаһын алып барыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Фәрүәз Урманшинға - 50 йәш** (1970).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ТЕЛ ҠАЙҒЫҺЫ БЕҘҘӘ...

Стәрлетамаҡ ҡалаһынан бер ҡатын шылтырата. "Ғәфү итегеҙ, көн-төн туған телдә һөйләшеү, туған телдә уҡытыу тураһында аҡыл һатаһығыҙ, бына әле телевизорҙан һеҙҙең сығышығыҙҙы тыңланым, һеҙ ҙә шул бер үк балыҡ башын сәйнәйһегеҙ. Халыҡ шул тиклем бөлгөнлөктә йәшәгәндә тел ҡайғыһымы ни бында!" - тип ебәрҙе был. "Ә һеҙҙә нимә ҡайғыһы һуң?" - тип һорайым тыныс булырға тырышып. Теҙеп алып китте ханым: ҡыҙы ауырый, уны сит ил клиникаһына алып барырға аҡсалары юҡ; улы ипотека түләй, йүнле эш урыны юҡ; Татарстанға күсеп китергә уйлайҙар, әммә ике йыл инде фатирҙарын һата алмайҙар; ире машинаһын алыштырырға аҡса туплай алмай, эш хаҡы бәләкәй... Ҡыҫҡаһы, аҡса етмәй был ханымға. Татарстанға күсеп китһәләр, аҡса ла, башҡаһы ла булыр ине, тип өмөтләнә. Республика етәкселәренә хат яҙған, Рәсәй Президентына хат яҙған (нимә тураһында яҙғанын бик үк аңғарманым), әммә уны ҡәнәғәтләндерерлек яуап ала алмаған.

Мин был ханымды бары тик тыңланым ғына, бер ниндәй һүҙ ҙә ҡыҫтырманым. Һүҙгә ҡушылырға форсат та булманы, сөнки уны хупларлыҡ та, кире ҡағырлыҡ та урын юҡ ине. Аҡсаға, эйе, һәр кем мохтаж, аҡсаһыҙлыҡ арҡаһында, эйе, беҙҙең күп хыялдар тормошҡа ашмай, ихтыяждар ҡәнәғәтләндерелмәй ҡала. Ләкин... Бар тапҡан-таянғанын балалары туған телендә һөйләшһен, туған телендә йырлаһын, тарихи тамырҙарын белһен, нәҫелен, милләтен дауам итһен өсөн шарттар тыуҙырыуға йүнәлткән илһөйәр, телһөйәр атай-әсәйҙәр ҙә етерлек бит арабыҙҙа. Әлбиттә, бындай рухи ҡиммәттәр тураһында хәстәрләгән кешегә лә аҡса кәрәк...

Миңә шылтыратҡан был ханымға ул турала һөйләп, һүҙ әрәм итеп торманым. Ә шулай ҙа: "Тел ҡыҙыҡһытмай, тинегеҙ, үҙегеҙҙең балалар туған телде беләме һуң?" - тип һораным. "Кайҙан белһендәр, ейән-ейәнсәрҙәр ҙә белмәй, русса ғына һөйләшәләр..." - тип кенә әйтте лә, мин уны үкендерергә теләп берәй һүҙ әйтеп өлгөргәнсе, тағы ла шул насар тормош, аҡсаһыҙлыҡ, эшһеҙлек тураһындағы зарын дауам итте...

Журналистың яҙмышы инде был - шундай әҙәмдәрҙе лә түҙеп тыңлап ултырырға тура килә бына...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда миҙгел башланғандан алып республика Гигиена һәм эпидемиология үҙәге лабораторияларына 256 кеше тәндән алынған талпанда энцефалит һәм боррелиоз вирусы бармы-юҡмы икәнен тикшереүҙе һорап мөрәжәғәт иткән. Уҙған йылда ошо көнгә ундайҙарҙың һаны 564 булған, тип хәбәр итте Роспотребнадзор идаралығы.

✔Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле Халыҡ-ара бейеү көнөнә бағышланған "Карнавал туры" донъяның традицион бейеүҙәре онлайн-фестиваленда ҡатнаша. 29 апрелдән башлап аҙна буйына тамашасыларҙың социаль селтәрҙәр аша төрлө илдәрҙең мәҙәниәттәре менән танышыу мөмкинлеге бар. "Orkeseos" бейеү компанияһы (Колумбия) һәм "Cultures Croisees en Ile-de-France" (Франция) фестиваленең башланғысы беҙгә шундай мөмкинлек бирҙе", - тип хәбәр итте ансамблдең матбуғат хеҙмәте.

✔Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә һәм торлаҡҡа түләү өсөн субсидиялар биреү ҡағиҙәләре үҙгәрә. Атап әйткәндә, түләү алыу өсөн кәрәкле документтар кәмей. Үҙизоляция режимына бәйле льготаһы булмаған граждандарға торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә түләүҙе кисектергән өсөн идарасы һәм ресурстар менән тәьмин итеүсе компаниялар пеня өҫтәп яҙмай. Ләкин түләү һәм уны иҫәпләү бөтөрөлмәй.

✔Баҡсаға барыу өсөн Doroga02 порталында теркәлергә кәрәкмәй, тип хәбәр итте Башҡортостандың һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин. Үҙең менән паспорт һәм участкаң документтарын алыу ҙа етә. Баҡсаға нисә тапҡыр кәрәк, шунса барырға мөмкин. Һанлы үҫеш министрлығы етәксеһе билдәләүенсә, 8 апрелдә Doroga02 порталы эшләй башлағандан алып унда 400 меңдән ашыу автоһәүәҫкәр теркәлгән. Республикала бөтәһе 1,7 миллион самаһы автомобиль.

✔Волга буйында "Еңеү открыткалары" күләмле халыҡ проекты тормошҡа ашырыла. Ул Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле аппараты башланғысы буйынса Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына ҡарата ойошторолған. Победа.рф сайтында округтың барлыҡ 14 төбәгендә йәшәүселәрҙең үҙенсәлекле коллекцияһын күрергә мөмкин.

✓ ***Футурист Митио Каку инфекция менән көрәштә кешелеккә яңы технологиялар ярҙам итәсәге, әммә бының өсөн кешеләргә конфиденциаль мәғлүмәттәрен ҡорбан итергә тура киләсәген белдерҙе.***



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# САФҠА БАҪ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Фейсбук"тағы сәхифәһендә быйыл республикала "Үлемһеҙ полк" акцияһы нисек үткәреләсәген хәбәр итте. Формат үҙгәртелә, ләкин асылы шул уҡ ҡала.**

"Был осорҙа беҙгә бик күп ғәҙәти булмаған ҡарарҙар ҡабул итергә тура килә. Рәсәйҙә, шул иҫәптән беҙҙең республикала күптәр быйыл "Үлемһеҙ полк" акцияһы үтмәҫ тип борсолдо. Ләкин беҙ ошо хәлдән сығыу юлын таптыҡ булһа кәрәк. Миңә ойоштороу комитеты вәкилдәре шундай тәҡдим менән мөрәжәғәт итте: әлеге ваҡытта халыҡты йыя алмайбыҙ икән, республикала йәшәүселәрҙән онлайн ғаризалар һәм фотоһүрәттәр ҡабул итә, уларҙы баҫтырып сығара һәм Еңеү көнөндә транспортта йөрөтә алабыҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. Республика Башлығы билдәләүенсә, фронтовиктарҙың 70-кә яҡын портреты йөҙ "Башавтотранс" автобустары бортҙарына урынлаштырыла һәм 9 майҙа улар Өфө урамдары буйлап тантаналы колонна булып үтә. Бынан тыш, фронтовиктарҙың портреттары Башҡортостан юлдаш телеканалында күрһәтелә, шулай уҡ Башҡортостанда махсус төҙөлгән "Үлемһеҙ полк" сайтына ҡуйыла. polk02.ru сайтындағы форманы тултырып, ғариза ебәрергә кәрәк. "Әгәр шулай эшләнәк - йәнә бер тапҡыр иң ҡатмарлы хәлдәрҙә лә ныҡышмалыҡ күрһәтергә һәм сығыу юлын табырға мөмкин булыуын раҫларбыҙ", - тине Башҡортостан Башлығы.

# СӘСӘЛӘР...

**Башҡортостанда барлыҡ районшарҙа сәсеү эштәре бара, тип хәбәр итте вице-премьер һәм ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов республика Башлығындағы оператив кәңәшмәлә.**

27 апрелгә 20 мең гектарҙан ашыу ер сәселгән, 55 мең тоннанан ашыу минераль ашлама һәм 20 мең тонна самаһы дизель яғыулығы әҙерләнгән. Яҙғы сәсеүҙе тәьмин итеү өсөн льготалы кредитлау программаһы буйынса 7 миллиард һум йәлеп ителгән. "Беренсе кварталда беҙҙә ауыл хужалығы етештереүе индексы 5,4 процентҡа артҡан. Ошо һанға ныҡ ҡыуанам, былдай күрһәткес күптән булғаны юҡ ине. Тармаҡҡа ярҙам итербеҙ. Анлашыла, икенсе квартал йомғаҡтары буйынса һандар башҡаса булыр, ләкин хәҙер беҙгә сәсеүҙе һәйбәт үткәрергә кәрәк", - тине республика Башлығы һәм иҡтисадтың тотороҡлоғон тәьмин итеү сараларының икенсе пакетын әҙерләгәндә аграр тармаҡҡа етди иғтибар бүлергә ҡушты.

КӨНАУАЗ

**Донъяның үҙгәреүен бөгөн үк күрергә мөмкин: Башҡортостан күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеүҙәр, фекер алышыуҙар, килешеүҙәр төҙөү өсөн сиктәрҙең ябылыуы ла, ер өҫтө һәм һауа бәйләнеше туҡтатылыуы ла кәртә түгеллеген, хәҙер беҙ икенсе - юғары технологиялар заманында йәшәүебеҙҙе раҫлап, "Коронавирустан һуң донъя: Евразия йөрәгенән ҡараш" тип аталған Беренсе халыҡ-ара онлайн-форум ойоштороу инициативаһы менән сығыш яһап ҡына ҡалманы, ә 28 апрелдә уны тормошҡа ашырып та ҡуйҙы.**

# ЕВРАЗИЯ ЙӨРӘГЕНӘН ҠАРАШ:

## донъя үҙгәрәсәк!



"Көрсөк - кире һәм ыңғай яғы булған күренеш. Ул - барлыҡ тармаҡтарҙа ла һөҙөмтәһеҙ ҡалыптарҙы емереүсе ҡорал. Әгәр көрсөктән дөрөҫ сыҡҡанда һәм пандемиянан һуң дөрөҫ йүнәлеш алғанда, беҙҙең тағы ла көслөрәк, уңышлыраҡ һәм һөҙөмтәлерәк эшләү мөмкинлегебеҙ бар. Форумдың төп бурысы ошо ла инде", - тигәйне республика Башлығы был инициатива тураһында. Шуға ла көн ҡаҙағына глобаль иҡтисадтың һәм социаль мөхиттең көнүҙәк трендтарын һәм үҫеш перспективалары - белем биреү системаһын һәм IT-технологияларҙы, онлайн-һөнәрҙәрҙе, ваҡиға индустрияһын һәм хеҙмәт күрһәтеү өлкәһен, хәҙерге мәғлүмәт кинлеген модернизациялау мәсьәләләре сығарылды.

Интерактив форматта үткән сараға Рәсәйҙән, АҠШ-тан, Бөйөк Британиянан, Германиянан, Италиянан, Францианан, Японианан, Ҡытайҙан, Сәғүд Ғәрәбстанынан, Төркиәнән, Швецианан, Мексиканан һәм башҡа илдәрҙән 10 мең самаһы кеше теркәлеп, форумдың эшен 20 халыҡ-ара һәм федераль мәғлүмәт партнеры трансляцияланы. Рәсәйҙең һәм донъяның алдынғы эксперттары, сәйәсмәндәре, иҡтисадсылары һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнашҡан пленар сессияла, төрлө йүнәлештәрҙә эшләгән секцияларҙа COVID-19 пандемияһына бәйле килеп тыуған проблемаларҙан, шулай уҡ глобаль иҡтисади көрсөктән сығыу юлдары эҙләнде, шул хаҡта фекер алышыны. Тормошҡа ҡарашты үҙгәртеү, нимәне дөрөҫ эшләмәүебеҙ тураһында уйланыу һәм аңлау, берләшеү зарурлығын билдәләү һәр сығыш яһаусының фекер лейтмотивы булып торҙо. Шулай уҡ улар бөтөн алдынғы илдәрҙән үҙ сигендә бикләнеп, ҡурсаланып, барлыҡ бәйләнештәрен туҡтатҡанда ла бары тик Рәсәйҙең генә ярҙамға килеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Футурист Митио Каку инфекция менән көрәштә кешелеккә яңы технологиялар ярҙам итәсәге, әммә бының өсөн кешеләргә конфиденциаль мәғлүмәттәрен ҡорбан итергә тура киләсәген белдерҙе. Шул саҡта ғына кеше ауырыуҙарға тиклем сирҙе алдан асыҡларға һәм уның таралыуына юл ҡуймаҫҡа мөмкин, тине эксперт.

**"Пандемиянан һуң беҙ икенсе кешелек йәмғиәтен күрәсәкбеҙ. Ул ныҡ мәғлүмәтле буласаҡ һәм үҙ хөкүмәттәренең компетентһыҙлығы һәм моңһоҙлоғона битараф ҡалмаясаҡ, - тине Радий Хәбиров. - Беҙ бөгөн мәғлүмәт йәмғиәтендә йәшәйбеҙ. Был, бер яҡтан, яҡшы, әммә икенсе яҡтан ялған хәбәрҙәр тиҙ таралыуына ла шаһитбыҙ. Мин һуҙ азатлығын тыйыу яҡлы түгел, әммә журналистика принциптары тураһында ла уйланырға кәрәк. Пандемиянан һуң йәмғиәттә иҡтисади, сәйәси һәм социаль тотороҡлолоҡ ҡиммәттәре өҫтөнлөк итәсәк, тип күҙаллайым".**

Стратегик инициативалар агентлығының генераль директоры Светлана Чупшева бизнестың хөкүмәттең ярҙам сараларын ыңғай баһалауын белдерҙе һәм был сараларҙың һуңғыһы булмауын, форумдан һуң артабан да ярҙам булырына өмөтләнеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шулай уҡ ул пандемиянан һуң иҡтисадты аяҡҡа баҫтырыу 3-5 йылға һуҙыласағын да билдәләне. Был йәһәттән Башҡортостандың үҙ тауарҙарын етештереүгә өҫтөнлөк биреүе иғтибар үҙгәнгә ҡуйылды - тарихтан күренеүенсә, донъя монополистары тағы ла ниндәйҙер санкциялар иғлан итһә, бик ауырға тура килер ине, әммә урындағы етештереүсегә ярҙам итеү - ул көрсөк баҫымын ниндәйҙер кимәлдә йомшарта. Бундестаг депутаты Штефан Койтерҙың: "Дәүләттәр алдында зыян күргән компанияларға нисек итеп ярҙам итергә мөмкин, тигән һорау тора. Был бик еңел түгел. Әммә уны хәҙерҙән үк хәл итергә кәрәк, сөнки беҙ пандемияның 3,4 йәки 5 айҙан тамамланырына ныҡлы ышана алмайбыҙ. Ошо шарттарҙа эшләргә өйрәнергә кәрәк", - тиеүе лә шуға ишара. Шулай уҡ сығыш яһаусылар көрсөктөң беренсе тулҡыны артынан икенсеһе булыу ихтималлығын да иҫкәртте. Рәсәй Президенты ҡарамағындағы ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса вәкил Борис Титов ил иҡтисадын бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ фәйҙаһына үҙгәртеп ҡороуҙы тәҡдим итте. "Бәләкәй эшҡыуарлыҡ - бюджеттың аҡса сығанағы, тәү сиратта, социаль эш урындары булдырыу", - тине ул.

Мәғлүмәт тармағына килгәндә, Рәсәй Журналистар союзы берлеге рәйесе Владимир Соловьев күҙаллауынса, киң матбуғат сараларының бер өлөшө ябыласаҡ, ҡалғандары цифрлы форматҡа күсәсәк. Традицион баҫма матбуғат та үҙгәреш кисерәсәк, әммә улар ҙа күпмелер кимәлдә һаҡланып ҡаласаҡ. Шулай уҡ көрсөктән һуң журналистарҙың бер өлөшө, бигерәк тә төбәктәрҙә, эш урынын юғалтыуы ихтимал, ҡайһы бер гәзиттәр, төбәк радиостанциялары, телеканалдары ябыласаҡ.

"Республикала иң тәүге һүрәттәр бынан 14 мең йыл элек эшләнеүе менән билдәләнгән боронғо ата-олатайҙарыбыҙ төйәге Шүлгәнташ мәмерйәһе бар. Әгәр цивилизация ошо урындан башлана икән, ни өсөн бөгөн, йөҙ йыллыҡтың иң көслө саҡырыуы мәлендә яңы цивилизация үҫешен дә, коронавирус һәм башҡа билдәле һәм билдәле булмаған сирҙәрҙән вакцина эшләүҙе ошо урындан башламаҫҡа, бында клиникалар төҙөмәҫкә", - тип үҙенсәлекле саҡырыу ташланы республика Хөкүмәтенең вице-премьеры Андрей Назаров.

Әйткәндәй, Панама утрауҙарынан эфирға сыҡҡан кинорежиссер, сценарист, продюсер һәм яҙыусы Люк Бессон Рәсәй менән Башҡортостандың матурлығына һоҡланыуын белдергәс, модератор Ксения Собчак унан, ни өсөн республикаға килеп, "Урал батыр" эпосы буйынса фильм төшөрмәҫкә, тигән һорау бирҙе. Люк Бессон юҡ тимәне. Бәлки, киләсәктә бөйөк эпосыбыҙ нигеҙендә фильм да төшөрөләр, кем белә...

Ә әлегә, "иртә торһаң, ит бешә", тигәндәй, пандемия осоронда ла етәксәлек уйлығы һаҡланы һәм бөгөнгө көн хәстәрҙәре менән бер рәттән, киләсәкте лә күҙаллауын раҫланы: сара сиктәрендә Башҡортостан Хөкүмәте һәм "Интерхелф Канада" компанияһы һәм "АйЭйчДипей групп" компаниялар төркөмө араһында республикала һаулыҡ һаҡлау, шифаханакурорт тармағында инвестицион проекттарҙы тормошҡа ашырыу маҡсатында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө - Башҡортостандың ғына түгел, донъяның да ҡарашы үҙгәрҙе...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Инвесторҙар Ишембайҙа күп функциялы рекреация үҙәге төҙөлөшөнә 170 миллион һум һалырға ниәтләй. Проект Башҡортостан Башлығы ҡатнашлығындағы "Инвестиция сәғәте"ндә ҡаралды. Билдәләнеүенсә, Ишембайҙың "Ярд" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте проектында физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеү майҙансыҡтарын, парк һәм сауҙа зонаһын, күмәк кеше ҡатнашҡан ҡала сараларын уҙғарыу урындары бар.

✓Башҡортостанда эшһеҙҙәр һаны 50 меңгә етеүе мөмкин. БР ғаиләә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова ошо хаҡта белдерҙе. Әле Башҡортостанда 17 мең эшһеҙ теркәлгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, эшһеҙ ҡалған кешеләргә арттырылған пособие ҡаралған. Республикала уның суммаһы - 13 949,5 һум. 9 апрелдән илдә "Рәсәйҙә эш" порталы аша эшһеҙҙәрҙе теркәүҙең ваҡытлыса ҡағиҙәләре ғәмәлгә индерелде.

✓20 апрелдән Башҡортостан биләмәһендә республика урмандарында янғын йәһәтенән хәүефле миҙгел башланды, тип хәбәр итте урман ведомствоһының матбуғат хеҙмәте. Көндәр йылыныу менән республикала термонектәләр майҙаны һәм һаны артты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2019 йылда республиканың урман фонды биләмәһендә 2232 гектар майҙанда 160 урман янғыны, шул иҫәптән 1134 гектар майҙанда 11 ҙур янғын теркәлде.

✓Өфөләргә Сочиға тура рейс менән турҙарға алдан заказ биреү мөмкинлеге асылды. AZUR Air авиакомпанияһы чартерҙары менән осош компанияһы 1 июндә башлана, тип хәбәр иттеләр Рәсәйҙең Туроператорҙар ассоциацияһынан. Ул 2020 йылдың октябрь аҙағынаса дауам итә. Шулай уҡ илдең тағы дүрт ҡалаһынан: Мәскәүҙән (Внуково), Санкт-Петербургтан, Ҡазандан һәм Екатеринбургтан осоштар планлаштырыла

✓Башҡортостанда хәбәрһеҙ юғалған кешеләрҙе эҙләү, өйһеҙ граждандарҙы, йәнлектәрҙе ашатыу менән шөғөлләнгән волонтёрҙарға йөрөү өсөн пропускттар бирелә. Кеше хоҡуҡтары буйынса совет ултырышында яңы пропуск режимын индереү арҡаһында ҡала буйлап йөрөгәндә етди сикләүҙәргә бәйле проблема тикшерелде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *7 майға тиклем теләгән һәр кем вальс бейегәнен видеоға төшөрөп, уны #ЕңеүВальсыБашҡортостан хештегы менән социаль селтәргә һалырға мөмкин. Видео телевидениела һәм социаль селтәрҙәрҙә күрһәтеләсәк.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТУҒАН ТЕЛ...

## берләштерҙе

**Ни булһа ла, барыһы ла яҡшыға, тигән әйтем бар бит әле. Ысынлап та шулай булыуына инанып ҡына торабыҙ. Бына, мәҫәлән, әле коронавирус сәбәпле үҙизоляцияла ултырыу ҙа ғаилә ағзаларына берберенә иғтибарлыраҡ булырға, һәр кемебеҙгә сәләмәтлеген ҡайғыртып йәшәргә, бөтә көндәр ҙә бер төрлө булһа ла, иркен тормошобоҙҙоң ҡәҙерен белергә өйрәтте кеүек. Ул ғына ла түгел, ҡәҙимгә осраҡта донъя ығы-зығыһына алданып, ваҡыт булмай үткәреп ебәргән хәл-ваҡиғаларға иғтибарыбыҙҙы йәлеп итте. Бына ошо көндәрҙә ойошторолған сираттағы Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант яҙыу ҙа яңы урынлашҡан шарттарҙа бөтә ғәмде ылыҡтырған сараларҙың береһе булды.**

Башлап 2015 йылда Башҡорт дәүләт университеты тарафынан үткәрелгән диктант икенсе тапҡыр халыҡ-ара кимәлдә ойошторолдо һәм быйыл ул тулыһынса онлайн форматта үтте. Шулай уҡ диктант яҙыусылар өс төркөмгә бүленде: башҡорт телен башланғыс кимәлдә белеүселәр, телдә иркен аралашыусылар һәм башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшеүселәр. Тәүге төркөм өсөн тексты билдәле музыкант Заһир Зәйнетдинов уҡыһа, телде яҡшы белеүселәр танылған диктор Флүрә Мурзина, ә диалектта һөйләшеүселәр яҙыусы-сатирик Марсель Сәлимов менән яҙҙы. Ойоштороусылар сараны Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 75 йыл тулыуға арнаны һәм 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының ҡаһарманлыҡтарына бағышланған Әхтәм Ихсандың "Саҡма тояҡ аттарҙа", Нур Ғәлимовтың "Яуҙан ҡайтҡан ҡурай" әҫәрҙәренән өҙөктәр тәҡдим итеЛде.

- Беҙҙең өсөн башҡорт диктанты проекты ныҡ кәрәк. Беренсенән, ул беҙҙе берләштерә, икенсенән - башҡорт телен өйрәнергә яңы стимулдар бирәсәк. Был заманда беҙ бергә булырға тейешбеҙ. Барыгыҙға ла уңыштар теләйем! - тип сәләмләгәйне ҡатнашыусыларҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Ысынлап та, үҙизоляциялағы бер төрлө көндәрҙе йәнләндереп, ғаилә ағзаларын ғына түгел, тотош милләттәштәребеҙҙе туған телебеҙ аша берләштергән сараға әүерелде ул һәм унда барлығы 305 600 кеше ҡатнашты (былары - теркәлгәндәр генә, теркәлмәйенсә лә ошо ғәмәлдә үтәүселәр тағы ла күберәк булды, тип беләбеҙ). Шулар араһынан 39 214 ҡатнашыусы Рәсәйҙең 18 төбәгенән булһа, сит илдәрҙән 3 395 кеше башҡорт телен белеү кимәлен һынаған. Был Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант акцияһы Үзбәкстан, Швейцария, АҠШ, Бөйөк Британия, Германия, Испания, Эстония, Канада, Төркиә, Ҡытай, Ҡаҙағстан, Латвия, Тажикстан, Португалия, Италия, Польша, Ҡырғыҙстан, Франция, Украина, Белоруссия, Әзербайжан, Төркмәнстан, Абхазия, Литва илдәрендә лә үтте тигән һүҙ. Ә бына Башҡортостандың Әбйәлил, Асҡын, Күгәрсен, Учалы, Дыуан, Көйөргәҙе, Кушнарен, Ҡариҙел, Салауат, Хәйбулла, Яңауыл райондарында йәшәгән милләттәштәребеҙ айырыуса әүҙем ҡатнашҡан. Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектындағы диктантты 51 345 кеше яҙған. Шуныһы ла ҡыҙыҡ, ойоштороусылар диктант яҙған иң оло һәм иң йәш ҡатнашыусыны ла билдәләгән. Улар Ишембай районы Ҡанаҡай ауылынан 96 йәшлек Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Әүхәҙи Миңлеғолов **(һүрәттә)** һәм Баймаҡ ҡалаһынан 5 йәшлек Наилә Байегетова **(һүрәттә)**.





**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн вайымлылар, халҡы өсөн файҙа килтерергә тырышып тороусылар замана. Бөтә донъя хәлдәре шуны талап итә һәм һәр халыҡты асылына, милли үҙаңына ҡайтырға, рухи донъяһын байытырға этәрә. Был йәһәттән Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант акцияһы башҡорт халҡына уйланырға ем биргән, берләшергә яңы форсат асҡан, ғәмлеләрҙе берләштергән шәп сараларҙың береһе булып сыҡты. Милләт өсөн туған телдә һөйләшеү, яҙыу һәм уҡыу ысынлап та мөһим булыуын, беҙҙең арала ошоно яҡшы аңлаусылар, бер уйлылар меңәрләгән икәнен сағылдырҙы ул.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



ҠЫҪҠАСА

## ҒАИЛӘМ ТАРИХЫНДА...

✔ **Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығы алдынан Республика халыҡ ижады үҙәге "Ғаиләм тарихында һуғыш эҙе" мәҙәни интернет-акцияһына ҡушылырға саҡыра. Акция социаль селтәрҙәргә видеороликтар һалыуҙы күҙ уңында тота.** Акцияла теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Ҡатнашыу өсөн: фотоһүрәттәр, хаттар, хеҙмәт кенәгәләре, грамоталар, орден-миҙалдарҙы һ.б. файҙаланып, тейешле форматта яҙҙырыу өсөн материал әҙерләргә; бер минутлыҡ сығыштығы видеоға төшөрөргә; видеояҙманы 2020 йылдың 20 майына тиклем #ғаиләмтарихындаһуғышэҙе хештегтары менән шәхси аккаунтҡа, тематик төркөмдәргә һалырға; видеоматериалдарҙы 75.pobeda@bk.ru электрон адресына ебәрергә кәрәк. Акция тамамланғас, иң яҡшы яҙмалар йомғаҡлау фильмына индереләсәк һәм ул Республика халыҡ ижады үҙәгенең YouTube каналына урынлаштырыла.

✔ **9 майҙа баш ҡаланың "Вся Уфа" телеканалында Еңеү көнөнә арналған телемарафон уҙғарыла. Эфирҙа Бөйөк Ватан һуғышы тураһында шиғырҙар һәм ҡотлауҙар яңғырай.** Бынан тыш, марафон барышында телевизион форматта "Үлемһеҙ полк" акцияһы була. Һуғышта ҡатнашыусыларҙың портреттары һәм герой тураһында ҡыҫҡаса хикәйә менән видеояҙманы әле үк allufatv@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә мөмкин. Телеканал етәкселегә әйтеүенсә, был көндә тура эфирҙа +7 (347) 254-70-08 телефоны буйынса тыныс тормош бүләк иткәндәргә рәхмәт һүҙҙәрен еткерергә мөмкин. Телемарафон иртәнгә сәғәт 9-ҙа башлана. Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү яулаған ҡаһармандарҙың тарихтары онлайн-трансляцияла күрһәтелә.

✔ **Башҡортостан, тотош ил кеүек үк, Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығын үҙенсәлекле итеп билдәләй. 27 апрелдә республикала иң матур акцияларҙың береһе - "Еңеү вальсы" башланды.** "Һуғыш йылдарында өләсәй-олатайҙарыбыҙ ошо бейеүҙе башҡарған. Быйыл акцияла өйҙән сыҡмайынса, туғандар һәм яҡындар менән бергә ҡатнашырға мөмкин", - тип аңлатты БР йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов. 7 майға тиклем теләгән һәр кем вальс бейегәнен видеоға төшөрөп, уны #ЕңеүВальсыБашҡортостан хештегы менән социаль селтәргә һалырға мөмкин. Эстафетаны икенсе кешегә тапшырырға кәрәк. "Оҫталарса бейеү мөһим түгел, иң мөһиме - байрам кәйефен һәм мөхитен тыуҙырыу. Вальстың аҙымдары бик ябай. Аҙаҡтан иң шәп видеоларҙы "Май вальсы" йыры менән дөйөм роликка берләштерәбеҙ. Уны телевидениела һәм социаль селтәрҙәрҙә күрһәтәбеҙ", - тип яҙҙы Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы етәксеһе.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аяҡтар шешенгәндә

❖ Бер бәйләм петрушканы ваҡ ҡына турап, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ярты сәғәт тонотергә. Төнәтмәне һөҙөргә һәм икегә бүлеп, бер нисә сәғәт арауыҡ ҡалдырып эсергә.

❖ 150-200 грамм тирәһе петрушканы тамыры менән йыуып, ит турағыс аша үткәрергә. Килеп сыҡҡан бер стакан иҙмәне быяла һауытҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм яҡшы итеп баҫырып төрөп, төнгәләккә ҡалдырырға. Иртәнсәк 4-5 ҡат марля аша һөҙөргә, төнәтмәгә 1 лимон һутын һығып ҡушырға. Ике көн дауамында иртәнсәк һәм кискеһен 1/3 стакан төнәтмә эсергә. Шунан дауаланыуҙы туҡтатып торорға ла, тағы 2 көнлөк курсты ҡабатларға. Шуныһы мөһим: төнәтмәне ике көнгә еткелек кенә әҙерләгеҙ, артығы кәрәкмәй. Аяҡтарҙың шешенеүе бөткәнгә тиклем эшләргә.

### Тубыҡ быуыны һыҙлағанда

❖ Тубыҡ һыҙлағанда бәпембә сәскәһен йыйып, бер литр банкыға тултырырға һәм араҡы ҡойорға. Ҡараңғы урында 10 көн төнәтергә. Килеп сыҡҡан төнәтмә менән һыҙлаған быуындарҙы ыуырға, көн һайын дауаланыу һөҙөмтәле.

❖ Бәпембә тамырын йыуып, ваҡ ҡына итеп турарға. Бер литр һауытҡа тултырғансы һалып, өҫтөнә сыҡҡансы араҡы ҡойорға. Бер аҙнанан төнәтмә ҡулланыуға әҙер була. 1 литр төнәтмә бөткәнсе ҡулланырға.

### Тауыш юғалғанда

❖ Бер стакан сөгөлдөр һуты һәм бер ҡалаҡ алма һеркәһен ҡушабыҙ. Тауыш юғалғанда ашаған һайын тамаҡты шуның менән сайҡатабыҙ.

### Тауыш ҡарлыҡҡанда

❖ 100 грамм ҡырғыстан үткән кишерҙе ярты литр һөткә һалып ҡайнатырға. Ҡайнатманы һөҙөп, көн дауамында бер нисәгә бүлеп эсергә. Тауыш элеккә хәленә ҡайтҡансы дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Кейем һәм көнкүреш әйберҙәрен ҡояш һәм йондоҙ һүрәте менән биҙәү Азияның боронғо мәҙәни ҡатламына барып тоташа. Көнкүреш әйберҙәренә мөһөрҙәр (солярный знак) неолит дәүерендә (таш быуаттың иң һуңғы осоро) үк төшөрөлгән. Һуңыраҡ ҡояш һәм йондоҙҙар һынландырыу был төбәктә йәшәгән барлыҡ халыҡтар сәнғәтендә төп сюжеттарҙың береһенә әйләнә. Көнбайыш Себерҙә (уғырҙар, селькуптар, энцы, кеттарҙа) үҙәктәш түңәрәктәр һәм тешле оя биҙәктәр (розетки с зубчиками) һөйәк, ағас, металл әйберҙәргә төшөрөлгән; көнсығыш өлкәләрҙә иһә (эвендар, эвенктар, долгандар һәм Азияның төньяҡ-көнсығыш халыҡтарында) был биҙәктәр сигеү сәнғәтенең төп элементтарына әүерелә. Бер-береһенә индерелгән үҙәктәш түңәрәктәр тәрлә төҫлө еп һәм сәйлән ярҙамында сигелгән. Был рәүешле, башҡа йомшаҡ әйберҙәр араһында, өҫкө кейем дә биҙәлгән. С.В. Иванов үҙәктәш түңәрәктәрҙән торған орнаментты Төньяҡ Азияныҡы тип атаған, әммә неолит дәүерендә уның көньякта, шул иҫәптән Байкал буйы халыҡтарында ла булыу ихтималлығын инҡар итмәй. Был традицияларҙың Себер территорияһында киң таралыуын ғалим төньяҡҡа һәм көнсығышҡа табан ҡыҫырыҡланған, бер өлөшө көньяҡтан көсеп килгән тунгус ҡәбиләләренә оҡшап киткән боронғо Азия халыҡтары йоғонтоһо менән аңлата. Шул уҡ ваҡытта, тунгустар (эвенктар, эвендар) үрҙә һүрәтләнгән нағышлау ғәҙәтен үҙләштереү һәм үстереүҙән тыш, күрше территорияларға таратыуға ла (шул иҫәптән төркиҙәргә) булышлыҡ иткән, тип иҫәпләй ғалим.

Мәрүәт һәм металл пластиналарҙы кейемгә тағыу боронғо Себер сәнғәтендә Ҡояш культына бәйле булған, тип һанай С.В. Иванов. Бронза быуатында Байкал буйында кейемде биҙәү өсөн ҡабырсаҡ һәм нефриттан ялпаҡ дискылар һәм түңәрәктәр ҡулланылған. Һуңыраҡ уларҙы металл тәңкәләргә алыштырғандар, тип фаразлай А.П. Окладников.

Боронғо Көньяҡ Себер халҡының биҙәү йолаларын был территория менән этник бәйләнештә булған халыҡтар үҙләштерә. Улар Урта Азиянан күсенгән төркиҙәр мәҙәниәтенә лә йоғонто яһай. XIX быуат аҙағына ҡараған сығанаҡтарҙа Минусинск округында йәшәгән хакастарҙа мәрүәт төймәләр һәм мәрйендәр киң ҡулланылыуы тураһында мәғлүмәттәр бирелә, уларҙы кейем ҡаушырмаһы һәм салғыйы буйҙарына рәт-рәт итеп теккәндәр, нағыштар һалғандар. Алтай халҡы ла мәрүәт төймәләрҙе кейемгә таҡҡан. "Башҡорт халҡының биҙәү сәнғәте" китабында салғый буйҙары , итәге һәм яурындары мәрүәт төймәләр менән нағышланған көньяҡ-көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙарының еләне күрһәтелгән.

Башҡорттарға металл сулпылар һәм түңәрәк пластиналарҙы кейемгә тегеү хас, бигерәк тә көньяҡ райондарға һәм Урал арьяғының көньяҡ-көнсығышы өсөн был ғәҙәти күренеш. Көньяҡ Уралда кейемгә металл сулпылар, муйынсаҡтар тегеү ғәҙәте оҙаҡ йылдар формалашҡан, тигән фекер йәшәй. Урал арьяғында бындай традициялар андрон мәҙәниәтенә ҡараған ҡомартҡыларҙа осратыла. Тубыл йылғаһы буйындағы Алексеевка ултырағы ҡәберлектәрендә (б.э. тиклем I меңйыллыҡтың тәүге унйыллығы) табылған туҡымаға тегеү өсөн тишелгән металл тәңкәләр, һөлдә тирәһендә "таралып киткән" муйынсаҡтар күплеге быға миҫал. Минусинск соҡорондағы ҡарасуҡ осорона ҡараған ҡәберлектәр ҙә шундай уҡ үҙенсәлектәр менән характерлана. Андрон кешеләре төйәк иткән территориянан көнбайыштараҡ, Урта Волга буйының бура мәҙәниәтенә ҡараған ерҙәрҙә бындай табылдыҡтар һирәк осрай, Көньяҡ Волга буйында һәм артабан көнбайышҡа табан бөтөнләй юҡ. Андрон кешеләре Урта Волга буйы һәм Көнбайыш Урал буйы халҡының кейеменә йоғонто яһаған, тип билдәләй О.А. Кривцова-Гракова.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# АЛҒА, БАШҠОРТОСТАН, АУЫЛҒА!

**(Башы 1-се биттә).**

Быйылғы 1 Май байрамын бығаса булмаған шарттарҙа ҡаршылайбыҙ. Сәбәбе бер - коронавирус тигән яман нәмә байтаҡ халыҡтың өйҙәренә бикләп ҡуйҙы. Ул, меңәрләгән кешеләрҙең ғүмерҙәрен өҙөп, бөтөн донъя кимәлендә хеҙмәт процестарына, донъя иҡтисадына ла емергес йоғонто яһаны. Һис бер көтмәгәндә тыуған хәүеф табипҙарҙы һәм дәүләт етәкселәрен генә түгел, тәбиғи фәндәр менән шөғөлләнгән ғалимдарҙы, сәйәсмәндәрҙе, философ һәм политологтарҙы, иҡтисадсыларҙы һәм эшҡыуарҙарҙы, етештереү системаһын көйләүсе, хеҙмәт процестарын ойоштороусыларҙы һиҫкәндереп, йәшәйешебеҙ хаҡында өрәңынан уйланырға мәжбүр итте. Төрлө ҡараштар булыуға ҡарамаҫтан, барыһына ла тиерлек уртаҡ булған бер фекер барлыҡҡа килде: артабан кешелек элеккесә, үҙе йәшәгән тәбиғи мөхиткә ваймһыҙ һәм уны ҡырағайҙарса файҙаланыусы ғына булып йәшәй алмаясаҡ.

Үҙем шәхсән бына нимәгә иғтибар иттем. Коронавирус тыуҙырған сир, башлыса, миллионлаған кеше йәшәүсе мегаполистарға айырыуса ҙур хәүеф тыуҙырҙы. Нью-Йорк, Лондон, Мадрид, Рим, Париж... Рәсәйҙә - Мәскәү, Санкт-Петербург. Быға һис ғәжәпләнерлек түгел, сөнки ошондай ҡалаларҙы ҡырмыҫҡа иләүе менән сағыштырып булалыр: ауылдарҙағына ҡарағанда, бындай мегаполистарҙа кешеләрҙең бер-береһе менән көн һайын яҡын контактта булыуы бик күпкә артығыраҡ бит. Бөгөн кеше өсөн иң хәүефһеҙ урын - ауылдарҙа. Ауылда һәр кемдең ҙур ихатаһы булған шәхси йорто бар, кеше һаны ла күп түгел, бында өйҙә генә бикләнеп ултырыуға бер ниндәй хәжәт юҡ. Әйтәйек, әгәр кемдер шул уҡ йоғошло сир менән ауырып китә икән, уның йортон дезинфекциялап, бергә йәшәгән бер нисә яҡын кешеһен изоляцияла ҡалдырыу ҙа етә.

Тағы ла шуныһы: ауыл кешеләрен уларҙың ғәҙәти хеҙмәтенән айырып, эш туҡтатыу мәсьәләһе лә юҡ бында. Ауыл кешеһе йә үҙ хужалығы менән булыша, йә иһә ҙур булмаған фермаға эшкә бара, һис бер хәүеф-хәтәр юҡ. Киң яландарҙа, урман-тауҙарҙа вирус тигән ғәләмәт юҡ бит инде. Тап шуның өсөн ауыл хеҙмәтсәндәре бөгөн яҙғы сәсеүгә сыға, малдарын көтөүгә алып бара, яҙғы йылы һауаға осоп сығып кинәнгән бал ҡорттарының йәшәр йорттарын - умарталарын таҙарта, йәшелсә баҡсаларында ерен эшкәртә. Иғтибар итһәгеҙ, бөгөн, ҡоротҡос вирус ҡоторонған бер мәлдә, ауыл мөхитендә йәшәгән халыҡ физик яҡтан ғына түгел, психологик күҙлектән ҡарағанда ла һәр яҡлап ҡурсаланған, тип әйтергә була.

Әҙәм балаһы ҡайҙа ғына йәшәмәһен, уға көн һайын етерлек, йәғни үҙ организмының физиологик мохтажлығын тәьмин итерлек кимәлдә аҙыҡ-түлек талап ителә. Был яҡтан да ауылда йәшәү кеше өсөн отошлораҡ: йыл әйләнәһенә ул төп




аҙыҡтарға - сифатлы һөт, май, йомортҡа, ит, һәр төрлө йәшелсә, еләк-емешкә ҡытлыҡ кисермәй, үҙен дә, ғаиләһен дә натураль продукттарҙан мәхрүм итмәй. Әлбиттә, бындай етеш һәм мул тормош һәр ғаилә ағзаһының физик көс сарыф итеүен, ер эшкәртеү һәм мал аҫрау маҡсатында алып барылған көндәлек хеҙмәтен талап итә. Ауылдарҙа хеҙмәт тәрбиәһе мәктәбен үткән балалар тәбиғи мөхиттә сынығып, таҙа булып үҫә, уларҙың артабанғы үҙаллы шәхси тормошҡа әҙерләнгерәк булыуы ла беленеп-күренеп тора.

Ошо хаҡта уйланғанда совет осороноң һуңғы йылдарында, үҙгәртеп ҡороу тип аталған сәйәсәт ғәмәлгә ашырылған ваҡытта беренсе совет миллионеры булараҡ бөтөн илгә танылған Мәскәү эшҡыуары Герман Стерлигов иҫкә төшә. Ул үҙенең үтә экстравагант идеологик, дини, сәйәси, иҡтисади ҡараштары менән барыһынан да айырылып торған кеше. Стерлигов 2004 йылда Мәскәүҙәге барса эштәрен ташлап, Мәскәү өлкәһенең Можайский районындағы буш ятҡан ерҙәрен арендаға алып, унда "Слобода" тигән проект нигеҙендә ауыл хужалығы менән шөғөлләнә башлай, башҡаларҙы ла ауыл еренә күсеп китергә өндәй. Ошо сәйер миллионерҙың императив ҡараштарын ҡабул итеп булмаған хәлдә лә, уның ауыл хужалығы аша кеше үҙхесенә хәл иткес йоғонто яһап, үҙгәртеп ҡороп булыуы хаҡындағы фекерҙәре күптәрҙе әле лә ылыҡтырып тора.

Бына ошо юҫыҡта тағы ла бер ҡыҙҙәтеү. Һуңғы йылдарҙа баш ҡалабыҙҙың текә яр битендәге ҡарлуғас оялары кеүек береһе өҫтөнә икенселәре өймәкләнгән күп ҡатлы өйҙәрендәге фатирҙары уларҙың хужа-хужабикәләрен тамам туйҙырҙы, буғай: бик күптәр, нисек кенә булһа ла мөмкинлек табып, ҡаланан ситтәрәк булған ерҙә, үҙ йортонда йәшәү хаҡында ҡайғырта башланы. Ҡалабыҙҙан йыраҡ түгел Шамонин, Жуково, Аҡбирҙе, Нуғай һәм башҡа шундай бер-ике ҡатлы коттедждарҙан торған яңы төйәктәрҙә хәҙер Өфө кешеләре йәшәй. Ә оло йәштәгеләр иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем, бигерәк тә көндәр йылына башлау менән, ҡалаға яҡын баҡсаларға бик теләп йөрөй, үҙ ерҙәрендә баҡса эшкәртеп, үҙҙәренә, балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә етерлек мул уныш үҫтереп ҡыуана. Күрәһең, ҡасандыр ата-бабаларының төп шөғөлө булған ер эшкәртеүгә ынтылыш ҡандарында ҡалып, үҙенә күрә ошондай тәбиғәткә тартылыу көсөн хасил итәлер инде.

Ошо хаҡта уйланғанымда, коронавирус зәхмәте ил иҡтисадының төп йүнәлештәрен билдәләүсе дәүләт чиновниктарын уйландырып, уларҙың ауыл хужалығына, ғөмүмән, ауылдарға һәм уларҙа йәшәүсе кешеләргә ҡарата булған илтифатһыҙыраҡ ҡараш-мөнәсәбәттәрен тамырынан үҙгәртһен ине, тип тә ҡуям. Әлбиттә, яңы технологиялар уйлап табыу, сәнәғәтте үҫтереү, яңы завод-фабрикалар төҙөү маҡсаты нисек кенә табышлы һәм файҙалы булмаһын, һәр кемдең өҫтәлә шифалы һәм барса кәрәкле микроэлементтар һәм витаминдарға бай ризыҡтан өҙөлмәүе фарыз. Ә был ауыл хужалығының барса тармаҡтарын заманса ҡора, ойоштора һәм үҫтерә алыу менән бәйле. Ил-дәүләттең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеү хаҡында ла уйланмай булмай бит.

Яңы шарттарҙа Рәсәй дәүләтенең, уның идара итеүсе даирәләренең ауылға йөҙ менән боролоуы зарур. Иң тәүҙә, тәбиғәт һәм климат шарттарын, ер, һыу, урман ресурстарын иҫәпкә алып, һәр бер районда, бигерәк тә район үҙәктәрендә, ауыл хужалығы продукцияһын һаҡлау һәм эшкәртеү предприятиеларын төҙөү планлаштырылһын ине. Әлбиттә, быны өсөн ил бюджетынан әлеге ваҡытҡа ҡарағанда 4-5 тапҡырға күберәк финанс сығымдары талап ителәсәк. Бөтөн илде гигант төҙөлөш майҙанына әүерелдереп, ауыл хужалығын, ауылдарҙы тергеҙеү эшенә миллионлаған эшсе ҡулдар йәлеп итеп буласаҡ, ә ошо өҫтөнлөклө проектты ғәмәлгә ашырыусыларға юғары эш хаҡтары түләнә икән - вахта ысулы менән эшләп йөрөүсе ир-егеттәребеҙ, хатта Себер тарафтарына китеп төйәкләнеүселәр ҙә тыуған яҡтарына ҡайтыу әмәлен эҙләй башлаясаҡ.

Ә был өр-яңы предприятиеларға киләсәктә ауыл хужалығы сеймалы етерлек булырмы һуң? Ошо һорауҙа бар бит. Быны Башҡортостанды ғына алып ҡарайыҡ. Беҙҙәге ерҙәр - ҡара тупраҡлы, ашлыҡ культураларының, йәшелсә-емештең һәр төрөнән, ашлама һәм агротехник саралар ҡулланып, мул уңыш алырға мөмкинлек бар. Һарыҡсылыҡ, йылҡысылыҡ, һыйыр малдарын үрсетеү, умартасылыҡ өсөн дә уңайлы шарттар етерлек беҙҙә. Тик бер нәмә генә етешмәй әлегә - кешеләрҙең хеҙмәтен унышлы итеп ойоштора алыу. Ауыл хужалығында эшләүселәр заманса техника менән етерлек кимәлдә тәьмин ителә икән, ул хеҙмәт бик күпкә еңеләйә, уның һөҙөмтәлелеге лә бермә-бер арта барасаҡ. Әгәр ҙә Башҡортостан етәкселеге ошо хаҡта ғалимдар, иҡтисадсылар, банкирҙар һәм башҡа мәғлүмәтле белгестәр менән кәңәш ҡороп, республикабыҙҙа ошондайыраҡ милли проект төҙөп, ғәмәлгә ашыра алһа, тыуған төйәгебеҙ, пафос менән әйткәндә, сәскә атҡан гөлбаҡсаға әйләнер төҫлө миңә. Быға тик йөрьәт итә алыу һәм дә ҙур хеҙмәттәр һалыу фарыҙ. Шул саҡта, бәлки, "Алға, Башҡортостан, ауылға!" тигән лозунг та беребеҙгә лә һис сәйер булып тойолмаҫ ине.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

***✓ Ҡырғыҙҙарҙың хакимлыҡ итеүсе династияһы, легендар традицияға ярашлы, Бөйөк Төрки, Көнбайыш Төрки, Көнсығыш Төрки, Тюргеш һәм Хазар ҡағанаттары башында тороусы Ашин тоҡомо вариҫтарынан.***

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ҠЫРҒЫҘ, ҮҘЕБЕҘ - БАШҠОРТ



Һуғышта уҡ-йәйә ҡулланалар, байраҡтар менән. Атлылар ҡул-аяҡтарын ағас ҡалҡансыҡтар менән ҡаплай; тағы ла ҡулбаштарын осло уҡтарҙан һәм ҡылыстан һаҡлар өсөн түңәрәк ҡалҡансыҡтар кейәләр. Хакимдары Ажо исемле, шуға күрә улар Ажо тип йөрөтөлә лә инде. Уның хозурында байраҡ эленгән. Башҡалар үҙ нәҫелдәренең исемдәре менән атала. Кеш һәм һеләүһен тиреләренән бай кейем тегелә. Ажо ҡышын кеш бүреген, ә йәй көнө осло башлы, аҫҡы яғы өҫкә ҡайтармалы, алтын таҫма менән ҡаймаланған эшләпә кейә. Башҡалары аҡ кейеҙ эшләпә кейәләр. Билдәрендә мусат тип аталған ҡайраҡ йөрөтөргә яраталар. Түбән ҡатлам кешеләре һарыҡ йөнөнән туҡылған күлдәк кейә, эшләпәһеҙ йөрөйҙәр. Ҡатын-ҡыҙҙар йөн һәм ебәк туҡыманан тегелгән күлдәк кейә, быларҙы Ань-си, Бэй-тьхин һәм Дахя тарафтарынан алалар. Ажо Ҡара тауҙар трафында көн итә. Уның төйәге ҡаҙыҡтар менән уратып алынған. Йәшәгән өйө кейеҙ менән көпләнгән палатканан ғибәрәт, ул Мидичжы тип атала.

Начальниктары бәләкәй палаткаларҙа йәшәй. Ғәскәр бөтә нәҫелдәрҙән йыйнала. Яһаҡ түләүселәр һалымды кеш һәм тейен тиреләре менән түләй. Чиновниктар 6 разрядҡа бүленә, улар: министрҙар, баш начальниктар, идарасылар, эш башлыҡтары, етәкселәр һәм дагандар (тархандар. **Ред. иҫк.**). Министрҙар ете кеше, баш начальниктар - өсәү, идарасылар - унау. Ун биш эш башлығы иҫәпләнә, етәксе һәм дагандарҙың чиндары юҡ, улар штат буйынса иҫәпкә инмәй. Ит һәм бейә һөтө менән туҡланалар. Ажо үҙе генә икмәк шарабын эсә. Музыка ҡоралдарынан флейта, бубендары бар, икәүһе билдәһеҙ. Тамашалар өсөн ҡулланыла: өйрәтелгән дөйә һәм арыҫлан, аттарҙа һыбай күнекмәләр (волтижировка) һәм бауҙа йөрөү.

Әруахтарға ҡорбанды яланда килтерәләр. Ҡорбан салыу өсөн тәғәйен билдәләнгән көн юҡ. Шамандарҙы гань (ҡам) тип атайҙар. Никах өсөн ҡалымды ат һәм һарыҡ менән түләйҙәр. Байҙар йөҙәр һәм меңәр баш мал биреп түләй. Кеше ерләгән саҡта йөҙҙәрен тырнамайҙар, тик мәйеттең тәнен 6 ҡат урайҙар һәм илайҙар; һуңынан уны яндыралар, ә йыйып алынған һөйәктәрен бер йылдан һуң ерләйҙәр. Шунан һуң билдәле бер ваҡытта илау йолаһы башҡарыла. Ҡыштарын ағас ҡабығы менән ҡапланған ыҙмаларҙа йәшәйҙәр. Уларҙың яҙмалары һәм телдәре хойхустарҙыҡына ныҡ оҡшаш. Закондары бик ҡаты. Алыш алдынан баҙап ҡалған, илсе вазифаһын башҡармаған, хакимға аҡылһыҙ кәңәш биргәндәр, урлашҡан кешеләр кеүек үк, баштарын киҫеүгә хөкөм ителә. Әгәр бурҙың атаһы булһа, уның башын атаһының муйынына аҫып ҡуялар, һәм ул уны үҙе үлгәнгәсә йөрөтөргә мәжбүр ителә. Ажо йәшәгән ерҙән хойхус урҙаһына тиклем дөйә йөрөшө менән 40 көнлөк юл..."

Ошо яҙманан сығып, ул замандағы ҡырғыҙ дәүләтенең эре сәйәси берләшмә булып, унда йәшәүсе халыҡтың дөйөм һаны 400 меңдән 500 меңгә тиклем етеүен (80 мең айырым хужалыҡтың һәр ҡайһыһында кәмендә 5-әр кеше булған, тип иҫәпләгәндә) фаразлап була. Был иртә урта быуат дәүләттәре өсөн бик ҙур һан булып тора. Үҙәк власть берҙән-бер хаким ҡулында булып, башында иң йоғонтоло түрәләр, баш начальниктар, баш бәктәр йә иһә бейҙәр триумвираты торған бюрократик аппаратҡа таянған: "Улар дәүләтендә бөйөк командующий Хэсибэй, тип атала, чиндары буйынса артабанғыларын Ацзюйшэ-би бэй, А-ми-бэй, тип йөрөтәләр, ошо өс кеше бергәләшеп идара итәләр". Уларҙың ниндәй титул биләгәнен билдәләп булмай, әммә ҡытайса "бэй" төркиҙәрҙәге "бей" (кенәз) дәрәжәһенә тура килә. Ете министрҙан һәм ун биш эш башлығынан дәүләттең үҙәк аппараты хасил була. Ун идарасы, күрәһең, ун өлкәгә тәғәйенләнгән наместник вазифаһын үтәгәндер. Ғәскәр менән етәксе-башлыҡтар һәм дагандар, йәғни, тархандар командалыҡ иткән.

Ҡырғыҙҙарҙың хакимлыҡ итеүсе династияһы, легендар традицияға ярашлы, Бөйөк Төрки, Көнбайыш Төрки, Көнсығыш Төрки, Тюргеш һәм Хазар ҡағанаттары башында тороусы Ашин тоҡомо вариҫтарынан, тип ҡабул ителгән. "Чжоушу" һәм "Бэй ши" ҡытай хроникаларына индерелгән бер боронғо легендала Ашин тоҡомонан булған төрки ата-бабаларының береһе Нидулу шадтың ағай-энеләренән Цигу исемлеһе Афу (Абакан) һәм Гянь (Кем, Енисей) йылғалары арауығында батшалыҡ иткән.

Ҡырғыҙҙар яҙмалы халыҡ була, улар төркиҙәрҙең рун тамғалы яҙмаһын ҡуллана, һәм Енисей йылғаһы үҙәнендә руник ташъяҙма ҡомартҡылары күпләп һаҡланып ҡала. Уларҙа хакимлыҡ итеүсе клан беҙгә билдәле булмаған сәбәптәр менән бәйле үҙҙәрен "барс тоҡомдары" тип атай, ә был Ашиндың тоҡомо инә бүренән башланыуы хаҡындағы легендаға ҡаршы килә:

*"Барс тоҡомонанмын,*
*кешеләр ерендә*
*Шөһрәттән ләззәтләнеп*
*туйманым.*
*Уҡ атҡанда мәргән*
*инем мин.*
*Мал тапҡанда көслө*
*инем мин.*
*Балаларынан китте*
*бүре мәңгегә.*
*Ташлама беҙҙе, Барс!*
*О, ҡайғы беҙгә!*
*Беҙ - Һомайҙан, беҙ -*
*бейҙәр: тәү замандан*
*Яугир булдыҡ*
*ирҙәрҙән беҙ".*

Ҡырғыҙ дәүләте металлургия үҙәге була, ул Төрки ҡағанатын тимер һәм ҡорал менән даими тәьмин итеп тора. Тан империяһы заманындағы ҡытай географы Цзя Дань ҡырғыҙҙар тураһында шулай яҙған: "Һәр ваҡытта яҡшы тимер етештереп торалар, уны цзяша тип атайҙар. Туцзюэға (төркиҙәргә. - **Ред. иҫк.**) даими сығаралар. Был шул тимер инде. Ҡоралдарына ҡағылғанда, улар, әйтергә кәрәк, ҡалҡан, йәйә, уҡтар ҡуллана. Уларҙың аттары ҡорһаҡтарынан аяҡтарына тиклем ҡалҡан менән ҡапланған". Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡытайҙар улар хатта ки метеорит металын да эшкәртә икән, тип ышанған: "Уларҙың дәүләте алтын, тимер һәм ҡурғаш етештерә... Уларҙың дәүләтендә күк ямғырының тимере бар, уны бысаҡ һәм ҡылыс яһар өсөн йыялар, ул ҡәҙимге тимерҙән айырылып тора".

Ҡырғыҙҙар, төркиҙәргә яһаҡ түләп тороусылар булһа ла, уларға буйһоноуҙы бик ауыр кисерәләр, һәм бер сығанаҡта хәбәр ителгәнсә, "тештәрен шығырлатып, үҙҙәре үс алыу мөмкинлеген көтәләр". Шулай ҙа боронғо төркиҙәрҙең Орхонда табылған ташъяҙмаларында уларҙың ҡағандары вафат булған саҡтарҙа Төрки ҡағанатына буйһонған халыҡтарҙың, шул иҫәптән ҡырғыҙҙарҙың да, ифрат ныҡ ҡайғы кисереүҙәре хаҡында бәйән ителә: "... Бёкле далаһы халҡы, табгач, тибетлылар, аварҙар һәм Рим, ҡырғыҙҙар, уч ҡурыҡандар, утыҙ татарҙар, ҡытай һәм татабтар, шул хәҙәре халыҡтар килеү менән ыңғыраштылар һәм иланылар: улар шул тиклем шөһрәтле ҡағандар ине".

VII быуат башында, Бөйөк Төрки ҡағанаты тарҡалыу менән, ҡырғыҙҙар үҙҙәре күптән көткән мөстәҡиллеккә өлгәшә һәм Ҡытай менән туранан-тура бәйләнешкә инә, әммә, ҡытайҙарҙың башҡа дәүләттәргә ҡарата электән килгән сәйәси традицияһы буйынса, бындай мөнәсәбәттәр вассаллыҡ формаһында ҡала. Шулай ҙа бындай формат һәр саҡта ла ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Шул уҡ Ҡырғыҙ дәүләте тик номиналь рәүештә генә Тан империяһының вассалы булып һанала. Ҡытай министры Ли Дэ-юйҙың эш ҡағыҙҙары араһында уның ҡырғыҙ ханына ике яҡлы мөнәсәбәттәр тарихына ҡағылышлы хаты һаҡланып ҡалған: "Чжэнь-гуань (632 йыл) девизы аҫтындағы хакимлыҡтың 6-сы йылында Тай-цзун һеҙҙең ханығыҙға Ван И-хун тигән илсеһен тыныслыҡ урынлаштырыу приказы менән ебәрҙе. Чжэнь-гуань девизы аҫтында (648 йыл) хакимлыҡ итеүҙең 22-се йылында Һеҙҙең биләмәләр батшаһы шәхсән үҙе хаким һарайына килде. Тай-цзун уға һул ҡул почетлы гвардияның генерал чинын биреп, Цзянь-кунь өлкәһенең генерал-губернаторы вазифаһына тәғәйенләне. Тянь-бао (442-755 йй.) девизы аҫтында хакимлыҡ итеүҙең һуңғы йылдарына тиклем хаким һарайына яһаҡ түләү туҡтаманы.

Шулай итеп, хандың бабаһы шул ваҡытта уҡ беҙҙең дәүләтебеҙ шәфҡәтенә лайыҡ булды. Һеҙҙең дәүләтегеҙҙә әле иҫән ҡалған ҡарттар һис шикһеҙ ошо хаҡта һөйләйҙәрҙер, тип уйлайым. Мин бөйөк ниәттәрҙе ҡабул итәм һәм иҫке дуҫлыҡты дауам итергә уйлайым".

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 15-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар китте һуғышҡа

**18-19 апрель.** Һәр станцияла хәрби коменданттар менән ыҙғыша торғас, Мыльновола аттарҙы бер аҙ сығарып йөрөтөүҙе ойоштора алдыҡ. Вагондан сығыу менән, аттар кешнәшә, рәхәтләнеп аунай, уйнаҡлай башланы. Вагонда бикләнеп, һелкенеп килеүгә екһенеп киткәндәр, малҡайҙар.

**20 апрель.** Чаадаевка тирәһендәге бер станция. Паровоз туҡтаған тәңгәлдә егермеләп ҡатын-ҡыҙ юл таҙарта. Ялан почтаһының шоферы һәм тағы бер нисә һалдат, гармун күтәреп, вагондан сыҡты ла уйнап ебәрҙе. Башта олораҡ ике ҡатын төштө бейергә. Таҡмаҡлап, мәҙәкләп бейейҙәр, улар артынан берәмләп йәшерәк ҡатын-ҡыҙҙар бейене. Бер сая рус ҡатыны: "Башҡорт егеттәре бик сибәр була икән, - ти. - Бер-ике көнгә ҡалығыҙ, бына тигән ҡыҙҙарға өйләндерербеҙ!" Беҙҙең егеттәр ҙә аптырап ҡалмай: "Еңеп ҡайтышлай, бында мотлаҡ туҡтарбыҙ, туйҙар үткәрербеҙ, көтөгөҙ", - тиҙәр.

**24 апрель.** ...Бына Узловая станцияһы. Ул да емерек.

Бер ете-һигеҙ йәшлек малайҙан һорайым:

- Бында немецтар булдымы?

- Булды, бик күп булдылар, уларҙы дүрт ай элек үк Белов отряды ҡыуҙы инде.

- Ни эшләне һуң ул немецтар?

- Ни эшләмәне, бөтә тауыҡ-ҡаҙҙарҙы ашап бөттөләр ҙә киттеләр.

- Нимә һөйләнеләр улар?

- Москва капут, Совет капут... - тинеләр.

Турды станцияһы. Юлда ҡыйралған автомашиналар, танкылар, пушкалар ултыра... Немецтарҙыҡы. Бөтә трофейҙар ҙа йыйылып бөтмәгән әле.

Сәғәт һигеҙҙәрҙә Сафоновка станцияһында инек инде. Станция начальнигынан: "Бында күпме торабыҙ?" - тип һораным. "Ошонда вагондарҙан төшәһегеҙ инде", - тине ул. Баҡтиһәң, килеп еткәнбеҙ икән.

Станция Ефремово ҡалаһынан ун ике километрҙа ғына. Был тирәлә ҡыш буйы тыныс булған. Дошман самолеттары тик бер-ике көн элек кенә күренә башлаған, ҡаланы ныҡ ҡына емертеп киткәндәр.

**1 май.** Хәрәкәт итеүсе армия сафына баҫыуыбыҙға ун көн үтеп тә китте.

Беҙ - Брянск фронтында, уның 8-се кавалерия корпусы составында, Тула өлкәһе Каменск районының Ситово ауылында торабыҙ. Бөтә полк та был ауылда түгел, әлбиттә. 3-сө, 4-се эскадрондар төньяҡтараҡ - Ежовка ауылында; 1-се эскадрон да ситтә.

Байрамда көсөргәнешле, ентекле эш, бигерәк тә - алған ҡоралды барлау менән мәшғүл булдыҡ. Хәрби техника һәм ҡорал алып бөттөк тиерлек. Билдәле план, программа буйынса уны өйрәнеү башланды.

**5 май.** Иртә таңда Күсимовҡа М.М. Шайморатов шылтыратты:

- Комиссарың, партбюро секретарыңды алып, өсәү әҙер тороғоҙ, мин хәҙер килеп етәм, - тигән. (Дивизия штабы беҙҙән һигеҙ километрҙа - Титовка ауылында урынлашҡан).

Комдив сәғәт 8-ҙә килде. Ауыл ситендә ҡаршы алдыҡ. Күсимов полктың план буйынса занятиеларға тотонғанын докладывать итте. Ситтәге өй тирәһендә бер нисә бүрәнә ята. Полковник шул яҡҡа табан атланы, беҙ уға эйәрҙек.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Бөгөн Себер, Мәскәү тарафтарында республикабыҙҙан ғына ла 200 меңләп ир-егет эшләй, тиҙәр. Шул ир-егеттәр тыуған ерҙәренә ҡайтып, ауыл хужалығына тотонһа, бына булыр ине дан.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!



# МИҘАЛДЫҢ ИКЕ ЯҒЫ...

**Ошо тажлы ҡорогорвирустан һуң тормош яҡшы яҡҡа үҙгәрерме, тигән һорауға бик күп дәлилдәр килтереп яуап биреп булыр ине. Әммә бөтәһе тураһында ла яҙып бөтөп булмаҫ. Ә иң мөһиме...**

Былдай ҡурҡыныс вирустар һөжүме борон-борондан Ерҙә йыш ҡабатланып торған, ә кешенең холҡо бер ҙә үҙгәрмәгән бит. Киреһенсә, кеше тағы ла ныҒыраҡ нәфселегә әүерелә барған. Ә тәбиғәткә мөнәсәбәт һуң?

Мин, тәбиғәт - ул Аллаһы Тәғәлә, тип уйлайым. Тәбиғәт беҙгә әсәр һыу бирә, һуларға һауа бирә, ашар икмәк бирә. Һанап бөткөһөҙ ул биргәндәр. Ә беҙ шуның ҡәҙерен беләбеҙме? Юҡ! Тәбиғәтебеҙҙе ҡырағайҙарса талайбыҙ, бөтөрәбеҙ, ағыулайбыҙ. Еребеҙ күп, типмелер, уның тәнен яралайбыҙ, ҡаҙабыҙ, соҡойбоҙ, ҡәҙерһеҙләйбеҙ. Ә тәбиғәт түҙә-түҙә лә, кешелекте афәттәр менән кисәтә, әммә кешелектең ҡомһоҙлоҡтан күҙе тонған, йөрәге тунған...

Ер ҙә йәшәргә тырыша, шуғалыр, тәбиғәт кешелеккә ҡаршы тағы ла ҡурҡыныһыраҡ афәтте таж кейҙереп тороп сығарҙы, тип уйларға кәрәк. Кешелек был афәттән иҫән-һау ҡотолһа, иң тәү сиратта тәбиғәткә ҡарашын үҙгәртергә тейеш. Уны талау, бөтөрөү генә түгел, ергә төкөрөргә лә ҡурҡып торорға тейеш. Белмәйем, улай булырмы икән? Ҡаланан саҡ ҡына ситкә сыҡһаң, тотош сүп-сар донъяһына сумаһың, ә йылға буйҙары... Тауҙарыбыҙ ҙа яланғас булып ҡалып бара. Урмандар ҡырыла, ә урынына бер ағас та ултыртылмай. Уф, һөйләп бөтөрлөк түгел...

Тәбиғәткә алама ҡараш иң ҡурҡынысы, әлбиттә. Миҙалдың икенсе яғы ла иҫ китерлек: халыҡтың үҙ-ара мөнәсәбәте, әскелек, ғаиләлә ҡатынҡыҙҙы йәберләү, етемлектә илаған, ташланған балалар. Ҡатын - әсә, уның аяҡ аҫтында ожмах. Ошо илаһи йән күп ғаиләләрҙә тип әйтерлек иҙелеп, туҡмалып йәшәй. Ә улар ирҙәрен әсенеп ҡарғамай тиһегеҙме, ҡарғай, күҙ йәшен түгеп, сәсен туҙҙырып, балаһын ҡосаҡлап ҡарғай. Әсә ҡарғышы бит мотлаҡ төшә. Иренә генә түгел, ә лайыҡлы йәшәү рәүеше булдыра алмаған кешелеккә төшә. Был иң ҡурҡынысы. Уйлаһаң, уйылып китерлек. Кешелектең ҡомһоҙлоҡтан күҙе тонған. Бына шуға Аллаһы Тәғәлә бик ҡаты рәүештә, бәлки, һуңғы тапҡыр, кешелекте кисәтә, тип уйлайым...

Эйе, был вирустан ҡурҡыу гигиена ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрә, ғаилә, туғандар, дуҫтар ҡәҙерен белергә өйрәтә. Азатлыҡты баһаларға өйрәтә. Әммә былары иң мөһиме түгел шулай ҙа...

**Зөбәржәт САФУАНОВА,**
**Белорет районы "Агинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

# ҮҘЕНДЕКЕ - ситтәрҙеке -

**Сит ризыҡты ҡулланыуҙы сикләү тураһында күпме генә яҙылһа ла, ҡала һәм районлардағы баҫып алған супермаркеттар үҙенекен итә: халыҡ юҡ-бар менән туйынырға мәжбүр. Хатта үҙизоляция ваҡытында таратылған аҙыҡ-түлек йыйылмаһында ла үҙебеҙҙә етештерелгән ризыҡтар булмауына шелтә яһаны республика Башлығы. Ни өсөн беҙ һаман да билдәһеҙ сығышлы, ситтәр етештергән аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирәбеҙ? Башҡорт дәүләт аграр университетының ит, һөт аҙыҡтары һәм химия технологиялары кафедраһы мөдире, ауыл хужалығы фәндәре докторы Хәмит ТАҺИРОВ менән әңгәмә ошолар хаҡында.**

**Хәмит Харис улы, беҙҙең ауыл хужалығы республика халҡын үҙе етештергән аҙыҡ-түлек менән тулыһынса тәьмин итә аламы ул?**

- Ала, әлбиттә. Аҙыҡ-түлектең бөтөн төрлөһө менән дә тәьмин итә ала. Исемлеккә ит тә, һөт аҙыҡтары ла, баҡса емештәре лә - барыһы ла инә. Ауыл хужалыҡтарына көслө инвесторҙар килде бит хәҙер. Бигерәк тә һөт аҙыҡтары етештереү үҫеш алды. Шулай уҡ тауыҡ һәм сусҡа итенә лә мохтажлыҡ юҡ. Белеүегеҙсә, сусҡа ун һигеҙгә хәтлем бәрәс бирә ала һәм уның үрсем осоро ла өс айҙан ашыуыраҡ ҡына. Тауыҡ та тиҙ арала үҫтереп алына торған ҡош. Бары һыйыр ите етештереү генә ауырыраҡ мәсьәлә булып тора. Сөнки эре мөгөҙлө малды үрсетеү һәм үҫтереү ваҡыты өс йылға тиклем һуҙыла. Был ваҡыт күп сығымдар ҙа талап итә. Ошо сәбәптәр арҡаһында һыйыр ите аҙыраҡ та, ҡиммәтерәк тә килеп сыға. Тик нисек кенә булғанда ла халыҡҡа һыйыр ите кәрәк, беҙ ошо ризыҡҡа өйрәнгәнбеҙ. Һәм был итте лә ситтән алып килгәндә түгел, ә үҙ ерлегебеҙҙә үҫтерелгәнде ҡулланырға теләйбеҙ. Әммә күп ваҡыт һәм башлыса ана шул ситтән килтерелгән ит менән туҡланабыҙ ҙа инде.

Мәҫәлән, Өфө ит-консерва комбинаты башлыса ситтән, белеүемсә, Бразилия, Аргентина кеүек илдәрҙән килтерелгән итте эшкәртә. Ундай ит һыуытҡыстарҙа йылдар буйына тунған килеш һаҡлана. Улар киҫәкләп һатыуға ла сығарылмай, ә эшкәртелеп, колбаса, тушенка сүрәтендә магазин кәштәләренә менеп ята. Ит эшкәртеүсе билдәле цехтарҙан "Сава" ла тик ситтән килтерелгән итте, биш процент тирәһе генә урындағы продукцияны эшкәртә икәнен беләбеҙ. Бөгөн халыҡтың колбаса ризыҡтарына һөйөү һүрелә төштө, шулай бит? Сөнки уларҙың тәмәтаты йәки файҙаһы юҡ. Улар шыр химикаттарҙан һәм тәмләткестәрҙән генә тора.

Ни өсөн беҙ итте ситтән алабыҙ? Сит илдә малды ит өсөн генә махсус үҫтерәләр, йәғни ит тоҡомло малдар үрсетәләр. Американы алайыҡ, мәҫәлән. Унда ит тоҡомло малдарҙы һөт етештереүгә тотонмайҙар. Уларҙың быҙауҙары һигеҙ-туғыҙ ай иркен имеп, тиҙ көрәйеп-ҙурайып китә. Унан айырым туҡланыу ярҙамында аҙырыҡ йыя. Был алымды беҙҙә лә ҡуллана башланылар. Былтыр республикала ит тоҡомло малды үрсетеү буйынса программа ҡабул ителде. Субсидиялар бүленде, ташламаларға дотациялар ҡаралды. Бына ошо алымдар эре мөгөҙлө мал ите етештереүҙе һәм үҙебеҙҙә һатыуға сығарыуҙы юлға һалыр, тип уйлайым.

**Беҙҙең республика ҡалаларындағы халыҡтың сығышы башлыса ауылдан һәм беҙ ауыл ризығына өйрәнгәнбеҙ, ауыл ризығынан айырыла алмайбыҙ. Әммә был ризыҡты етештереүселәр генә кәмей бара. Унан һуң, етештергән продукцияһын да һата алмай бит ауыл кешеһе - был да бер проблема...**

- Шулай. Ҡалала йәшәгән һәр ғаилә итте ауылдан алып килергә тырыша. Бик булмаһа, ауыл хужалығы үткәргән йәрминкәләргә бара. Һәм был сауҙа үтемле лә. Ауылдан килгән һөт тә, ит тә, башҡа аҙыҡ-түлек тә төшкә тиклем һатылып бөтә, ғәҙәттә. Әммә был аҙлап, берәр бөртөкләп кенә етештерелгән ризыҡ. Мал көтөүсе фермерҙар, шәхси эшҡыуарҙар менән дә һөйләшеп ҡарағаным бар, улар был эште уңышһыҙ, килем килтермәүсе йәки бик аҙ ғына файҙа алына торған юл итеп билдәләй. Өс йыл, хатта унан да күберәк аҫраған малдарын көҙ көндәре ит йыйыусыларға осоҙ хаҡҡа биреп ебәрергә мәжбүр улар.



Ит тоҡомло малды үҫтереү һәм аҫрау һөттөкөнә ҡарағанда осһоҙораҡ та. Уларҙы һауырға, һөтөн ҡайҙалыр урынлаштырырға кәрәкмәй. Һөт өсөн һауын аппараттары ла, продукцияны һаҡлау урындары ла кәрәк. Был тоҡом малы бары итҡә генә үҫтерелә. Бер ғаилә былдай һыйырҙы ике йөҙәр башлап та аҫрай ала.

Мәғлүмәттәр буйынса, бөгөн Себер, Мәскәү тарафтарында республикабыҙҙан ғына ла 200 меңләп ир-егет эшләй, тиҙәр. Ә бит ситкә китеүселәр улар эшләргә теләгән һәм эш рәтен белгән егеттәр. Эскесе, ялҡауҙарҙы кем хеҙмәттә тотһон? Ике йөҙҙө илле районға бүлегеҙ әле - өсәр мең эшсе ҡул. Былар бит тотошлайы менән бер колхоз, бер коллектив. Шул ир-егеттәр тыуған ерҙәренә ҡайтып, ауыл хужалығына тотонһа, бына булыр ине дан. Ә улар ситтә йөрөй. Һөҙөмтәлә, ғаиләһе таркала, балалары етем ҡала. Күрәһегеҙ, ир-егеттең ситтә йөрөүенең файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк. Ошо тәңгәлдә уйланһындар ине йәштәр, әгәр ауылдарҙа ауыл хужалығы ризығы күпләп етештерелә башлаһа, ит, һөт эшкәртеүсе хужалыҡтар ҙа продукцияны ауылдаҡыларҙан етерлек кимәлдә ҡабул итеп тора алыр ине. Был осраҡта аҙыҡ-түлектең ситтән килтерелеүе лә сикләнер ине.

**Һөт аҙығындағы тәбиғи продукцияны пальма майы ҡыҫырыҡлай, тиҙәр. Киләсәктә ысын һөт аҙыҡтарын оноттормаҫмы был әрһеҙ май?**

- Был нисек эшләнә? Һөттө сепаратор аша айырталар. Унан алынған ҡаймаҡҡа ла, майға ла пальма майы ҡушалар. Айыртылған һөткә лә шул уҡ май өҫтәлеп, ул һөт продукцияһы булып сығарыла. Был тәңгәлдә хәҙер тәртиптәр ҡатғи ҡуйылды, аҙыҡҡа һөт йәки һөт аҙығы икәне тураһында аныҡ яҙыла, һатып алғанда ярлығына иғтибар итергә кәрәк. Ә инде Рәсәйгә алып килен гән пальма майы файҙалы булыуҙан бигерәк зарарлы. Был май өс төргә бүленә. Беренсеһе - таҙартылмаған ҡыҙыл-ерән төҫтәге шыйыҡ май. Ул бик ҡиммәтле булыу сәбәпле, беҙҙекеләр уны һатып алмай. Икенсеһе - таҙартылған май, шыйыҡ һәм төҫһөҙ. Ул беҙҙең үҫемлек майҙарына торошло уртаса хаҡта. Тик был майҙы ла алыҫ аранан һатып алып ултырыу отошло түгел. Өсөнсө төрө гидрогенизланған, йәғни парафин хәленә индереп ҡуйыртылған май. Унда инде бер ниндәй ҙә файҙалы матдәләр ҡалмаған, киреһенсә, зарарлы май кислоталары барлыҡҡа килгән. Улар иһә йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙары, атеросклероз, гипертония, шәкәр диабетының барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Тап бына ошо өсөнсө төрөн генә һатып ала ала ла инде Рәсәй.

Бөгөнгө магазиндарҙа һатылған мәңге әсемәй торған һөт - ул һөт түгел. Уларҙа һыйырҙан һауылған һөттөң бер генә тамсыһы ла юҡ. Пакет һәм шешәләрҙә пальма майына ҡушылған һәм тәмләткестәр өҫтәлгән һыу. Шулай уҡ матур һауытлы сыр, эремсек, майҙарҙың да 70 проценты әле әйтелгән ҡушылма тауары. Ҡала халҡы башлыса ошондай һөт аҙыҡтары менән туҡлана. Ә был ваҡытта ауыл эшҡыуарҙары, фермерҙар һөттәрен ҡайҙа тапшырырға белмәй аҙаплана. Уларҙың алып килгән һөтө ҡабул ителмәй, сөнки натураль продукттың эшкәртеү-һаҡлау ваҡыты сикле булып, эшҡыуарға күп проблемалар тыуҙыра. Уларға үҫемлек майы ҡушып аҙыҡ етештереү күпкә ҡулайлы һәм килемле.

✓ Беҙ борон-борондан мал менән көн иткәнбеҙ. Нефть менән дә, газ менән дә, алтын-көмөш менән дә түгел, ә тап мал көсө менән ғүмер иткәнбеҙ. Был беҙҙең асылыбыҙ һәм ошоға кире ҡайтасаҡбыҙ ҙа.



# ҮҘӘКТӘ, кешнәктә

Йылдан-йыл һөт биреүсе һыйыр малы кәмей, ә халыҡ һаны арта. Әле 1990 йылда илдә 57 миллион баш һыйыр иҫәпләнгән, быйылғы йыл башында был һан 18 миллионды ғына тәшкил итә. Уйлап ҡарағыҙ, өс тапҡырға әҙәйгән. Малдың кәмеүе әлеге халәткә - ерҙәрҙең ташландыҡ булыуына килтерҙе. Мал күп булһа, уларға ашатырға ашлыҡ хәстәрләү маҡсаты алға һөрөләр, ерҙе эшкәртеп сәсеү талап ителәр ине.

Һыйырға килгәндә, ул беҙҙең халыҡта туҡ булыуҙың бик боронғо, тарихи символы. Һыйылы көнөң һыйырҙа, тип бушҡа әйтмәйбеҙ бит. Шулай уҡ беҙ борон-борондан мал менән көн иткәнбеҙ, хатта мал артынан йөрөп йәшәү урыныбыҙҙы үҙгәрткәнбеҙ. Нефть менән дә, газ менән дә, алтын-көмөш менән дә түгел, ә тап мал көсө менән ғүмер иткәнбеҙ. Был беҙҙең асылыбыҙ һәм ошоға кире ҡайтасаҡбыҙ ҙа. Ҡаҙылма байлыҡтар һәм башҡа нәмәләр кәмер, аҙайыр, бөтөр, ә мал үҙе үк тереклекте һаҡлап ҡалыр. Яҡын киләсәктә халыҡты яһалма аҙыҡтар ҙа, пальма майы ла, сит ризыҡтар ҙа бүктерер (әле үк был һиҙелә башланы инде) һәм ул үҙ ерҙәренә, үҙ малына һәм аҙыҡ-түлегенә әйләнеп ҡайтыр. Быларҙы иҫбатлап, Йәрмәкәй, Бишбүләк, Ауырғазы райондарында төҙөлөп ятҡан ауыл хужалығы комплекстарын миҫалға килтерергә мөмкин.

**▸ Башҡортостанда етештерелгән ауыл хужалығы продукцияһы сит ил фермерҙарынан алып киленгән аҙыҡ-түлектән нимәһе менән айырыла икән?**

- Башҡортостандың ауыл хужалығы продукцияһы Европа фермерҙарының продукцияһы менән уңышлы конкурентлыҡ итә ала, тип иҫәпләй республика Хөкүмәте вице-премьеры һәм ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. Ҡыш айҙарында Башҡортостан делегацияһы Берлинға "Йәшел аҙна" күргәҙмәһенә барғайны һәм Рәсәйҙең 18 төбәге менән бер рәттән, беҙҙең республика ла күргәҙмәлә ҡатнашҡайны. Австрияның ауыл хужалығы өлкәһе менән киләсәктә уларҙан технологиялар һәм тоҡом малы һатып алыу, Европаға ошо ил аша үҙ продукцияһын оҙатыу тураһында килешеп тә ҡайтты республика делегацияһы. Республиканың тәбиғәте, ер-һыу таҙалығы, климат үҙенсәлектәре һәм башҡа күрһәткестәре беҙҙә ауыл хужалығының сифатлы һәм тәмле аҙыҡ-түлек етештергәнен "ҡыҫҡырып" тора. Бында бары инвесторҙарҙы йәлеп итеү генә бурыс. Әйткәндәй, шул барыуҙа Башҡортостан вәкилдәре инвестицияларҙы дауам итеү буйынса сит ил инвесторҙары - Штефан Дюрр (уның "ЭкоНива" агрохолдинги Бәләбәй, Йәрмәкәй, Бишбүләк райондарында һөт комплекстары төҙөй) һәм Бәләбәй һөт комбинаты хужаһы Алекс Бонгрэн (Францияның "Savencia Fromage & Dairy" концерны президенты) менән осрашты. 2021 йылда Бәләбәйҙә Рәсәйҙәге һәм Европалағы иң ҙур һөт заводы эшләй башларға тейеш.

**▸ Сәләмәт тормош алып барыуҙа, сәләмәт булыуҙа ризыҡтың, аҙыҡ-түлектең үҙ ерлегендә үҫкән, әҙерләнгән, етештерелгән булыуы мөһимме?**

- Бөгөн сәләмәт тормош алып барыу модаға инде. Ҡайһы бер сәләмәт тормош яҡлылар "Ит ашау зыянлы", тип лаф ора. Ә бит беҙҙең кеүек һалҡын ҡыш йылдың яртыһынан күберәген биләгән климатлы ерҙә йәшәгәндәргә иттең зыянлы түгел, ә, киреһенсә, файҙалы ризыҡ икәнен Америка йәки Мәскәү диетологтарына аңлатыу урынһыҙ. Беҙҙең малдарыбыҙ күберәген һалҡында үҫкән үлән менән туҡлана, уларҙа витаминдар йыйылы яҡта үҫкән үләндәр менән сағыштырғанда 20-30 тапҡырға күберәк. Улар биргән һөт тә, ит тә тап беҙҙең организмға яраҡлашҡан, беҙ быға тиклем һыйыр малдары менән йөҙҙәрсә йылдар буйы бер-беребеҙҙе туйҙырыусы һәм туҡландырыусы булараҡ тулыландырып, йәшәтеп килгәнбеҙ. Ит ашағандан берәүҙең дә ғүмере ҡыҫҡармаған, көсө бөтмәгән, сәләмәтлегенә зыян килмәгән. Бөгөн килеп, ит зарарлы, имеш. Сит яҡтарҙан, илдәрҙән килтерелгәне ала көстө лә, хәлде лә, ә үҙебеҙҙеке түгел.

Балды ла беҙ ҡайҙан килгәнен булһа ла тота ла алабыҙ. Баҡтиһәң, ул да тик үҙ ерлеге кешеләренә генә хеҙмәт итә торған ризыҡ икән. Йыш ҡына тау яҡтарынан килгән, Ҡытайҙан алынған, Украина болондарында йыйылған бал һатыла. Улар осһоҙораҡ та. Тик был бал беҙҙең халыҡ организмында бөтөнләй эшкәртелмәй, шунлыҡтан, ят мәғлүмәт ҡалдырыуҙан башҡа шифаһы ла булмай.

Диетаға ултырыусылар күп хәҙер. Бигерәк тә яҙ-йәй ябығыусылар, организмдарын таҙартыусылар һаны арта. Һәр кем ниндәйҙер һөҙөмтәле һәм тиҙ ярҙам итеүсе ысулдар эҙләй. Унан китә әллә ниндәй тибет медицинаһы, япон диеталары, диңгеҙ минералдары һәм башҡалар. Ә был ысулдарҙың береһе лә беҙҙең төбәк халҡына килешмәгәнлеген, килешмәү генә түгел, иммунитетҡа үтә лә зыян килтереүен, нервыларҙы ҡаҡшатыуын, төрлө ағзаларҙы зарарлауын белгәндәр бик аҙ. Бөтөнләй сит ерҙә үҫкән үләндәрҙән яһалған порошоктар, беҙҙең яҡта булмаған диңгеҙ үҫемлектәренән яһалған коктейлдәр, ят ризыҡтарҙан төҙөлгән менюлар, әлбиттә, сит климат кешеһенең (йәғни, беҙҙең) организмын шок хәленә индерә һәм ул ҡыҫҡа ваҡыт эсендә күп ауырлығын юғалта, ябыға, кибә. Организм был хәлдә икешәр йыл һуҙымында йөрөргә лә мөмкин икән, әммә ул йәйләп был торошонан ысҡына һәм ҡапыл ҡартая, йәки төрлө ағзалар эшләктән сыға, нервы ауырыуҙары барлыҡҡа килә. Һәр хәлдә, был диеталарҙың аҙағы хәйерле булмай. Был маҡсатта ла бары тик үҙ ерлегебеҙ ризыҡтарынан төҙөлгән менюлар, диеталар, аҙыҡтар булыуы зарур.

Ашау, туҡланыу - ул йәшәү процесындағы иң мөһим һәм етди иғтибар талап иткән мәсьәлә. Ҡасандыр тик тәбиғи аҙыҡтар менән генә ризыҡланып йәшәп өйрәнгән беҙ, бөгөн килеп, ярым яһалмаға тороп ҡалып барабыҙ. Ә бит бында икенсе берәүҙәрҙең ғәйебе юҡ. Беҙҙән берәү ҙә еребеҙҙе лә, малыбыҙҙы ла, емешләктәребеҙҙе лә, үҫемлек-үләндәребеҙҙе лә тартып алмаған. Бары беҙ үҙебеҙ генә, замана тәгәрмәсе ыңғайына әрһеҙ әйләнеп, ысынбарлыҡтан алыҫайып киттек. Һәм бөтөн был ситләшеү төрлө ауырыуҙарға, йән һәм тән сәләмәтһеҙлегенә, рухи көсһөҙләккә, кәрһеҙлеккә һәм башҡа әхлаҡи тарҡалыуҙарға алып килде. Беҙҙең сәләмәт тормош - ул ерҙә, ер хеҙмәтендә, малда, йәғни ауыл хужалығы кәсебендә, аҙыҡ-түлегендә, ғөрөф-ғәҙәтендә һәм йәшәйешендә. Ашағаның аҡ булһа, ҡылғаның да хаҡ булыр, ти бит халыҡ мәҡәле лә.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

*Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ*



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

Билдәле социаль-иҡтисади һәм сәйәси сәбәптәр арҡаһында ергә хоҡуғын юғалтҡан айырым башҡорттар ғына түгел, тотош олоҫ кешеләре припущенник булыуға дусар ителгән. Ихтилалдарҙа әүҙем ҡатнашыусылар аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙҙырылған. Златоуст, Миәс, Һатҡы, Йүрүҙән-Ивановский һәм башҡа заводтар тарафынан аҫаба ерҙәре тартып алынған ҡара- һәм барын-табын, һыҙғы, әйле һәм ҡыуаҡанлыларҙың бер өлөшө припущенниктар хәлендә ҡала. Оло ҡатайҙар хужалыҡ эшмәкәрлеге өсөн яраҡһыҙ булған һаҙлыҡлы һәм таулы аҫаба ерҙәрен ҡалдырып киткәс, түләүһеҙ генә Ҡатай һәм Бала-ҡатай олоҫтарындағы аҫаба ҡәрҙәштәре тарафынан ҡабул ителә.

Припущенник-башҡорттар төбәктең көнбайыш яғында бигерәк тә күп була. Был ярым күсмә тормош алып барыусы башҡорттарҙың ултыраҡ хәлгә күсеүе, ер эшкәртеүсе хужалыҡтар үҫеше менән дә бәйле. Ошо төбәктең башҡа халыҡтар һәм хөкүмәт тарафынан колонизацияланыуы ла ошо процесты көсәйеүенә килтерә. VIII ревизия буйынса Ырымбур губернаһының Бәләбәй, Бөгөлмә һәм Минзәлә өйәҙҙәрендә 22 595 припущенник иҫәпкә алынып, ерһеҙ ҡалған 65 мең башҡорттоң 34,2 процентын тәшкил итә.

Үҙ общиналарынан сығыусы ерһеҙ башҡорттар, түләү шартында (йылына 10-25 тин) аҫаба милләттәштәре тарафынан ҡабул ителеп, припущенниктар, тип аталһа ла, ниндәй сословиеға ҡарауын (яһаҡ түләүсе, һуңынан хеҙмәти) һәм этник (башҡорт) исемен һаҡлап ҡалған. Аҫабалар припущенниктарҙы ебәрелмеш (припускать - ебәрелеү) йәки килмешәк (приходить - килеү), тип йөрөтә башлай. Припущенник булараҡ, ебәрелмеш ер менән файҙаланған өсөн аҫаба ҡәрҙәштәренә билдәләнгән кимәлдә түләү бурысын үтәһә, башҡорт булараҡ, ҡаҙна һәм үҙен ҡабул иткән община талап ителгәндә башҡарырға тейеш булған. Шулай итеп, аҫабалығын юғалтҡан һәм сит общинаның припущенникы булып киткән башҡорт яһаҡ түләүселәр (XVI-XVIII бб.), һуңынанараҡ башҡорт хеҙмәти (1798-1865 йй.) сословиеһында иҫәптә торған.

Халыҡ колонизацияһы башланыуы менән припущенниктар институты үҙ үҫешен дауам итә. Бының менән бергә припущенниктарҙың милли составы ла ҡатмарлаша бара. Башҡорт припущенниктары араһына ерһеҙ татар, мишәр, мари, мордва, удмурт һәм сыуаш крәҫтиәндәре вәкилдәре күпләп килеп инә. Үҙ общинаһынан сыҡҡан Волга буйы крәҫтиәндәре, Башҡортостанға күсеп килеп, башҡорт аҫабаларының припущенниктары булып китә. Татар припущенниктары бында үҙҙәре бер нисә сословиеға бүленә: хеҙмәти (служилое), сауҙа итеүсе, яһаҡ түләүсе, сумаҙанлы татарҙар. Мишәр припущенниктары хеҙмәти сословиеға ғына ҡарай.

Припущенниктар даирәһенән аҡрынлап типтәр сословиеһы барлыҡҡа килә. Припущенник - типтәр төшөнсәһенән киңерәк. Бөтә типтәрҙәр ҙә тиерлек припущенник булһа, припущенниктарҙың барыһы ла типтәр түгел.

XVII-XIX быуат типтәрҙәре урыҫ общиналарынан сығарылған йәки ҡыуылған кешеләрҙе (изгойҙарҙы) хәтерләтә. Изгой - ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында үҙ общинаһынан сығарылып, яһаҡ түләүҙән азат ителгән элекке смерд-общинник. Ирекҡә ебәрелгән ҡол да изгойға әйләнгән, сөнки ул үҙ мөхитенән һәм сословиеһынан сығарылған. Юридик яҡтан ирекле һаналған изгойҙарҙың үҙ аллы етештереү эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеү өсөн бер ниндәй мөмкинлеге булмай, һәм уларҙың феодалдарға эшләүҙән башҡа сараһы ҡалмай.

Башҡорт мөхите шарттарында көн иткән типтәрҙәрҙе лә изгойҙарға тиңләп була. Аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙған башҡорт мохтажлыҡ арҡаһында үҙ теләге менән йәиһә мәжбүри рәүештә (тибелеп) үҙ общинаһынан да, сословиеһынан да сығарылған. Типтәрҙәрҙән айырмалы, припущенниктар үҙ сословиеһында ҡала алған. Шуға күрә типтәрлек йөкмәткеһе буйынса ижтимағи күренеш булып, уны аңлатҡан терминдың тибеү - тибелеү - типтереү - типтер - типтәр рәүешендә барлыҡҡа килеүенә ышаныуы ҡыйын түгел (бүлер - бүләр, күсер - күсәр һүҙҙәре менән сағыштырып була). Һеҙҙең иғтибарығыҙға "типтәр" терминының килеп сығышына ишара булырҙай башҡорт мәҡәлен тәҡдим итеү урынлы булыр:

Иле типкән - ир булмаҫ,
Ташлап киткән - ер булмаҫ,
Көтөү типкән - мал булмаҫ,
Күңел типкән - йәр булмаҫ.

Шул уҡ ваҡытта әҙәбиәттә ошо атаманың фарсы телендәге "яҙыу, килешеү ҡағыҙы" мәғәнәһендәге "дәфтәр" һүҙенән килеп сығыуы хаҡында икенсе ҡараш та бар. П. И. Рычков, В. Н. Витевский, Ғ. Н. Әхмәров һәм башҡалар ошо ҡарашты раҫ тип тапҡан. Г. Комиссаров сыуаштарҙа "типтер" һүҙенең түләнергә тейешле бурыс күләме һәм уның түләнгән өлөшө бысаҡ менән билдәләнә торған бирканы аңлатыуы тураһында яҙа. Ошо ҡарашты яҡлаусылар типтәрҙәрҙең үҙ атамаларын аҫаба башҡорттар менән килешеү шарттарын төҙөгәндән һуң ғына алыуын раҫларға тырыша. Әммә ысынбарлыҡта килмешәк-припущенниктар килешеү төҙөгәнгә тиклем дә, килешеү төҙөлгән мәлдә лә йыш ҡына типтәр, тип теркәлә алған. Билдәле лингвист Ә. Ә. Юлдашев Учалы районы типтәрҙәренең (элекке Верхнеуральск өйәҙенең бер өлөшө) көнкүрешен һәм һөйләшен өйрәнгәндә быға тәүләп иғтибар иткән. "Типтәр" терминын "дәфтәр" һүҙе менән бәйләүҙә бер ниндәй ҙә логика юҡ.

**(Дауамы бар).**

ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# СӘСЕҮГӘ СЫҒЫУ



## Беренсе күренеш

*Сәсеү башы ырымдары*
*Яҙғы ялан. Сәсеүселәр менән ағинәйҙәр сыға.*

**Ағинәйҙәр:**
- Киленем үҙе лә аңғармаҫтан көйәнтә йыуған, ямғырға булыр әле.
- Күрҙеңме, кисә ай салҡан әйләнеп, күнәк элерлек булғайны, былай булғас, ашлыҡ уңыр.
- Минең арҡам һыҙлап сыҡты, төнө буйы йоҡо алманы. Атайым шулай һыҙланһа, гелән ямғыр болото ҡуйыра торғайны.
- Етегән йондоҙҙоң ҡараһыу булып күренеүе лә яуынға, йәмәғәт, былай булғас, ашлыҡ уңыр.
- Ҡарағыҙ, ана, сәпсектәр туҙанда ҡойона, йыл ҡоро килмәҫ әле.
- Мулла-ата, донъя мәшәҡәттәре өсөн берәй доға уҡып иштертерһәңсе. Һуңынан оло эшкә тотонор инек.

**Мулла:** Ҡөрьән-Кәрим сүрәләре, доғалар ҡабатлағандан иҫкермәй ул, яңыра ғына. Уҡыған һайын Аллаға яҡынайбыҙ, иманыбыҙ арта. Раббыбыҙ бөтә эштәребеҙҙең дә һөҙөмтәләрен оло итһен, беҙҙе был донъяла хурлыҡтан һаҡлаһын үә әхирәт ғазаптарынан коткарһын. "Аллаһүммә әхсин гәкибәтәнә фил-үмүри күллиһә үә әжирнә мин хизинд-дүнйә үә гәҙәбил-әхирати". Ярай, ағай-эне, бисмилләһир-рахмәнир-рахим, Аллаға тапшырайыҡ!

**Мулла** *(ҡоласын киң йәйеп, һауыҙағы орлоғон ергә һибә)*:
- Йә, Аллам, рәхмәтеңде киң ҡыл! (Сәсеүселәр уны ҡабатлай).
- Килгән-киткән ырыҫҡалына!
- Ата-баба рухына!
- Етем-еһер ырыҫҡалына!
- Ҡош-ҡорт ырыҫҡалына!
- Мал-тыуар ризығына!
- Ғаиләм, балаларым ризығына!

**Ағинәйҙәр** *(алға сығып, йомортҡа тәгәрәтәләр. Үҙҙәре һамаҡлайҙар)*:
Күк инәһе - күк яулыҡ,
Ер атаһы - ерән һаҡал!
Түбә туҡлыҡтары бир!
Илгә-миргә именлек бир,
Йәнгә-тәнгә аманлыҡ бир !

**Тырмасы малайҙар** *(кемуҙарҙан йомортҡаларҙы йыя, үҙҙәре һамаҡлай)*:
Орлоҡ һалғас тубалға,
Атай теләк теләне.
Йомортҡалар тәгәрәй,
Мин йыямын сүгәләп.

**Халыҡ** *(бергә)*:
- Игенебеҙ йомортҡалай тәгәрәп уңһын!
- Донъялар имен булһын!
- Йылдар имен килеп, ашлыҡ уңһын!

**Ағинәйҙәр** *(алға сығалар)*:
- Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, һабантурғайҙар уйнай башланы.
- Һабантурғай сәсеүҙә һайраһа, муллыҡҡа: уңыш уңыр, тигән ата-баба.

**Ағинәйҙәр** *(йырлайҙар)*:
Һайра әле, турғай, моңло турғай,
Һин һайраһаң, миңә эш уңай.
Ямғыр телә, турғай, уңһын иген
Ырҙын тулып, халыҡ булһын бай!

Һайра әле, турғай, моңло турғай,
Гөлдәр һибелһен беҙҙең ҡулдарҙан.
Бөтөн илгә туҡлыҡ, бәхет килһен
Беҙ үҫтергән алтын бойҙайҙан.

**Ағинәйҙәр:** Йыр-таҡмаҡтар менән ҡайһылай эш ырай, ҡыҙҙар!
Эй, бойҙайым, бойҙайым,
Бирһен ине Хоҙайым!
Йәшең тулып, үҫеп еткәс,
Үҙен килеп урайым.

Эй, арышым-арышым,
Һиндә минең табышым.
Һин булмаһаң, был донъяла
Юҡтыр минең табышым.

**Мулла:** Ҡайһылай матур йырлайһығыҙ, ҡыҙҙар! Һеҙ йырлағас, минең дә йырлағым килеп китте әле (Йырлай).
Бейек кенә тауҙың ай башында
Төлкө башы тиһәм, таш икән.
Сылтырап ҡына аҡҡан
шишмә тиһәм,
Күҙҙәремдән аҡҡан йәш икән.

Тубылғы ла ағас ай ҙур булмай,
Тубылғылар аша юл булмай.
Кешеләрҙән кеше һис кәм булмай,
Тик бәхеткәйҙәре тиң булмай.

## Икенсе күренеш

*Кәкүк тауышын юрау*

**Кәкүк тауышы:** Кәк-күк! Кәк-күк...

*Кешеләр ергә сүгәләй, ҡайһыһы салҡатан ҡолай, малайҙар кәкүк тауышы сыҡҡан яҡҡа тәкмәсләй башлай.*

**Мулла** *(уртала, услап ер ала ла ентекләп ҡарағас)*: Минең усымда - шытым! Шытым! Йөн бөртөктәре лә бар! Шытым сыҡһа, яҡшылыҡҡа, йөн эләкһә, мал үрсеүгә!

*Барса халыҡ услап ер ала, тупраҡҡа ҡарап торалар ҙа уны һауаға, бер-береһенә һибәләр. Ҡосаҡлашалар.*

**Кәкүк тауышы:** Кәк-күк! Кәк-күк...

**Халыҡ:** Ағай-эне, ҡарағыҙ әле, кәкүк ағастың аҫҡы ботағына ултырған. Тимәк, ямғыр була-а!
- Япраҡ сирткән ботаҡта ҡысҡыра, йыш ҡысҡыра, Алла бойорһа, йыл матур килер әле.
- Ә мин кәкүк тауышын уң ҡолағым менән ишеттем, гел яҡшылыҡ ҡына ишетермен әле, Аллаһы Тәғәлә насип итһә.

**Мулла** *(күльяулыҡҡа тупраҡ төрә, үҙе һамаҡлай)*:
Тәнемдең һаулығын бир,
Йәнемдең һаулығын бир.
Тәнемдең зәкәтен бир,
Илдең именлеген бир.

**Мулла:** Һамаҡланып өшкөрөлгән тупраҡты өйөнә алып ҡайтып, түпһа аҫтына һалһаң, хужаларын төрлө йәбер-золомдан, рәнйештәрҙән, бәләләрҙән һаҡлай.

**Башҡалар** *(һамаҡлай-һамаҡлай тупраҡ төрәләр)*:
Тәнемдең һаулығын бир,
Йәнемдең һаулығын бир.
Тәнемдең зәкәтен бир,
Илдең именлеген бир,
Күпте күрҙем. Алда ла
Тағы күпте күрергә,
Насип булһын күрергә.

*Кәкүк саҡырыуы дауам итә, халыҡ эшкә тотона, йырлайҙар.*

Саҡырмасы, кәкүк, эй, ҡаршымда,
Саҡырһаңсы ағас башында,
Саҡырмасы, кәкүк, эй, ҡаршымда-
Хәсрәт кенә бирмә башыма.

Сәхрәләрҙә кәкүк, эй, саҡыра,
Бала кәкүк микән, бисара.
Уфтанһаҡ та, дуҫтар, илаһаҡ та,
Хоҙай биргән эшкә ни сара.

Сәхрәләргә сығып йөрөгәндә,
Кәкүк саҡыра тирәк башында.
Кәкүк тә генә саҡыра, мин илайым
Ғүмер һорап гәзиз башыма.

**Тауыштар:**
- Кәкүк осоп китте!
- Ҡайһы яҡҡа юл алыр икән!
- Ана, теге нөктә, ауыл яғына османы бит, тимәк, ямғырлы, уңышлы йыл буласаҡ.
- Ҡарағыҙ әле, ауыл яғынан һыбайлы килә!
- Аттың ауыл яғынан килеүе - яҡшыға, күк ат ауылға инһә, сабыулап йөрөһә, насар булыр ине. "Күк ат урам буйлап сабыулап йөрөһә - әжәл килә", - ти торғайны боронғолар.
- Теге һыбайлы егет - Иҙел бит!

**Иҙел** *(инеп)*: Өләсәйем ҡатыҡ ебәрҙе, боронғоса ағас төбөнә аҡ ризыҡ һалырға ҡушты, шулай иткәндә теләгебеҙҙе Хоҙай ишетер, юрауҙар изгегә булыр, тине.

## Өсөнсө күренеш

*Теләк теләү*
*Ағас төбөнә ҡатыҡ, йомортҡалар һалалар.*

**Ағинәйҙәр:** Тирәккәйем, аҡ һибәм, әҙәм балаларын ошо аҡтан өҙмәһен Хоҙай Тәғәлә. Малайҙар, бая йыйған йомортҡаларығыҙҙан бер нисәһен генә тирәк төбөнә һалығыҙ әле. Йылдар имен килеп, ил-йортҡа тыныслыҡ вә татыулыҡ булһын, ваҡытында ямғырҙар яуып, сәселгән ашлыҡтар уңып, ризыҡҡа яҙһын. Ямғыр яу, яу, яу, иген үҫһен тау-тау, арыштан, бойҙайҙан, беҙ һорайбыҙ Хоҙайҙан!

*(Күмәкләп көйләп һамаҡлау)*:
Алтмыш арба арыш бир,
Алтмышын да ярыш бир,
Етмеш арба етен бир,
Туҡһан арба тары бир.

Аҫҡа бир, түҡҡа бир,
Иң күбеһен миңә бир -
Һинең өсөн барыбер!
Һорағандың барын бир,
Ер, Ер!

Сәстем бойҙай,
Бирһен Хоҙай
Бер бойҙайҙан
Мең бойҙай!
Йә, Хоҙай!

Эт ҡояшы ары кит,
Беҙҙең ҡояш, бире кил!
Ҡара тәкә һуярмын,
Баҫыуҙарға ҡуярмын,
Түшен һиңә бирермен!

Ямғырҡайым, яу, яу,
Иген үҫһен тау- тау,
Арыштан,
Бойҙайҙан,
Беҙ һорайбыҙ Хоҙайҙан!

*Тырмасы малайҙар һыҙғыралар.*

## Дүртенсе күренеш

*Сәсеү өҫтө уйындары*

**Малайҙар:** Ағай, ял итеп алабыҙмы?

**Мулла:** Эйе, эйе, балалар, ял итеп, Ләйсән апайығыҙҙы бейетеп, тамаҡ ялғап, уйнап алайыҡ.

**Малайҙар:** Ур-ра-а! *(Йүгерешеп сығалар.)*

**Ағинәйҙәр** *(таҡмаҡ әйтеп бейейҙәр)*:
Быйыл йәйҙе ураҡ урҙым
Арыш ҡулағәһендә.
Рат-ти-ри-рай-рай,
Арыш ҡулағәһендә.

Ялҡауҙарҙың исеме булмаҫ
Маҡтау кенәгәһендә.
Рат-ти-ри-рай-рай,
Маҡтау кенәгәһендә.

Моңаяһың, зарланаһың
Выговор алдыңмы әллә?
Рат-ти-ри-рай-рай,
Выговор алдыңмы әллә?

Баҫыуҙарҙа т(ы)раҡторҙар
Гөрләтеп һөрә һабан.
Рат-ти-ри-рай-рай,
Гөрләтеп һөрә һабан.

Беҙ барабыҙ күмәкләшеп
Коммунизмға табан.
Рат-ти-ри-рай-рай,
Коммунизмға табан.

Йәй көнөндә эй күңелле
Беҙҙең колхоз ҡырҙары.
Рат-ти-ри-рай-рай,
Беҙҙең колхоз ҡырҙары.

Шул ҡырҙарҙа янып эшләй
Егеттәре, ҡыҙҙары.
Рат-ти-ри-рай-рай,
Егеттәре, ҡыҙҙары.

Киң ҡырҙарҙы яңғырата
Ударниктың йырҙары.
Рат-ти-ри-рай-рай,
Ударниктың йырҙары.
*Сығалар.*

**Тәскирә ҒӘЛИНА,**
**Федоровка районы**
**Яңы Яуыш мәктәбенең**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

**✓ Интеллект менән теләктәр бер-береһенә һәр саҡ дәғүә белдереп тора. Рухи үсеш - ул интеллекттың хеҙмәтсеһе, рухи уңышһыҙлыҡ - теләктәр хеҙмәтсеһе. Нәфсе уларҙың уртаһында урынлашҡан.**



Аһ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!

**Сибай концерт-театр берекмәһе режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Миңзилә Ҡотошова һуңғы йылдарҙа берекмәнең береһенән-береһе эстәлекле концерт программаларын сәхнәгә ҡуйҙы һәм баш ҡала тамашасыһын да битараф ҡалдырманы. Ижад, сәхнә, сығыштар һәм гастролдәрҙән генә тора кеүек уның донъяһы. Ә асылда, бөтөн был ҡомарлы халәткә көс биреүсе икенсе донъяһы ла бар артистың, уларын үҙенән ишетәйек.**



# ЯРАТАЛАР ИКӘН,

## тимәк, һин донъялағы иң матуры

**➔ Артист булыу бала саҡ хыялымы? Ауылда тыуып-үсеп, тота килеп сәхнә алиһәһе булырға ынтылыу өсөн ниндәйҙер нигеҙ ҙә, әҙерлек тә һәм... ҡыйыулыҡ та кәрәктер?**

- Атайым Марат Зәйләғи улы 6 йәштән генә атайһыҙ ҡалып (олатайым Зәйләғи Әхмәҙи улы һуғыштан әйләнеп ҡайтмай), яңғыҙы үҫкәнгәме икән, бигерәк моңло булды. Табындарҙамы, сәхнәләме, уның йырлағанын тын да алмай тыңлай торғайнылар. Әле булһа мине, бәләкәй ҡыҙыйҙы, алдына ултыртып, хисләнеп, илай-илай йырлағаны хәтеремдә. Ул шулай итеп үҙенең яратыуын йыр аша белдергәндер, тип уйлайым. Ана шул саҡтарҙа йыр-моңға һөйөү яралғандыр ҙа инде миндә. Ә бейеүгә иһә әсәйемдән өйрәндем. Әсәйем Миәкә районы Илсеғол ауылы ҡыҙы, бала сағынан тыптырлап бейеп, ауыл сәхнәһенән төшмәй. Бына шул ике илһамлы, шауҡымлы йән осрашып ғаилә ҡора ла инде. Шулай итеп, атай-әсәйем көндөҙ совхоз эшендә, ә кистәрен өйҙә йыйылып, ике нәнәйем, атайым, әсәйем, Илдус, Илфат, Мәғәфүр, Илһам ағайҙарым (атайым ағайҙарыма гел үҙе яратып тыңлаған йырсыларҙың исемен ҡушҡан) минең концерт күрһәткәнде ҡарайҙар! Таң һарыһынан радионы ҡысҡыртып ҡуя торғайны атайым, үҙе шуға ҡушылып йырлап йөрөй, беҙҙе эшкә ҡуша - йәй булһынмы, ҡыш булһынмы, таң менән уятып, кәртә эстәрен һепертә, баҡсала эшләтә торғайны. Төпсөгө һәм берҙән-бер ҡыҙы булғанғамы, атайым мине һәр ваҡыт үҙе менән йөрөттө. Ололар шаяртып: "Һин кем ҡыҙы"- тип һораһалар ҙа шуға: "Мин Мараттың матур ҡыҙы! " - тип яуаплағанмын. Аллаға шөкөр, мин атай-әсәй назында үҫтем!

Бала сағым малайҙар араһында үткәс, шулар кеүек үк шуҡ булдым, ағас башында ла, ҡапҡа, һарай башында ла йөрөй торғайным, малайҙар менән сәкәләшеп тә киткән саҡтар булды. Әммә өйҙә саҡта мин үҙемде матур тоторға, өҫтәл артында ла сәнске-бысаҡ тотоп ҡына ашарға тырыша торғайным, сөнки һәр ваҡыт киноартист булыу тураһында хыялландым. Ул ваҡытта беҙ бит клубта көн һайын кино ҡарай торғайныҡ, аҙна һайын - һинд киноһы, шуғалыр ҙа был сәнғәт мине арбап алғандыр. Хатта шуға барып етте: илағанда ла, нисек илайым икән, матур илайыммы икән, тип көҙгөгә ҡарап илай торғайным. Минең артист булыу уй-хыялы, күрәһегеҙ, хатта үҙем аңлап етмәгән осорҙарымда уҡ баш алған.

**➔ Артист һөнәре һәм иртә ғаилә ҡороп, әсәй булыу - быларҙы нисек итеп йәнәш алып барырға була?**

- Айбулат менән беҙ Өфө сәнғәт институтына уҡырға ингәндә, абитуриент саҡта уҡ таныштыҡ. Институт коридорында имтиханға инергә әҙерләнгән мәлдә үк уға иғтибар иткәйнем, сөнки ул бүтән абитуриенттарҙан айырылып тора ине. Икенсе турҙа беҙгә этюдты бергә эшләргә тура килде. Һәм шулай беҙ танышып киттек. Был танышыу тиҙ арала һөйөүгә бөрөләнде лә ҡуйҙы. Әйтәләр бит әле, тәү ҡараштан ғашиҡ булыу тип, шулай булды, ахыры. Ул саҡта, имтихандарҙы биреп бөтөп, уҡырға индек тигән ҡағыҙҙы ҡулға алғас та, Айбулаттың өләсәйләренә Ишембай районы Ҡарайған ауылына киттек. Минең, яңы мәктәп эскәмйәһенән сыҡҡан баланың, шулай ышанып эйәреп китеп барыуымды әйт. Бөгөнгөләй хәтеремдә, Айбулаттың Хәсбиямал өләсәһе мине "Әйҙә, килен, үт!" - тип ҡаршы алғайны. Шулай итеп, Ҡарайған ауылы Ҡотошовтар нәҫеленең төп йортона килен булып барып индем. Аллаға шөкөр, бына инде 27 йыл бергәбеҙ, 3 ҡыҙ һәм 1 ул үҫтерәбеҙ. Әйткәндәй, тәүге ҡыҙыбыҙ Айзилә 2-се курста уҡығанда тыуҙы. Уҡырға ингәндә беҙгә: "Уҡыу бөткәнсе кейәүгә сығыу, бала табыу тыйыла!" - тиһәләр ҙә, бала менән дәрестәргә йөрөй башланыҡ, профессор Ғабдулла Ғабдрахман улы Ғиләжев ҡыҙыбыҙҙы алдына ултыртып алып дәрес үткәрә торғайны. Шундай яҡшы, мәрхәмәтле кешеләр күп булды ул яныбыҙҙа. Һабаҡташтарыбыҙ ҙа бәпесте алып ҡала ла: "Айзиләне беҙ мин көтәм, шулай тип әйтерһегеҙ уҡытыусыларға!"- тип сәләм ебәрә ине. Бала көтөүҙә һылтау итеп тә ҡуялар ине, ә беҙгә был ҡулай ғына, нисек тә уҡырға өлгөрөргә, өлгәшергә кәрәк ине бит.

Ә инде икенсегә улыбыҙ тыуғанда беҙ Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театрында эшләп йөрөй инек. Башта беҙҙе: "Сибай театры ул- тәғәрмәс өҫтөндәге театр " - тип иҫкәрткәндәр ине инде. Шулай булып сыҡты ла. Айҙар буйына гастролдәрҙән ҡайтмай йөрөйбөҙ. Бәләкәс ҡыҙыбыҙҙы ҡәйнәмдәрҙә ҡалдырып, ә ике айлыҡ улыбыҙҙы үҙебеҙ менән йөрөтәбеҙ. Хатта баланы шаяртып "гастроль малайы" тип йөрөттөләр. Артист тормошо ситтән ҡарап торғанда ғына күңелле һымаҡ, ә инде ул хеҙмәттең ауырлығын һәм етдилеген шул өлкә кешеләре генә беләләр. Халыҡ байрам иткәндә, һин эшләйһең, башҡалар ғаиләһе менән ял иткәндә, һинең балаң бер ерҙә, ирең йә ҡатының икенсе яҡта, ә һин йәйен-ҡышын гастролдә йөрөйһөң...

Бына шулай итеп аңғармаҫтан үрелеп китте минең әсәй булыуым да, сәхнәлә уйнауым да. Башта әсәй, унан артист булдым. Әгәр икеһе араһында һайларға тура килһә, әлбиттә, балаларымды һайлар инем. Әммә яҙмыш минә мәрхәмәт күрһәтте, ярҙам итеүсе ҡәйнәм һәм туғандарым, һәр ваҡыт арҡа терәрлек ирем булды. Шуға ла мин дүрт бала менән дә сәхнәлә ҡала алдым.

**➔ Дүрт бала, тигәндән, һеҙҙең ғаиләлә һәр ваҡыт балалар тауышы, балалар ауазы, шулай бит? Ҡала ерендә, шундай һөнәр менән... Йөрәкле кешеләр һеҙ!**

- Һәр бала үҙ ризығы менән тыуа. Беҙҙең ғаилә ҡото - балалар! Ғаиләлә балалар ни тиклем күберәк булһа, ул шунса ныҡыраҡ булалыр, тип уйлайым. Ҡайһы саҡ, нишләп бишәү итмәгәнбеҙ, тип үкенеп тә ҡуябыҙ. Ата-әсә бит мәңгелек түгел, ә бер ғаилә балалары тормошта бер-береһенә терәк, таяныс булып ҡала. Улар бит бер-береһен ҡарай, тәрбиәләй. Был йәһәттән өлкәнебеҙ Айзиләгә күберәк яуаплылыҡ яткандыр инде, беренсе балаға һәр ваҡыт иғтибар әҙерәк, ә талап күберәк була бит. Шулай итеп, Айзиләбеҙ мәктәпкә уҡырға барыуына өйҙә ултырырға тип улымды таптым, икенсебеҙ беренсегә барыуына өсөнсөбөҙ тыуҙы, шунан инде Ишембайға күскәс, төпсөгөбөҙ булды. Аллаға шөкөр, күп балалы әсә булыуыма бер ваҡытта ла үкенмәнем һәм уларҙы ауырлыҡ итеп күрмәнем дә. Ҡатын кешенең иң беренсе бурысы ул әсәй булыу, бала тәрбиәләү. Бер ниндәй эш тә, карьера ла йәки башҡа донъяуи мәсьәләләр ҙә ҡатын затын әсәлектән мәхрүм итергә тейеш түгел. Бик теләгәндә быларҙың барыһын да бергә алып барырға мөмкин. Хәҙер инде үҙебеҙ олатай менән өләсәйбеҙ. Айзиләбеҙ кейәүгә сығып, беҙгә ейәнсәребеҙ Әминәне табып ҡыуандырҙы. Баланың балаһы балдан татлы тигәндәй, улар менән осрашыуҙы түҙемһелек менән көтөп торабыҙ.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

### Нәфсе

**36.** Теләктәр ҙә, интеллект та нәфсенең иғтибар үҙәгендә. Әгәр ҙә кешелә интеллект өҫтөнлөк итһә, рухи үсешкә юл асыла, киреһенсә булған осраҡта кеше хайуанға әүерелә башлай. "Интеллект менән теләктәр бер-береһенә һәр саҡ дәғүә белдереп тора. Рухи үсеш - ул интеллекттың хеҙмәтсеһе, рухи уңышһыҙлыҡ - теләктәр хеҙмәтсеһе. Нәфсе уларҙың уртаһында урынлашҡан һәм ҡайһы яҡ өҫтөнлөк итһә, шуға хеҙмәт итә", тигән Али ибн Сахл Исфахани.

Нәфсе йөрәктең алға китешенә ҡамасаулай. Нәфсенең теләктәре бихисап. Улар асылда ике төркөмгә бүленә:

-кинәнес эҙләүсе теләктәр;

-үҙ-үҙенде сикһеҙ яратыуға һәм хакимлыҡҡа ынтылыуға булышлыҡ итеүсе теләктәр.

Тәүгеләре менән ҡоралланғандары кешеләргә лә, йәмғиәткә лә әллә ни ҡурҡыныс тыуҙырмай. Икенселәре иһә, ысынлап та, кешелек өсөн бик ҙур ҡурҡыныс тыуҙырыусылар. Әммә ике төркөмгә ҡараусылар ҙа, тормошта нимәгә генә ирешеүҙәренә ҡарамаҫтан, улар Аллаһы Тәғәләнән бик алыҫ торалар. Ә инде һәр төрлө теләктәрҙән, йәғни нәфсеһенән ҡотола алыусылар, хатта боттарға табыныусылар ҡорамында булыуҙарына ҡарамаҫтан, Аллаһы Тәғәләгә яҡын торалар.

**37.** Нәфсе дәртле һәм асыулы. Нәфсе дәрте ярҙамында үҙе өсөн файҙа килтергән маҡсатына ирешһә, асыуы ярҙамында үҙенә зыянлы нәмәләрҙән ҡотолорға тырыша. Нәфсе ошо ике сифаты урталығында торорға тырыша, береһе саҡ ҡына көмей башлаһа, нәфсе үҙендә һәм тәнендә етешһеҙлек тоя башлай.

- Әгәр ҙә дәрт саманан тыш арта башлаһа, ыҙғыштар, усаллыҡ, үҙһүҙлелек, ике йөҙлөлөк һәм хаяһыҙлыҡ сәскә ата. Дәрттең үҙ самаһында булыуы кешелә тыуған ихтыяжды ҡәнәғәтләндерерлек булһа, еткән;
- әгәр ҙә кеше үҙенә кәрәгенән артыҡты теләй башлаһа, был күңел боҙоҡлоғона алып килә;
- әгәр ҙә кеше мохтажлығы булмайынса үҙенә файҙа эҙләһә, һаранға әүерелә;
- әгәр ҙә ул нимәнелер оҙаҡ ваҡыт теләһә, ҡыл ҡыбырлатмаһа, ҡул ҡаушырып көтөп ултырыусыға ғына әүерелә;
- әгәр ҙә ул хыялға ашмаҫлыҡ нәмәне теләһә, әшәкегә әүерелә;
- әгәр ҙә кеше юғары урын һәм унан кинәнес алырға теләһә, һөҙөмтәлә нәфселегә, шәһүәтлегә әүерелә;
- әгәр ҙә кеше һәр ваҡыт ҡайҙандыр нимәлер алырға ғына теләһә, унда ике йөҙлөлөк сифаты барлыҡҡа килә;
- әгәр ҙә кеше нимәлер сарыф итеүҙән ярлыланырмын, тип ҡурҡһа, теләһә нимә уйлай башлай;
- әгәр ҙә кешенең тәбиғәтендәге дәрте көсһеҙ һәм етерлек булмаһа, һөҙөмтәлә көсһеҙлек, иҫәүенлек һәм хуш күңеллелек килә;
- әгәр ҙә кешенең асыуы саманан тыш артып китһә, усаллыҡ, тиҙ ҡыҙып китеүсәнлек, түҙеп тора алмаусанлыҡ, кешене һыйҙырмау сифаты, ялғанлыҡ, тиҫкәрелек, эгоизм, буш ҡыуыҡлылыҡ сифаттары барлыҡҡа килә;
- әгәр ҙә кеше асыуына баш була алмаһа, был уның тәбиғәтенә һеңә, көнкүрешенә оялаша;
- әгәр ҙә кешенең асыуы йомшарһа, ул үҙ-үҙен күрә алмай башлай, битарафҡа, ихтыярһыҙға, булдыҡһыҙға әүерелә;
- әгәр ҙә кешелә дәрт тә, асыу ҙа күп булһа, көнләшеү тойғоһо уяна;
- әгәр ҙә асыу өҫтөнлөк итһә, ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшкән кешене күрә алмау тойғоһо барлыҡҡа килә.

**(Дауамы. Башы 12, 14, 17-се һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨ

■ Антибактериаль һабынды йыш ҡулланырға ярамай, ти ғалимдар. Ул тире өсөн үҙенсәлекле антибиотик булып тора, шуға ла бындай һабын микробтар менән файҙалы микрофлораны ла юҡҡа сығара, етмәһә, тирене киптерә. Бындай һабын менән ҡулды баҡсала эшләгәндән һуң йә юлда йөрөгәндә йыуыу ҡулайлыраҡ. Ә бына шыйыҡ һабындар тирегә яҡшы тәьҫир итә, тире дымға туйынып ҡала, сөнки уларҙа йыш осракта һелте булмай. Шулай ҙа бындай һабындың составындағы матдәләр күҙгә төшөп, уны әсеттереүе ихтимал, шуға уның менән бит йыумағыҙ. Йыуынғанда тирегә зыян килтермәҫ өсөн йыуғыс ҡулланмағыҙ, һабын молекулалары йыуғысһыҙ ҙа бысраҡты таҙарта.

■ Кино ҡарағанда уның күнелдең иң нескә ҡылдарына сирткән урындарында илап алырға була. Етмәһә, был файҙалы ла, ти Нидерланд ғалимдары. Ғалимдар илата торған драмаларҙы "бәхеткә юл" тип атап йөрөтә, бындай киноны ҡарағандан һуң кешеләр үҙҙәрен күпкә уңышлыраҡ тоя, имеш. Эксперимент барышында 60 тамашасы "Тормош матур" һәм "Хатико" фильмдарын ҡараған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, сеанста илаған кешеләр кино тамамланғас та үҙҙәрен шундай бәхетле тойған, был кисерештәр тағы бер сәғәт тирәһе уларҙы ташламаған. Әйткәндәй, был ир-егеттәргә лә ҡағыла. Баҡтиһәң, сер химияла йәшеренгән - бындай хис-тойғолар окситоцин тигән матдә бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, тап ул бәхет һәм шатлыҡ тойғоһон бирә лә инде.

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Йәйләп ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә ятаҡған кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыкты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә ялан аяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды ныҒыта.

■ Кеше тәүлегенә алты сәғәттән кәм йоҡлаһа, һалҡын тейҙереп бара, уға башҡа төрлө вирустар ҙа тиҙ йоға икән. Тикшеренеүҙәрҙә 164 кеше ҡатнашҡан, белгестәр 2007 йылдан 2011 йылға тиклем уларҙың сәләмәтлеген күҙәткән. Тәүлегенә алты сәғәт йоҡлағандар ете сәғәт йоҡлаусыларға ҡарағанда миҙгел сирҙәренә тиҙерәк бирешкән. Кем ялға биш сәғәттән аҙыраҡ ваҡыт бүлә, улар 4,5 тапҡырға йышыраҡ ауырыған. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Арик Пратер раҫлауынса, кешенең ауырыу-ауырымауына уның йәше лә, насар ғәҙәттәре лә, стрестар ҙа йоғонто яһамай. Йоҡоноң оҙайлығы иммунитет өсөн яуаплы күҙәнәктәр - Т-лимфоциттарҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерә.

■ Торонтолағы медицина мәктәбе тикшеренеүселәре билдәләүенсә, туғандар менән аралашып йәшәү ғүмерҙе оҙайта. Экспериментта 57-84 йәшлек өлкәндәр ҡатнашҡан, асыҡланыуынса, кем туғандары менән йышыраҡ аралашҡан, улар оҙағыраҡ йәшәгән. Психологтар ҙа, яңғыҙлыҡ кешенең сәләмәтлек торошона яҡшы йоғонто яһамай, ти. Шуға ла улар оло йәштәгеләргә әүҙем булырға, төрлө сараларҙа ҡатнашырға саҡыра.

ХӘТЕРКИТАП

# КВАНТУН ҺАЛДАТЫН ЙӘЛЛӘГӘН БАШҠОРТ ЕГЕТЕ

**Беҙ, республиканың бер төркөм драматургтары һәм режиссерҙары, үҙебеҙҙең Бөрйән районына ижади экспедициябыҙҙы Иҫке Монасиптан башланыҡ һәм иң тәүҙә шағирә Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның атай-әсәйе йәшәгән йортта туҡтаныҡ. Шағирәнең атаһы, мөләйем, балаларса самими ҡыҙыҡһыныусан ҡарашлы, шиғранә булмышлы уҙаман Сәлихйән Хафиз улы Дәүләтбирҙиндың оҙаҡ йылдар тарих уҡытыусыһы булып эшләүе һәм үҙ ғүмер юлы иҫтәлектәрен ташҡа баҫтырып, китап итеп сығарыуы тураһында ишеткәйнек инде. Һуғыш ветераны ғәжәп асыҡ фекерле, уникаль хикәйәтсе булып сыҡты.**

## Сәлихйән ҡарт хәтирәләре

"Японияның Квантун армияһына ҡаршы һуғышҡа индек - 39-сы армия, 5-се уҡсылар корпусы, 19-сы гвардия уҡсылар дивизияһы, 54-се гвардия уҡсылар гвардейский полкы, 44-се артбатарея..." Ошондай теүәл атамалар етмеш йылдан ашыу уның хәтерендә, телендә, күнелендә һаҡлана һәм оло тарихи ваҡиғалар бәйәненә асҡыс булып тора. Артабан Сәлихйән олатай Алыҫ Көнсығышта япон армияһына ҡаршы утҡа ингән 17-18 йәшлек йәш егеттәрҙең ауыр походтан башланған яу юлы, Гоби сүллеге аша 500 километрлыҡ марш-бросок яһаған йәйәүле ғәскәр тураһында һөйләй: "... Арҡала - сухой паек, һыуҙы цистерна менән ташып еткерә алмайҙар. Бер нисә мәртәбә күлдән эстек, һаҫыҡ булһа ла ситенән ҡотоҡ ҡаҙып, ҡом аша һарҡытып-һөҙөп, хлоркалап эселде... Квантун армияһы менән бәрелештә камикадзеларҙы ла күрҙем. Мин ҡарауылда тора инем. Кемдер бар һымаҡ. Стой! Пропуск! Минең һорауға яуап бирмәй. Атырға мәжбүр булдым. Йәш кенә япон егете булып сыҡты. Беҙҙекеләр ҡамап алырға иткәйне, үҙен юҡ итте... Бысағын сығарҙы ла күкрәген ярҙы ла ебәрҙе. Йәл булды минә. Йөрәгемде яндырып-өтөп алды шул йәлләүем..."

"Йәлләүем?" Сәлихйән ҡарттың ошо һуңғы һүҙе әңгәмәне икенсе юҫыҡҡа борҙо: "Нинә улай дошман һалдатын йәлләнегеҙ?" "Йәлләмәйенсә йәшәп буламы ни? Бәләкәй саҡта өләсәйем менән урманға барҙыҡ. Ҡапыл аҡланда пыр туҙып ике ҡош талаша башланы. "Өләсәй, нимә ул?" - тием. "Айыу!" - ти. Аҡландың арғы яғынан бер айыу ҙа был алышты күҙәтә икән. Беҙ был яҡтан килеп сыҡҡанбыҙ. Ә асыҡ урталыҡта ҡарсыға ҡорҙо тибә икән! Ҡор - яралы, хәлдән тайған, мәгәр ялпылдап ҡаса, ырғый... Айыу теге яҡтан ҡоштарҙың, исмаһам, береһен булһа ла эләктерергә ынтыла. Был яҡтан өләсәйем һонола - ул инде ҡорҙо тотмаҡсы була. Өләсәй йылғыр булып сыҡты, тотоп алды бит ҡорҙо. Ҡарсыға һемәйҙе, шыҡайып осоп китте. Айыу мөлдөрәп ҡарап тороп ҡалды. Бик тәмле булды беҙгә ул ҡор. Әммә айыуҙың ҡарашы күҙ алдынан китмәне. Ныҡ йәлләнем шул мәхлүкте...

Бәләкәй саҡта йәнә шундай бер хәл булды: әсәмде илаттым. Бойҙай утайбыҙ, билсән яман ҡотorған. Әсәй утай, мине, һигеҙ йәшлек малайҙы ла эшкә ҡуша. Килеп тороп көн эҫе, күгәүен талай, билсән сәнсә. Ҡул-аяҡтар ҡанға батты. Мин ағас башына мендем дә киттем. Йәшендем, йәнәһе. Әсәм өндәшә, саҡыра, һыу яғын ҡарай, тамам хафаға ҡалды. Мине һыуға төшөп батты тип уйлап, ныҡ өҙгөләнә, илай, ергә ятып үрһәләнеп илай... Әсәмде йәлләп килеп төштөм ағас башынан, инде бынан ары уны рәнйетмәм, илатмам, тинем. Ошо уй-ниәт минең тормош девизым булып ҡалды. Һуғышта ла әсәй снаряд яуа башлаһа, бисмилла, тип ергә һеңешәбеҙ. Әсәмде етем иткем, әрнетеп илатҡым килмәне. Уның доғаһы менән генә иҫән ҡалғанмындыр, тим. Атака алдынан адрестар алмашабыҙ - ул-был булһа, хәбәр итергә...

Ун һигеҙ йәш кенә күбебеҙгә, йыйын малай-шалай... Арабыҙҙа Кәлимулла тигән егет булды. Эй ғәләмәт бейеүсе, ут кеүек сос ине. Порт-Артурҙа һәләк булды. Гел шуны йәлләп иҫкә алам. Йәлләмәйенсә донъяла йәшәп булмай ул. Беҙҙең санитарка бар ине. Анка. Йәш кенә ҡыҙ. Ҡайҙа яралы, ул шунда. Шул хәтле йәлләй һалдаттарҙы, бисараҡай, үҙе ҡанлы яраларын бәйләй, үҙе ҡысҡырып илай, күҙ йәштәре сөбөрҙәп аға! Һуғышта йәнә бер хохол малайын йәлләнем. Связист ине, катушкаһын һөйрәп, беҙҙең окопҡа килеп төштө. Ауыр тимерсыбыҡ һөйрәп арыған, талсыҡҡан. Күҙе йомолоп йоҡлап бара, үҙе һыу һорай... Ҡапыл өҫтән ҡысҡыралар: "Связь, где связь!" Был ялп итеп һикереп тороуы булды, күҙенә генә пуля тейеп, ҡаҡ салҡан ауып та төштө. Беҙ иҫебеҙ китеп, уға теклəп ҡатып ҡалдыҡ. Йөҙө һылыу! Ҡурсаҡ кеүек! Һуғыш шулай - иң гүзәлдәрҙе, иң яҡшыларҙы һәләк итә. Йәл, ныҡ йәл ғәзиз әҙәм балаһы...

Мин бала саҡтан уҡ бөтә нәмәне, бөтә кешене йәлләйем. Япондарҙы ла йәлләй инем. Ифрат тәртипле, тырыш, аҡыллылар ине япон һалдаттары. Ғәләмәт ҡыйыу, йылғыр үҙҙәре. Мин уларҙың һуғышыу оҫталығына һоҡлана торғайным. Окоптарына ла ингән саҡ булды - таҙа, йыйнаҡ... Бер мәлде пленға төшкән өс япон һалдатын атырға алып китеп баралар. Алдан иң олорағы бара. Башын ныҡ итеп эйгән, йөҙөн йәшерә. Артынса бара йәшерәге - йөҙө таш шикелле, күҙҙәре шар кеүек, һис тә ҡыҫыҡ күҙле халыҡтан тимәҫһең! Өсөнсөһө, байғош, ун ете йәштәр самаһындағы малай. Уныһы атлай алмай шарылдап илай, ерҙә аунай, конвоирҙың аяғына ташланып ялбара... Шул хәтле үлгеһе килмәй. Ата торған урынға алып барып еткерә алмағас, ерҙә ятҡан көйөнә аттылар. Бер генә пуля етте меҫкенгә... Ҡайһы берәүҙәр пленға бирелгән япондарҙы тиҙ генә расходҡа сығара, йәғни ата ла ҡуя ине. Мин улайта алманым, япон һалдаты пленға эләкһә, бер ҡасан да атманым да, аттырманым да. Һуғыш - яман стресс, байтаҡ малайҙар сыҙамай, ауырыуға һабышты... Һуғыш шауҡымы ҡайһы берәүҙең йөрәген һулытты, йөрәген ҡорошторҙо... Бөгөлөп төшә шундайҙар, йәл була..."

Сәлихйән олатайҙың хәтирәләренең иге-сиге юҡ. Уның тәрән йөкмәткеле, фәһемле хикәйәттәре - ике быуатты тоташтырған хәтер күпере. Бындай асыҡ зиһенле оло быуын вәкиленә һөҡ тейеп ҡуймаһын, тигәндәй, уны бары тик тыңлағы һәм рәхмәт әйтке килә. Сәлихйән олатайҙың балалары ла нәфис һүҙгә, тарихҡа, әҙәбиәткә ихлас һәм яҡын кешеләр. Кесе ҡыҙы Тәнзилә Дәүләтбирҙина - билдәле шағирә, журналист һәм драматург. Ауылға ғаиләһе менән күсеп ҡайтып, аталарын ҡараған улы Заһир Дәүләтбирҙин - уймаҡ хикәйәләр оҫтаһы. Оло улы Ғәзиз Дәүләтбирҙин ғәжәйеп халыҡсан йыр-көйҙәр авторы, һәүәҫкәр композитор булды.

## Смирно! "Ерән ҡашҡа"ны тыңлағыҙ!

Сәлихйән олатайҙы уратып ултырған юлдаштарым - бер төркөм драматургтар, ашығып, ручка-блокнотын барлай, сөнки ветеран-аҡһаҡалдың ғибрәтле иҫтәлектәре яңынан ағыла башлай: "Мин орудие командирымын, сержантмын. Плацдармда строевой занятие үткәрәм. Бер көндө Мәскәү радиоһы концерт бирә, бөтә Порт-Артурға иғлан итә: "Башкирская народная мелодия "Ерән ҡашҡа"! Минең ҡолаҡ ҡарп итеп ҡалды, йөрәк дөп-дөп тибә, тыным ҡурыла - шул хәтле һағынғанмын, шул тиклем ҡыуандым!.. Мин - батареяла берҙәнбер башҡортмон, ҡалғандар гел славян егеттәре. Шулар менән командовать итәм. Тоттом да команда бирҙем: "Батарея, стой! Смирно!" Илле кеше шып туҡтаны. Артабан команда бирәм: "Ерән ҡашҡаны" тыңлағыҙ!" Нишләһен һалдат, смирно баҫып тыңлайҙар. Аптыраштылар - гимнды ғына смирно баҫып тыңлайҙар бит. Оркестр уйнап бөттө. "Слышали?" - тим. "Так точно, слушали". "Я много ваших песни наслушался, вот и вы послушали башкирскую песню", - тинем. "Вольно!" тигәс, мине килеп ҡосаҡлайҙар, рәхмәт, молодец, тиҙәр. Ифрат алсаҡ күңелле егеттәр ине, бер кем бер кемгә асыуланмай, ныҡ берҙәм, татыу булдыҡ. Шундай матур халыҡ ине ул быуын.

...Бер заман пушкалар килтерҙеләр. Ҡайҙан килгәнен уҡып белдем дә, кинәт күңел тулды ла китте. Үҙем дә һиҙмәҫтән, бер пушканы барып ҡосаҡлағанмын. Егеттәр абайлап ҡалды ла көлә башланылар: "Пушку обнимаешь?" "Да, землячку нашел! Видишь, написано: "Изготовлено в Перми!" Ә Пермь - Башҡортостан менән күрше бит инде! "Ой, точно, наша землячка!" - тип Урал буйы егеттәре теге пушкаларҙы һөйөпһыйпап алдылар. Шулайтып, күңел тулыу, йәлләү һәр кешегә хас, һәр за-



манда, һәр халыҡта, һәр дәүләттә бик тә кәрәкле сифат.

...Һуғышта ашарға гел етмәй. Һалдат яртылаш ас, яртылаш туҡ. Суҫҡа ите булһа, славяндар мосолмандарҙы ҡурҡыта, ҡыҫтай башлай: шинель салғыйын суҫҡа ҡолағы һымаҡ итеп тотоп күрһәтә, хорхолдап үсекләшә. "Грех вам, һеҙгә суҫҡа ашарға ярамай, теге лә был..." Ҡайһы мосолман балаһы аптырап-баҙап ҡала, аш өҫтөндә йөҙөп йөрөгән бармаҡ башындай суҫҡа майын биреп ебәрә тегеләргә. Ә уларға шул ғына кәрәк. Күләләр. Шуға мин шаяртыуға борам: "Можно, можно, если глаза закрыты, то можно!" - тип, күҙҙе йомам да, теге күҙ ҡыҙҙырғыс майҙы иң тәүҙә тотоп алып йотам да ҡуям. Бер ваҡыт тегеләрҙең үҙҙәрен ҡыҙыҡ иттек. Хинган тауҙарын сыҡҡанда бер табун ат йөрөй. Бер атты аттыҡ, һуйып, тунап, бешереп ашай башланыҡ. "Вот вам грех, подходите!" - тибеҙ. Ашайҙар, ҡайҙа барһын ас һалдаттар. "Солдату все можно!" - тиғән булып йыуатабыҙ, һыйлайбыҙ тегеләрҙе...

...Курск янында хеҙмәт иткән саҡта беҙҙең арала Миша Кикенков тигән үтә ышаныусан бер сержант бар ине. Һуғышта, аҙаҡ армияла оҙаҡ ҡына йөрөлдө. Биш-алты йыл үтеп китте бит инде. Вәғәҙәләшкән ҡыҙҙар кейәүгә сығып бөттө. Бер Кикенковтың ҡыҙы ғына көтә, хаттары йыш килә. Мишка шуға маһая. Бер мәл егеттәр этлек уйлап тапты. "Мы приедем из армии, женимся на молоденьких, а тебе, Кикенков, придется жениться на старухе". Берәүһе был егет уйлана бирҙе лә: "Давай, ул үлде, тип хат яҙыгыҙ, әйҙә, мине көтмәһен", - тип әйтеп һалды, байғош. Беҙгә нимә, ҡыҙыҡ кәрәк. "Һәләк булды" тип хат яҙып ебәрҙек ҡыҙына. Бер заман Мишканы комполка саҡырта - полк штабына. Аптырашып, тегенең кире килгәнен саҡ көтөп алдыҡ. Килә был, үҙе помидор кеүек ҡып-ҡыҙыл. Ҡыҙы: "Объясните, пожалуйста, при каких обстоятельствах погиб мой парень?"- тип, командирға хат яҙған икән. Комполка Мишканы кәрәген биреп әрләп, үҙенән хат яҙҙыртып, сығарып ебәргән..."

### Кремлдәге Медвежатник!

Сәлихйән олатай 1956-1957 йылдарҙа Бөрйәндә район мәҙәниәт бүлеген етәкләгән. Шул саҡтағы бер хәтирәһе менән дә уртаҡлашты: "Бер мәл мине Мәскәүгә йыйылышҡа - бөтә Союз педагогтар конференцияһына саҡырҙылар. Арыу кейем юҡ. Аяҡта бийма, өҫтә фуфайка, мамыҡтан һырыған көпө салбар... Оялам килеп тороп. Бармай ҙа ярамай. Белоретка поезға көнө буйы барып саҡ өлгөрҙөм. Купе вагон эләкте. Ҡиммәт булһа ла, ҡалайтаһың, билет алып инеп киттем. Инһәм, саҡ йығылып китмәнем: купела береһенән-береһе матур кейенгән кешеләр йылтырашып ултыра. Танышалар. Кемелер Мәғариф министрлығынан, кемелер КГБ-нан, кемелер граждандар авиацияһы летчигы... Ә мин уйлап та торманым: "Бурзянский мин!" - тип кенә әйтеп өлгөрҙөм, теге КГБ кешеһе ах итеп һикереп торҙо: "О, Бурзян! Знаем, они все медвежатники!" - ти. "На самом деле?" - бөтөнөһө дәррәү миңә ябырылды. "Любитель мин", - тип ҡотолмаҡ булдым. "Сколько медведей брал?" "10-15 медведей", - үҙемсә бик етди һөйләшәм. "Как стреляете?" - тип Мәғариф министрлығы вәкиле булған ҡатынҡай сат йәбешеп төпсөнә. "Айыу урамға килеп инһә, кәртә башында ғына ятам да атам да йығам", - тием. Мужиктар, купелағы ир-ат, миңә күҙ ҡыҫа. Баяғы бисә Мәскәүгә еткәнсе минә космонавҡа ҡарағандай текләп барҙы. Көпө салбарҙы скафандр тип хис иткәндер, күрәһең. Ҡаҙан вокзалында тегене ире ҡаршы алғайны, ҡатыны унын менән һаулыҡ та һорашмай, миңе һөйөнсөләп алып китте. "Я ехала в одной берлоге с медведем!" - ти. Сумаҙанда яткан итек менән костюмды алып кейергә форсат юҡ, йән-фарман Кремлгә киттем. Кейемемдән оялып, колонналарға ышыҡланып ҡына йөрөйөм. "Кем һин?", "Ҡайҙан?" тигән һорауҙарға бер яуап: "Охотник! Медвежатник!" - тием дә ҡасам, икенсе яҡҡа шылам..."

### Армияла нимәгә өйрәттеләр?

"Шулай итеп армия, һуғыш юлы үтелде, ете йыл ҡырҙа йөрөлдө. Ҡайтҡас, эй кәләш димләйҙәр. Минең өсөн донъя үҙгәргән: әсәй ҙә, атай ҙа юҡ. Әсәмдең апаһына - Яңһарыла йәшәгән инәйемә - ҡайтҡанмын. Почет бар, фронтовикмын. Әйләнеп ҡарар хәл юҡ, әйҙә кәләш димләйҙәр. Мәктәптә военрук, физрукмын. Ике уҡытыусы ҡыҙ бар, береһенә лә күҙ төшмәй - төҫһыҙҙары юҡ. Шулар миңә бәйләнә, ҡайһыбыҙҙы алаһың, тиҙәр. Элек Ахрита уйнай торғайныҡ. Иртәгә һайлау, тигән төндө клубта һуҡыр шәм яҡтыһында Ахрита теттерәбеҙ. Ҡапыл уҡытыусы ҡыҙҙарҙың береһе башымдан бүркемде тартып алды, икенсеһе кесәләге бирсәткәне һурып алды. Көләшәләр, кәрәкһә, килеп ал, тип клубтан сығып киттеләр. Тышта сатнама һыуыҡ. "Берәйегеҙ алып килегеҙ әле бүрек менән бирсәткәне", тип, шунда бейеп йөрөгән бер ҡыҙҙы эләктереп алып алдыма ултырттым. "Заложница булдың, бүрек менән бирсәткәне килтереп бирмәйенсә, алдымдан төшөрмәйем", - тим. Теге ҡыҙый: "Абзый, ебәр", - ти ҙә, үҙе йәтешләберәк ултыра бирә. Аяҡтар маҙап-ойоп китте, юҡ мәгәр тормайым, ҡыҙҙы алдымдан төшөрмәйем. Милиция саҡырттылар. Милиционер әйтә: "Ни иҫерек түгелһең, нишләп ул ҡыҙҙы тотоп ултыраһың? Армияла нимәгә өйрәттеләр?" Мәйтәм: "Принципиальноскә өйрәттеләр". Шунан бүрек менән бирсәткәне килтереп бирҙеләр. Алдымда ултырған ҡыҙ Асия исемле булып сыҡты, бер аҙҙан ул минең ағайыма кейәүгә сыҡты, беҙгә еңгә булды. Ә мин детдомда ашнаҡсы булып эшләгән Зәйтүнә исемле ҡыҙға өйләндем. Зәйтүнә инәйегеҙ менән алтмыш алты йыл бергә йәшәйбеҙ, һигеҙ бала бирҙе беҙгә Хоҙай..."

**Шулай итеп, маҡсатҡа өлгәшелде. Бына шундай сәсән һүҙле оло быуын кешеләре менән осрашыуҙар күңелде байыта, яңы уй-фекерҙәр, тормош һабағы бирә икәненә тағы бер тапҡыр инанды ижадсылар. "Кеше булған кешенең кеше менән эше бар, кеше булмаған кешенең кешелә ни эше бар?" - ти торғайны Хәйбулла яғында йәшәгән йыраусы-сәсән Мөхәмәтйән олатай Ҡаҙаҡбаев. Шуның һымаҡ, беҙҙең драматургтар экспедицияһы ағзалары Сәлихйән олатай һәм башҡалар менән аралашып, халыҡ һүҙен, фәлсәфәүи һығымтаһын ишетеп, киләсәктә үҙ әҫәрҙәрендә сағылдырыу дәрте менән ҡайтҡайны ул экспедициянан. Ә мин ул осрашыуҙарҙың бына ошоноһон, хәҙер инде баҡыйлыҡҡа күскән Сәлихйән олатай менән булғанын һеҙгә, "Киске Өфө" уҡыусыларына, тәҡдим иттем.**

**Сәрүәр СУРИНА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



## ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 19-сы идея Реакциямы, әллә ихласлыҡмы?

Һин шарттарға ҡарашыңды белдерәһеңме, әллә уларға яуап бирәһеңме? Нимәне күҙ уңында тотоуымды ентекләберәк аңлатам. Мин тәрән уйҙарға бирелеп, ошо китабымды яҙып ултырғанда ҡапыл телефон шылтыраны. "Әй, шайтан алғыры, фекер йомғағын һүтә генә башлағайным. Кешеләр мине эшләгән ваҡытта борсорға ярамағанлығын аңламаймы икән ни?" тигән уй йүгереп үтте баштан. Мин телефон шылтырауына ҡарашымды ғына белгерттем, ә яуап бирмәнем. Трубканы күтәргәндә мин асыулы түгел инем, әммә шылтыратыусыға шатланманым да. Ләкин һөйләшә башлағас, миңә ярҙам итерлек, бик изге күңелле, мөләйем кеше шылтыратыуын асыҡланым. Был һөйләшеүҙән мин иң киткес ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо алдым. Аралашыу мине йылытты, энергия бирҙе, һәм эшемә тағы ла ҙурыраҡ рух күтәренкелеге менән әйләнеп ҡайттым.

Ни өсөн телефон шылтырауына шундай реакция белдерҙем һуң? Миңә шылтыратыусы асыулы сәләмемә йылы итеп яуап ҡайтарҙы, һәм ошо йылылыҡ миндә уға ла шулай уҡ йылы яуап биреү теләге уятты. Реакция менән яуап биреүҙең айырмаһын тояһыңмы һәм уларҙың тормошобоҙға йоғонтоһон аңлайһыңмы?

Һәр яңы көн тыуыу менән һин кешеләр менән осрашаһың, телефон шылтырауына һәм ишеккә шылтыратыуҙарға яуап бирәһең. Кабинетыңда башҡоллә эшкә сумып ултырғанда кемдер килеп инә; һин йорт эштәре менән мәшғүлһең кемдер кофе эсергә тәҡдим итә. Шуны иҫеңдә тот: бер кем дә һинең тормошоңа маҡсатһыҙ килеп инмәй! Һәр кеше һиңә фатиханы бирергә килә! Әгәр быға ябай реакция менән сикләнһәң, ошо фатиханы юғалтыуың ихтимал. Быннан һин отолаһың ғына.

Әгәр һин һәр кешенең һүҙҙәренә яратып, йылылыҡ менән яуап бирһәң, унда ла шундай уҡ йылы итеп яуап ҡайтарыу теләге уятырһың, һөйөү һәм йылылыҡтан үҙ өләшеүеңдә алырһың, йәғни баштан уҡ һиңә тәғәйенләнгән фатихаға ирешерһең.

Тормошоңа килеп ингән фатихалар алдында ишегеңде шапылдатып япма. Һинең менән киҫешкән һәр кешенең саҡырыуына яуап бир. Бел, ул һиңә фатиха килтерә! Һөйөү менән яуап бир, һәм фатиха фатихалар килтерер. Реакция менән яуап биреү араһындағы айырманы аңларға өйрәнһәң, һинең өсөн көн шатлыҡлы үтер, ауырлыҡтар урап үтер.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ЯРАТ, ӘММӘ ТАБЫНМА!

**Табыныу дәрәжәһенә еткән мөхәббәт күп осраҡта Хоҙай Тәғәлә рөхсәт иткән сиктән ашып китә. Ул бөгөнгө заманда граждандлыҡ никахы формаһында сағылыш таба. Йәки яуапһыҙ мөхәббәт арҡаһында йәштәр үҙ-үҙенә ҡул һала, һөйгәнен үлтерә һ.б. Бындай осраҡтар тураһында көнө-төнө телевидение, гәзит-журналдар бәйән итә. Бындай күңелһеҙ хәлдәр артыҡ хисле булыу, яуапһыҙлыҡ арҡаһында барлыҡҡа килә.**

Йыш ҡына йәштәр бөтә һөйөүен, иғтибарын Аллаһҡа түгел, ә яратҡан кешеһенә йүнәлтә. Бындай кешеләр Хоҙайҙың исемен түгел, һөйгәненең исемен ҡабатлай; иртән иртүк улар шулай уҡ Аллаһы Тәғәләне түгел, яратҡан кешеһен иҫләп уяна. Ундайҙар Аллаһ өсөн түгел, бары тик һөйөкләләре өсөн ҡорбандарға бара. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, йәштәр бер-береһен илаһилаштыра. Һөйгәндәр бер-береһенә "Мин һине генә яратам", "Һинең өсөн йәшәйем", "Был донъяла минең өсөн һин генә бар", тиғән һүҙҙәр бүләк итә һәм Аллаһтан йыраҡлаша.

Иблис Аллаһтан алыҫайтыу өсөн ошондай һуҡыр мөхәббәт менән кеше күҙҙәрен томалап ҡуя. Кеше һөйгәненең ысын йөҙөн күрмәй, үҙен дә, Аллаһы Тәғәләгә алып барған юлды ла юғалта.

Ҡөрьән ундай аңды юғалтырлыҡ мөхәббәттән һаҡ булырға саҡыра. Әгәр ҙә ундай һөйөү кешегә Аллаһы Тәғәләне онотоуға булышлыҡ итә икән, был иблис ҡорған тоҙаҡҡа килтерә. Бындай илаһилаштырыу менән бәйле һөйөү бөгөнгө көндә күктәргә ашырылып мактала. Йыр, кино сәнғәтендә мөхәббәт темаһы ҙур урын алып тора һәм романтик, хисле рухлы кейәҙр кешелә ысын һөйөү тойғоһо тураһында бөтөнләй икенсе фекер ҡалдыра.

Бер һүҙ менән әйткәндә, кешене Аллаһы Тәғәлә аша яратыу зарур. "Аллаһы Тәғәләгә генә ышанған бәндәләр үлгәндән һуң ожмахҡа эләгәсәк",- тип әйтеп ҡалдырған Мөхәммәт бәйғәмбәр. Аллаһы Тәғәләгә ышанған кешенең һөйөүе нур ише таҙа һәм саф. Сөнки ул ысынында һөйгәнен түгел, ә Аллаһы Тәғәләне ярата; һөйгәненең матурлығы - Аллаһтың сағылышы икәнен яҡшы аңлай.

Шулай итеп, Аллаһы Тәғәләгә ысын ышанған кеше яуапһыҙ мөхәббәттән ғазаптар кисермәйәсәк. Әгәр ҙә кешенең инаныуы көслө һәм ныҡ икән, Хоҙай уға барыһын дә күпләп бирәсәк.

***✓ Ер ҙә тере организм, һәм уға беҙҙең ниндәй мөнәсәбәттә булыуыбыҙ ашаған емеш-еләк аша кире үҙебеҙгә ҡайта. Шуға күрә ер эштәре менән булғанда уны яратып, ихтирам итеп, изге, таҙа уйҙар һәм теләктәр менән эшләргә кәрәк.***

*БАҠСА*

# ЕРГӘ МӨНӘСӘБӘТ...

## ризыкта ла сағылыш таба

**Баҡсалары һәм дачалары булыусылар ҡурсаланыу ваҡытында бер аҙ аптыранып та ҡалғандыр, моғайын. Ни тиһәң дә, әле тап баҡса эштәре башланған мәл, ә һин ҡала фатирында дүрт стена артында ултыр, имеш… Үҙ йорттарында йәшәүселәргә рәхәт ул - баҡсаһы эргәһендә, ҡасан теләй, шунда сығып эшләй. Йә бына ҡурсаланыу талаптарын боҙоусыларға штраф тип тә ҡурҡытып ҡуйҙылар. Ниһайәт, талаптар бер аҙ йомшарҙы! Хәҙер дачалары һәм баҡсалары булыусылар миҙгелде үткәреп ебәрәм тип хафаланмаһа ла була - баҡсаларға һәм дачаларға йөрөргә рөхсәт ителде. Ә бөгөн унда ниндәй эштәр башҡара икән баҡсасылар?**

***Әлфирә БАСЫРОВА, Салауат районы:*** Баҡса менән булырға, кисә ямғыр, бөгөн ҡар, тигәндәй, һауа торошо ҡапыл үҙгәреп тора. Шуға әле тырматып, таҙартып ҡына ҡуйҙыҡ. Төньяҡ-көнсығышта, ғәҙәттә, үҫентеләрҙе баҡсаға көндәр ныҡлап йылынып, ҡырау хәүефе булмаған ваҡытта ғына сығарабыҙ, шуға уларҙы иртә шыттырмайбыҙ ҙа. Кемдер теплицаға тиҙәк һала, теплицаларын яңырта. Ағас, еләк төптәрен йомшарталар. Ағастарҙың олондарын эзбиз менән аҡлайҙар. Түтәл ҡаҙырға иртәрәк әле. Кемдер ашығып, көндәр ҡояшлы булғанда, тип ергә орлоҡ сәсеп ҡалырға тырыша, әммә күп йыллыҡ күҙәтеүҙәрем буйынса, ер йылынмайынса барыбер бер нәмә лә шытмай. Әлбиттә, тиҙәк һалып, йылы теплица эшләүселәргә был ҡағылмай. Хәҙер күптәр әҙер поликарбонат теплицалар алып, рәхәткә күсте. Ләкин теплицала үҫкән йәшелсә менән ерҙә, асыҡ һауала үҫкән йәшелсәнең тәме барыбер ҙә айырыла. Шуға мин асыҡ һауала үҫтерергә тырышам.

Әле ағастар ултыртырға мөмкин: шәхсән үҙемдең йортта ҡарағай, кедр ағастарын ултыртырға теләйем. Үҫенте һатып алып түгел, ә орлоҡтан үҙем шыттырып.

Баҡса үҫтергәндә шуға иғтибар итергә кәрәк: борон ни өсөн йәшелсә-емеш файҙалы булған да бөгөн үҙенең үҙенсәлектәрен юғалта бара? Элек ерҙе тимер көрәк менән түгел, ә ағас һуҡа менән эшкәрткәндәр. Ер ҙә тере организм, һәм уға беҙҙең ниндәй мөнәсәбәттә булыуыбыҙ ашаған емеш-еләк аша кире үҙебеҙгә ҡайта. Әгәр Ер-әсәнең тәнен ауырттырабыҙ, уны һанламайбыҙ, уға насар мөнәсәбәттәбеҙ икән, уның ауыртыныуы беҙгә тапшырыла. Шуға күрә ер эштәре менән булғанда уны яратып, ихтирам итеп, изге, таҙа уйҙар һәм теләктәр менән эшләргә кәрәк.



***Зөлфиә ИБРАЕВА, Өфө районы:*** Әлегә баҡсаны таҙартып, ағастарҙың олондарын аҡлап ҡуйҙыҡ. Парник эшләйһе генә ҡалды. Үҫентеләрҙе сығарып ултыртырға иртәрәк, шулай уҡ сәсеү өсөн ер йылынмаған.

Быйыл баҡса эштәре тынысыраҡ үтә. Быға тиклем үҙ йортобоҙҙо һалып сыҡҡан йылдарҙа участкала йәй уртаһына тиклем һыу ята ине. Шуға баҡсала "аҡыллы түтәлдәр" эшләргә, еләк-емеш ағастарын ултырта торған урындарҙы күтәртергә тура килде. Хәҙер, шөкөр, ер йылыныу менән ултыртырға ла мөмкин.

Баҡсала ҡарағат, ҡурай еләге, алма, слива, виноград ағастары бар, уларҙы Кушнаренко районындағы питомниктан барып алғайныҡ. Хәҙер инде емеш тә бирә башланылар.

***Артур ИҘЕЛБАЕВ, агроблогер:*** Үҙ участкаһы булған һәр кем уның бер мөйөшөн еләк-емеш баҡсаһына әйләндерергә хыялланалыр, моғайын. Әле тап ағастар ултыртыу мәле. Күптәр ағастарҙы баҙарҙан йәки урам буйында һатып тороусыларҙан алырға тырыша һәм күп осраҡта алдана ла. Алма тигәндәре бөтөнләй икенсе ағас, ә слива тигәндәре груша булыуы мөмкин. Ярай ҙа, улары мул уңыш бирһә. Ҡайһы берҙә үҫеп, емеш бирмәгәндәре лә осрай бит.

Мин ағастарҙы ышаныслы сауҙа үҙәгенән алам, унда беҙҙең территорияға яраҡлаштырылған һәм сертификацияланған үҫентеләр генә һатыла һәм йәнең теләгәнен алырға була. Әгәр оло ағастарҙы алһағыҙ, улар икенсе йылына уҡ емеш бирә башлай.

Ҡурсаланыу ваҡытында ла үҙәккә барҙым. Үҫемлектәр төрлө, ҡыуаҡтарҙың ниндәйе генә юҡ: ҡара һәм аҡ ҡарағат, 18 сорт ер еләге, еләктәре төрлө ваҡытта бешкән ҡурай еләге, крыжовник, айыу емеше һәм башҡалар. Хәҙер хатта өйҙән сыҡмай, интернет, социаль селтәрҙәр аша ғына ла заказ биреп алдырырға мөмкин.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**яҙып алды.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (11) дүшәмбе | 3:32 | 4:02 | 5:32 | 13:30 | 19:24 | 20:54 | 22:24 |
| 5 (12) шишәмбе | 3:30 | 4:00 | 5:30 | 13:30 | 19:26 | 20:56 | 22:26 |
| 6 (13) шаршамбы | 3:28 | 3:58 | 5:28 | 13:30 | 19:28 | 20:58 | 22:28 |
| 7 (14) кесе йома | 3:26 | 3:56 | 5:26 | 13:30 | 19:30 | 21:00 | 22:30 |
| 8 (15) йома | 3:24 | 3:54 | 5:24 | 13:30 | 19:32 | 21:02 | 22:32 |
| 9 (16) шәмбе | 3:22 | 3:52 | 5:22 | 13:30 | 19:34 | 21:04 | 22:34 |
| 10 (17) йәкшәмбе | 3:20 | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 19:35 | 21:05 | 22:35 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ*

## УНЛАТА УҢЫШ

**Мәскәүҙән һәүәҫкәр баҡсасы Михаил Руденко ҡурай еләге һәм ҡарағаттың уңдырышлылығын 10 тапҡырға арттырыу алымы уйлап тапҡан.**

Баҡсасы әйтеүенсә, быны ул үҙ тәжрибәһе һәм билдәле агротехника ҡаҙаныштарына нигеҙләнеп эшләгән һәм ҡурай еләге уңдырышлылығы икенсе йылына уҡ, ҡарағаттыҡы өсөнсө йылына күтәрелә. "Ҡурай еләгенең уңдырышлығын 10 тапҡырға арттырыу өсөн һәр йыл һайын 30 июндә мин бейеклеге 30 сантиметрҙан да кәм булмаған йәш үҫентеләрҙең өҫкө, шытым бөрөләрен семтеп өҙөп алам. Бынан һуң көҙгөгә ҡарай япраҡ төбөндә урынлашҡан һәр бөрө урынынан киләһе йылда емеш бирәсәк тәлгәш үҫеп сыға. Ҡарағат ботағы 20 сантиметр тирәһенә еткәс, яҙ-йәй айҙарында шулай уҡ шытым бөрөләрен өҙөп алырға. Киләһе яҙына уның урынына сыҡҡан ботаҡсыҡтар 10 сантиметр үҫкәс, шулай уҡ бөрөләрен йолҡорға кәрәк. Миҙгел тамамланыуға был ботаҡтар нигеҙендәге бөрөләрҙән яңы үренделәр сыға, нәҡ шулар өсөнсө йылына мул уңыш бирәсәк. Бынан һуң ҡарағат емеше лә бер ярым тапҡырға ҙурая, әммә артабан ҡыуаҡты ҡырҡып тороу кәрәкмәй" - ти тәжрибәле баҡсасы.

## УҢДЫРЫШЛЫ ҠАРАҒАТ

**Ҡарағат (аҡ, ҡыҙыл, ҡара) яҡшы сәскә атһа ла, тумаланған емештәре ҡойолоп бөтә икән, быға сәскәләрҙең насар һеркәләнеүе сәбәпсе булыуы бар.**

Быны кисектереү өсөн 1 ҡалаҡ балды 1 литр һыуға иҙеп, сәскә атҡан мәлендә ҡыуаҡтарға һиптерергә кәрәк. Ошо рәүешле бал ҡорттарын йәлеп итеп, ҡарағат сәскәләрен яҡшы һеркәләндереүгә өлгәшергә һәм уңдырышлылыҡты арттырырға була. Был ысулды башҡа үҫемлектәрҙә лә ҡулланырға мөмкин.

## КИШЕР

**Кишер яҡшы эшкәртелгән, уңдырышлы тупраҡты ярата. Уны ултыртырҙан 10-12 көн алда орлоҡтарын сепрәккә иркен генә итеп төрөп, еүеш тупраҡҡа көрәк башына һалып күмәбеҙ.**

Был орлоҡҡа шытырға ҡамасаулаған эфир майҙарын сығарырға булышлыҡ итә, 10 көндән ҡаҙып алынған орлоҡтар тулышҡан, шытып килгән була. Уларҙы сынаяҡ аҫтына һалып, өҫтөнә саҡ ҡына ябай крахмал һибергә кәрәк. Шул осраҡта орлоҡ ҡулға йәбешмәҫ, сәскәндә лә күренеп кенә ятасаҡ. Әйткәндәй, ер дымһыҙ булһа, кишерҙе сәсер алдынан һыу һибеп алырға, ул һеңеп бөткәс кенә орлоҡтарҙы ултыртып, мотлаҡ ҡоро тупраҡ менән күмеп ҡуйырға. Ошо рәүешле сәселгән кишер һыу һипмәһәң дә 3-5 көндән шытып сыға. Кишер тәмле, яҡшы үҫһен өсөн ул шытып сыҡансы һыу һипмәй тороу урынлы.

## ТОМАТ

**Томат яҡшы уңыш бирһен өсөн түбәндәге рецепт буйынса ашлама әҙерләп, өҫтәмә туҡландырып була.**

Бының өсөн 3 литр тулыр-тулмаҫ йылымыс һәм тондоролған һыу, йылы һыуға иҙелгән 100 грамм сүпрә, 125 грамм шәкәр кәрәк булыр. Барыһын да бергә ҡушып болғап, банканың ауыҙын "тын алырлыҡ" итеп марля менән ябып, йылы урынға ҡуйығыҙ. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торорға. Әсеү процесы тамам булғас, ашлама ҡулланыуға әҙер. Уны бер биҙрә һыуға ҡатыштырып, 1 төп помидорға 1 литр ашлама нисбәтендә һибеп сығырға.

## БОРОС

**Боросто үрсетмә ултыртып, теплицала сәсеп үҫтергәндә яҡшы уңа. Үрсетмә яҡшы таралып, көслө һабаҡлы булып үҫеп китһен өсөн һабағының асаһынан аҫта урынлашҡан бөтә япраҡтарын йолҡоп ташларға кәрәк.**

Ике айҙан ғына үрсетмәне теплицаға күсереп ултыртырға, ләкин үҫентенең тамыр төбөн тупраҡҡа ныҡ күммәҫкә. Боростар араһында 30 сантиметр арауыҡ ҡалдырып ултыртырға, үҫкән һайын таяҡсаларға төҙләп бәйләп барыу кәңәш ителә. Әсе һәм татлы боростарҙы бер-береһенә яҡын сәсергә ярамай, бөтәһе лә әселәнеп, тәме китәсәк. Борос йыш, әммә самалап һыу һибеүҙәрен ярата. Һыу ҡойғандан һуң тупрағын мотлаҡ ҡаҙып йомшартырға кәрәк, йә булмаһа төбөнә 7-10 сантиметр ҡалынлыҡта итеп бысҡы онтағы йәки һалам йәйергә була. Миҙгел үткәнсе үҫемлектәрҙе 4-5 тапҡыр азот-калий ашламаһы менән туйындырып алыу кәрәк, ә бына яңы тиҙәк һалырға ярамай - йәшелсә серей. Боростоң төрлө ауырыуҙарын иҫкәртеү маҡсатында йәйге осорҙа составында баҡыр булған препарат, мәҫәлән, 5 процентлы баҡыр купоросы менән бер нисә тапҡыр эшкәртеп алырға. Ә бына борос тиҙерәк өлгөрһөн өсөн һабағының өҫкө өлөшөн семтеп йолҡоп торорға кәрәк. Үҫемлек туҡлыҡлы матдәләрҙе яңы сыҡҡан боростарға йүнәлтһен өсөн йәшелсәһе өлгөрөп бөткән ботаҡтарын ҡырҡып алырға.

*Яҡшы бала яман атаның ишектәге башын түргә һалыр, яман бала яҡшы атаның түрҙәге башын ишеккә һалыр.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АҺ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!

# ЯРАТАЛАР ИКӘН,

## тимәк, һин донъялағы иң матуры



(Башы 11-се биттә).

**Һуңғы йылдары һеҙ күп кенә сценарийҙарҙы сәхнәләштерҙегеҙ. Был үҫеш, шулай бит? Режиссер хеҙмәте һеҙҙә ниндәй һәләттәрҙе асты?**

- Кеше был донъяға барлыҡҡа килгәненән алып матурлыҡҡа ынтыла. Йырлап, үҙенең аһ-зарын, бейеп, үҙенең хис-тойғоларын баҫа. Ә һүҙ менән арбай, сөнки һүҙ ҙур көскә эйә. Бына ошо үҙе инде сәнғәт! Сәнғәт ул кешелекте матурлыҡҡа, камиллыҡҡа өндәү өлкәһе, тип аңлайым мин. Ә инде режиссерлыҡҡа килгәндә, артисмын тигән артист үҙен режиссерлыҡта һынап ҡарағыһы киләләр. Үҫергә теләгән һәм үҫешкә ынтылған артист кемдеңдер әйтеүен йәки өйрәтеүен көтмәй ул. Ул эҙләнә, үҙен ситтән күрә белә, ул башҡарыусы ғына булып ҡалмай, ролдәрендәме, йырындамы, бейеүендәме үҙ образдарын булдырырға тырыша. Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт драма театрында 15 йыл эшләү дәүерендә 50-гә яҡын төрлө характерҙағы ролдәр сығарҙым һәм уларҙың төп роль йәки эпизод булыуына ҡарамай, барыһын да яратып башҡарҙым. Хатта күмәк сәхнәләрҙә йөрөгәндә лә үҙемә ниндәй ҙә булһа берәй образ таба торғайным. Быны мин нимә өсөн әйтәм: бөгөн артистарға массалағы индивидуаллекте төшөндөрөргә тырышҡандан, һәр береһенең үҙ үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыуын өйрәткәндән әйтәм. Йыр башҡараһыңмы, бейейһеңме, характер, образ тыуҙырырға тейешһең, сәхнәгә сығаһың икән, һин үҙеңде "һата" белергә, үҙеңә ҡуйылған бурысты үтәргә тейешһең. Бына ошоларҙы яҡшы белеү миңә бөгөн филармония артистары менән эшләргә ярҙам итә лә. Ә Сибай концерт-театр берекмәһе сығыштары улар тәүбашланғысынан юғары талаплы тамашасыға, милли үҙаңға, фольклор нигеҙенә һәм яңылыҡтар килтереүгә ҡоролған. Бында һәр концерт театрлаштырылған тамаша, тарихлы, хәлваҡиғалы, сюжетлы программалар. Һәр әҙерләнгән концерт менән беҙгә, берекмә коллективына ла, күпте өйрәнергә, уҡырға, үҙләштерергә, белергә тура килә. Шул образды аңлау һәм тойоу өсөн шул дәүер һулышын, шул заман тулҡынын татырға кәрәк. Һәм бөтөн ошо үҙгәреште, әүерелеште артистарға режиссер индерә лә. Шундай мәрәкәле әйтем дә бар бит әле, концерт яҡшы сыҡһа, артистар шәп, насар сыҡһа, режиссер насар, тигән. Шундай күренмәгән фронт һалдаты ул режиссерҙар. Һәм, әлбиттә, был өлкә мине үҙгәртмәй ҡалманы. Күпкә уйлыраҡ, һиҙгерерәк, несkәрәк итте.

**Ҡатын-ҡыҙ ирекле, белемле, үҙаллы бөгөн. Башҡорт ҡатын-ҡыҙының ир менән йәшәү, ғаилә усағын тотоу принциптары ниндәй булырға тейеш? Нимәләр хатаға килтерә, ә нимәләр уңышҡа илтә, һеҙҙеңсә?**

- Ҡатын-ҡыҙҙың ирекле, белемле, үҙаллы булыуы һәйбәт, әлбиттә. Бөгөнгө көндә күп ҡатын -ҡыҙҙарыбыҙ ир-егет менән бер рәттә хеҙмәт итә, күптәре хатта үҙҙәре лидер. Уныһы ла яҡшы, әммә күп осраҡта быны ҡатын-ҡыҙ сараһыҙҙан башҡара. Эргәһендә егәрле, инициативалы ир булғанда бер ҡатын да күрәләтә төпкә егелмәҫ ине, мисәүҙә генә барыуҙы хуп күрер ине. Ә инде йөктө яңғыҙы тарта һәм ғаилә яуаплылығын да бер үҙе күтәрә икән, ундай ҡатын ниңә иргә баш һалһын? Был хикмәттәрҙең барыһы ла бер-береһенә, йәғни һәр енестең үҙ бурысын атҡара белеүенә бәйле.

Бөгөн йәмғиәттә ир менән ҡатын мөнәсәбәте бик йыш һәм тауышлы итеп тикшерелә, был хаҡта күп яҙалар, тотош психологтар хеҙмәт алып бара. Күберәк ҡатын-ҡыҙҙың үҙен яратырға һәм шул аура менән ирҙе яраттырырға тейешлеге хаҡында һүҙ алып барыла. Ә ир менән ҡатындың иң беренсе сиратта балалар өсөн яуаплы икәне онотолоп китә. Атай ҙа, әсәй ҙә, инде ғаилә ҡорғас, үҙ мөнәсәбәттәрен түгел, ә ата-әсә бурысын алға ҡуйырға тейеш. Атайҙарҙың эсеүе һәм балалар киләсәген ҡайғыртмауы, әсәләрҙең балаларын атайһыҙ итеүгә еңел ҡарауы уларҙың ғаилә тормошона әҙер түгеллеген күрһәтә. Йәғни, беҙҙең йәмғиәт ҡайһы аралалыр ғаиләгә, ғаилә ҡороуға, ғаилә алдындағы яуаплылыҡҡа өйрәтә торған мәктәп нигеҙен юғалтҡан булып сыҡты. Быны беҙгә ололар өйрәтһә, үҙ сиратыбыҙҙа беҙ балаларға һалырға бурыслы.

Советтар осоро, һуғыш һәм һуғыштан һуңғы замандар, унан тукһанынсы йылдар көрсөгө беҙҙең милләткә лә йоғонто яһаны һәм ғаиләләрҙең ныҡлығы, бөтөнлөгө ҡаҡшаны. Ҡатын-ҡыҙҙы ирҙәр менән бер рәттә эшкә егеү, унан ир-егетһеҙ ҡалған ҡатындарҙың тотош быуынды яңғыҙ үҫтереүе, унан ирҙәрен эскелек һаҙлығынан ҡотҡарып айҡашыуы гүзәл затты артыҡ ныҡ бешектереп, хатта ки идара итеүсе итеп тә ҡуйҙы шул. Тик был дөрөҫ түгел һәм йәшәйеш уны яйлап төҙәтә лә. Күрәһегеҙ, йәштәр бөгөн эскесе түгел, ир балалар күпләп иманға килде, сәләмәт тормошто һайланы, ниндәй ҙә кәсеп үҙләштереп, мал табырға, ғаиләләрен аҫрарға тырышып яталар. Аңлы, алдынғы ҡарашлы, белемле улар. Һәм ошо ыңғай күренештәр беҙҙең тап ана шул ғаилә торошон да нығытыр, тип уйлайым. Ирҙәр бит яуаплылыҡты үҙ инңәренә ала бара. Йәнәшәһендә ышаныслы ир, балаларына абруйлы атай булғанда, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа үҙ ыҙанына ҡайтыр, наҙлы һәм нескә алиһәгә әүерелер.

**Бөгөн ҡатын-ҡыҙ араһында матур, йәш, һомғол булыу модаға инеп китте. Һеҙҙеңсә, ҡатын-ҡыҙ матурлығы ни йәшкәсә үҙ көсөнә эйә була ала?**

- Яраталар икән, ғүмер буйына ла ҡатын үҙен донъялағы иң матуры итеп тойоп йәшәй ала. Ундай тойғо тышҡы ҡиәфәттән, яҡшы кейенеүҙән йәки тән төҙөлөшөнән генә яралмай бит ул. Матурлыҡ хисе эргәндәгеләрҙең йылы, яҡты ҡарашынан, ҡанатландырыр һүҙенән тыуа. Мәҫәлән, ҡыҙ баланы ата-әсәһе һөйөп кенә үҫтерә икән, ҡатынды ире иркә-наҙҙа тота икән, улар үҙҙәрен матурҙың матуры итеп хис итә. Был эске торошта барлыҡҡа килә торған бер нур ул. Була ҡурсаҡ кеүек ҡыҙҙар ҙа, һомғолдар ҙа матур булып күренмәй. Һин уларҙың сибәрлеген күрәһең, ә һоҡланмайһың, сөнки күрелгәндең тере энергетикаһы тойолмай. Тимәк, был ҡыҙҙы яратмағандар йәки етерлек яратыу бирмәйҙәр.

Тышҡы ҡиәфәткә артыҡ иғтибар биреү, минеңсә, дөрөҫ түгел. Бөгөн ҡатын-ҡыҙ интернетта ла, зәңгәр экрандарҙа ла бер төҫкә инеп ҡалды. Фитнес клубтар, пластик операциялар йәки заман модаһынан ҡалышмау ҡартайыуҙы туҡтата алмай. Үҙ йәшеңде ҡабул итә һәм шул дәүереңдә лә тулы тормош менән йәшәй белергә кәрәк. Тышҡы матурлыҡҡа алданып эске матурлыҡты онотмаҫҡа кәрәк. Эске донъяңдың байлығы, таҙалығы, иманлылығы, изгелеге һинең тышҡы ҡиәфәтеңдән сағылышы ла ул.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙЛЫҒЫҢДЫ

## һаҡлап ҡалтыранғансы...

Яҡшы бала яман атаның ишектәге башын түргә һалыр, яман бала яҡшы атаның түрҙәге башын ишеккә һалыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Балалыҡ һәм үҫмер йылдарында үҙ теләктәрен ҡандырыу менән генә булған йәш кеше йылдар үтеү менән күңел бушлығына юлығыр.

**(В. Сухомлинский).**

Кеше бәхетһеҙ икән, быға ул үҙе генә ғәйепле. Булдыра алмағанды булдырырға теләгәндәр - бәхетһеҙ, булдыра алғанды теләгәндәр - бәхетле.

**(Эпиктет).**

Күп аҡса туплай алыу - ҡыйыулыҡ; уны һаҡлай алыу - аҡыллылыҡ; ә уны ҡуллана белеү - сәнғәт.

**(Б. Ауэрбах).**

Байлыҡты арттырыу һәм һаҡлау хәстәре менән йәшәгәнсе, фәҡир булыуың мең артыҡ.

**(Федр).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Арыҫлан балаһы инә арыҫлан үлгәс, кәзәләр араһына килеп юлыға һәм улар тәрбиәһендә үҫә. Әлбиттә, кәзәләр араһында үҫкән, улар тарафынан тәрбиәләнгән арыҫлан үҙен шулай уҡ кәзә тип хис итә. Ул кәзәләр шикелле үк вегетариан була һәм тик үлән менән генә туҡлана, улар һымаҡ уҡ мыҡрыҡлай. Берҙән-бер көндө кәзәләр көтөүе эргәһенә ҡарт арыҫлан килә һәм үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай тора. Кәзәләр араһында йәш арыҫлан йәшәй. Кәзәләр уның арыҫлан икәне тураһында уйлап та бирмәй һәм унан ҡурҡмай ҙа. Ә бына ҡарт арыҫланды күргәс, улар төрлөһө төрлө яҡҡа һибелеп ҡаса. Йәш арыҫлан да ҡасырға уҡтала, тик уны ҡарт арыҫлан тотоп ала ла, күл янына алып бара һәм уны көҙгөләй ялтырап ятҡан һыу өҫтөндәге сағылышына ҡарарға мәжбүр итә. Шунда йәш арыҫлан үҙенең ҡарт арыҫлан һымаҡ уҡ ҡиәфәттә икәнен күрә. Ҡурҡыуы һәм күҙ йәштәре үтә, башындағы кәзә һыны аҡрынлап юғала башлай. Хәҙер инде ул үҙенең кәзә түгеллегенә ышана, әммә арыҫлан икәненә лә ышанып етмәй. Теҙ быуындары ҡалтырауҙы дауам итә. Ҡарт арыҫлан уны үҙенең өңөнә алып килә. Аҡрынлап йәш арыҫлан ҡыйыулана төшә. Мәмерйәгә ингәс, ҡарт арыҫлан уға бер аҙ ит бирә. Йәш арыҫлан ит еҫенән уҡшып, моронон ситкә бора. Әммә ҡарт арыҫлан уны ит ашарға мәжбүр итә. Йәш арыҫлан моронон ҡабаттан иткә яҡынайтҡанда ҡапыл ғына эсендә йәшеренгән ниндәйҙер тойғо уяна. Ул кинәнеп ит ашай башлай. Ит тәме аша уның булмышындағы кәзә булып мыҡрыҡлау юғала һәм олоу барлыҡҡа килә. Олоғандан һуң иһә йәш арыҫлан булмышында кәзә бөтөнләй юғала һәм ул ысын арыҫланға әйләнә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 30 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3600
Заказ - 358/05

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.